ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7-13 ноябрь (ҡырпағай) 2025

№44 (1188)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Салауат Юлаев һәйкәлен...**

һүтеп бөтөп киләләр



3

**"Ритайым", "ахрита" бейеүҙәрен...**

ҡасандан алып бейейҙәр?



8

**Байлыҡ хаҡына...**

асылыбыҙҙы юғалтмайыҡ!



9

**Әсәләр көтәләр улдарын...**



15

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!* ***Баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мөл бөгөн: 2026 йылдың 1-се яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы бара. ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә ярты йылға яҙылыу хаҡы - 1054 һум 50 тин. Күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле "Киске Өфө"гә яҙылырға ашығығыҙ - үкенмәҫһегеҙ.***

*Мөхәрририәт.*

ҠОТЛАЙБЫҘ!

## ХАЛЫҠТАР БЕРҘӘМЛЕГЕ КӨНӨ

**Өфөнөң "Торатау" Конгресс-холында Халыҡтар берҙәмлеге көнөнә арналған тантаналы сара үтте. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика халҡын байрам менән ҡотланы.**



"Бөгөн Башҡортостан халыҡтары Махсус хәрби операция барышында, йөҙҙәрсә йыл элекке ата-бабаларыбыҙ кеүек үк, йәнә Ватаныбыҙҙы һаҡлай. Алыҫ 1812 йылда, башҡорт полктары Наполеон һөжүменә ҡаршы батырҙарса һуғышҡан кеүек. Беренсе донъя һуғышы осорондағы кеүек. Ул саҡта ла беҙҙең төбәк фронтҡа ярты миллионға яҡын ул һәм ҡыҙ биргән. Бөйөк Ватан һуғышына иһә Башҡортостандан 700 меңдән ашыу кеше киткән. Бөтә совет халҡы менән бергә Бөйөк Еңеү яулаған яҡташтарыбыҙҙың батырлыҡтары мәңгелеккә Тыуған илдең героик йылъяҙмаһына индерелгән. Тарих күп тапҡырҙар илебеҙ халыҡтарының һынау сәғәттәрендә тағы ла нығыраҡ берләшеүен раҫлай. Дошман нисек кенә аяуһыҙ булып күренмәһен, барыбер ҙә еңеү беҙҙең яҡта булды, буласаҡ", - тине Радий Хәбиров һәм төбәк халҡына ихлас рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе. "Минең өсөн һеҙ барығыҙ ҙа - ысын геройҙар. Бер кем дә паникаға биреләмәне һәм ҡасып китмәне. Ил, йәмғиәт бирешмәне. Беҙ берләштек һәм Ватаныбыҙҙы тағы ла көслөрәк иттек. Һәр ваҡыт шулай буласаҡ! Байрам менән!" - тип йомғаҡ яһаны республика етәксеһе.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ЙЫЛ ӘЙЛӘНӘҺЕНӘ...

**Рәсәйҙә йыл әйләнәһенә хәрби хеҙмәткә саҡырыу башлана. Дәүләт Думаһы депутаттары "Хәрби бурыс һәм хәрби хеҙмәт тураһында" һәм "Альтернатив граждан хеҙмәте тураһында" закондарға тейешле төҙәтмәләрҙе өсөнсө уҡыуҙа ҡабул итте.**

2026 йылдың башынан запаста булмаған граждандарҙы хәрби хеҙмәткә саҡырыу 1 ғинуарҙан 31 декабргә тиклем дауам итәсәк (әле йылына ике тапҡыр - 1 апрелдән 15 июлгә һәм 1 октябрҙән 31 декабргә тиклем). Хәрби хеҙмәт үтеү урындарына йылына ике тапҡыр - 1 апрелдән 15 июлгә һәм 1 октябрҙән 31 декабргә ҡәҙәр оҙаталар. Шул уҡ ваҡытта хеҙмәт итеү урындарына башҡа ваҡытта ебәрергә тейешле граждандар исемлеге ҡарала.

Үҙгәреш авторҙары, Дәүләт Думаһының оборона буйынса комитеты рәйесе Андрей Картаполов һәм уның беренсе урынбаҫары Андрей Красов фекеренсә, яңы сроктар хәрби комиссариаттарға йөкләмәне бер тигеҙ бүлергә мөмкинлек бирәсәк. Бынан тыш, яңы закон буйынса Повесткалар реестрында урынлаштырылған повестка буйынса йыйылыу пунктына 30 көндән һуңға ҡалмайынса килеп етергә кәрәк. Закон рәсми баҫылып сыҡҡандан һуң үҙ көсөнә инә, тип хәбәр итә Дәүләт Думаһының матбуғат хеҙмәте.

СӘЙӘСИ ЭССЕ

## ОНОТОЛҒАН БАЙРАМ



**Беҙҙең быуындың бала сағы совет власының сәскә атҡан сағына тура килде. Уҙған быуаттың 50-се - 60-сы йылдары. Беҙ бик бәләкәйбеҙ әле, ауылыбыҙҙың башланғыс мәктәбендә уҡып йөрөйбөҙ. Мәктәп бинаһы бәләкәй генә ағас өйҙән ғибәрәт, уның ике класы, коридоры һәм уймаҡтай ғына уҡытыусылар бүлмәһе бар. Беренселәрҙән ни барыһы 10 ғына бөртөк балаларбыҙ. 1-се һәм 3-сө, 2-се һәм 4-се кластарҙы ҡушып уҡыталар. Үҙаллы эшендә тиҙ тамамлаһаң, Зәйтүнә апайбыҙҙың өлкән класс уҡыусылары менән ниҙәр эшләгәнен күреп, тыңлап ултыраһың. Класс стенаһында матур рамлы портрет элеп тора: уны беҙ Лилин бабай тип беләбеҙ. Апабыҙ йыр дәресендә уға арналған йыр өйрәтте, ололар Үктәбер байрамы тип атап йөрөткән көҙгө бер көндә, беҙҙе октябряттар сафына алып, Лилин бабайыбыҙҙың бик бәләкәй сағында төшкән һүрәте ҡуйылған ҡыҙыл йондоҙсоҡто түштәребеҙгә беркеткәс, клуб сәхнәһендә хор менән ошолай тип йырланыҡ: "Ленин һөйөклө атабыҙ, ул һәр көн беҙҙең менән. Беҙ уның рәс(е)мен биҙәйбеҙ гөл-аҫыл сәскә менән...".**

(Дауамы 4-5-се биттәрҙә).

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!



*Гәзитте уҡығанда уның ыңғай энергетикаһынан тау-таштар ярырҙай көс арттҡандай була: кемгәләр изгелек ҡылғы, яҡшыраҡ булғы, йылы, яғымлы мөнәсәбәт, ярҙам менән мохтаждарҙың хәлен еңеләйтке килеп китә, күңел байый, индәрҙә ҡанат үҫкәндәй хис итәһең. Атлар аҙымдарың баҙыҡлана, һының турая, әйкәп торған, сиселмәҫтәй тойолған һорауҙарға яуаптар табып ҡыуанаһың, донъя көткәнеңдә ҡулланаһың.*

12+

ИҒТИБАР!



# ТУРА БӘЙЛӘНЕШ

**11 ноябрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостан юлдаш телевидениеһы, "Рәсәй 24", "Башҡортостан 24", "Бөтә Өфө", "Сәләм", UTV һәм "Юлдаш" радиостанцияларының тура эфирында, шулай уҡ социаль селтәрҙәрҙә республика халҡының көнүҙәк һорауҙарына яуап бирә. Бәйләнештең башланыу ваҡыты - 19:00 сәғәт.**

Республика етәксеһенә текст рәүешендәге йәки видео һорауҙы бер нисә юл менән бирергә мөмкин:

- Башҡортостан Башлығының рәсми сайтындағы махсус бүлектә ***vopros.glavarb.ru*** һылтанма буйынса;
- МАХ милли мессенджерында ***max.ru/glavarb_pl...*** чат-бот аша;
- "Телеграм"да ***t.me/glavarb_pl...*** чат-бот аша;
- "Бәйләнештә" ***vk.me/glavarb_pl...*** чат-бот аша;
- "Одноклассники" селтәрендә ***ok.ru/group/ 7000...*** чат-бот аша;
- "Дәүләт хеҙмәттәре. Бергә хәл итәбеҙ" сервисындағы ***pos.gosuslugi.ru/lkp/direct-line/10441/*** һылтанма аша.

Әгәр ҙә һеҙ видеоһорау яҙырға уйлаһағыҙ, түбәндәге тәҡдимдәрҙе иҫтә тотоғоҙ:

- видеояҙма башында исем-фамилияғыҙҙы, атайығыҙҙың исемен, ауыл йә ҡалағыҙҙы, районығыҙҙы әйтегеҙ, шунан ғына һорауығыҙҙы бирегеҙ;
- мобиль ҡушымта аша һалғанда, видеоның оҙайлығы бер минуттан да артмаһын. Компьютерҙа 10 мегабайттан ашыу булырға тейеш түгел;
- видеояҙманы яҡтыла төшөрөгөҙ. Һорау биреүсе кешенең йөҙө асыҡ күренһен, күләгә төшмәһен. Һорау биреүсенең артында тәҙрә, лампа йәки башҡа яҡтылыҡ сығанағы булмаһын. Видеоны яҙҙырғанда камераны горизонталь тотоғоҙ, шылдырмағыҙ. Камера ныҡ беркетелгән булһын. Видеоны телефондың фронталь камераһына селфи рәүешендә төшөрһәгеҙ ҙә горизонталь тотоғоҙ. Видеоһорау урамда яҙылһа, һеҙҙең тауыш яҡшы ишетелергә тейеш. Һорауҙы бер төркөм кеше бирһә, һәр береһенең йөҙө асыҡ күренһен, тауышы яҡшы ишетелһен. Мөмкинлек булғанда микрофон ҡулланығыҙ. Бер планда төшөрөгөҙ һәм ебәрерҙән алда видеояҙманы монтажламағыҙ. Яҙмаға музыка һалмағыҙ. Сит тауыштар булмаһын. Видеоның аҙағында һорауҙың Радий Хәбиров менән Тура бәйләнешкә тәғәйенләнеүен әйтегеҙ.

**Радий Хәбиров менән Тура бәйләнешкә видеоһорауҙар 10 ноябрь киске сәғәт 7-гә тиклем ҡабул ителә.**

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ТӨҘӨЛӨШ ДАУАМ ИТӘ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң "Әр-Рәхим" мәсетен архитектура-художестволы яҡтыртыуҙың өс концепцияһы менән танышты.**

Баш ҡаланың Инвестиция-төҙөлөш комитеты генераль директоры Марат Вәсимов һүҙҙәренсә, бөтәһе ете вариант тәҡдим ителгән, Өфөнөң архитектура советы улар араһынан өсәүҙе һайлап алған. Уларҙың һәр береһенең йөмиғ мәсетен киске һәм төнгө ваҡытта, шулай уҡ мосолман һәм дәүләт байрамдары көндәрендә яҡтыртыуҙың үҙ варианты бар.

"Беҙ архитекторҙарҙың һәм белгестәрҙең фекерен иҫәпкә алып, бергәләп һайларбыҙ. Әммә иң мөһиме, төҙөлөштө тергеҙеү тураһында ҡарар ҡабул иттек. Аҡсала йөҙәбеҙ, тип әйтә алмайым. Улай түгел. Ләкин ошондай ҡатмарлы осорҙа булған ресурстар менән иң мөһимен эшләйбеҙ - мәсеттә эште бер көнгә лә туҡтатмайбыҙ. Беҙгә төҙөргә лә төҙөргә әле. Марат Вәсфи улы Вәсимовҡа ҙур рәхмәт. Уның тәжрибәһе ҙур, күмәкләп эште аҙағына еткерербеҙ. Бик ҡатмарлы объект. Аллаһ ярҙамы менән башҡарып сығырбыҙ", - тип яуап бирҙе Радий Хәбиров "Башинформ" хәбәрсеһенең һорауына.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, мәсет 2006 йылда төҙөлә башланы. Төҙөлөштө төрлө инвесторҙар финансланы. 2016 йылдың йәйендә эштәр туҡтатылды. 2023 йылдың сентябрендә Башҡортостан Башлығы "Әр-Рәхим" мәсете төҙөлөшөн яңынан башлау буйынса эш кәңәшмәһен үткәрҙе. Бынан һуң белгестәр объектты комплекслы тикшерҙе һәм уның торошон баһаланы. 2024 йылдың 10 апрелендә Радий Хәбиров ҡатнашлығында мәсеттә ҡабаттан төҙөлөш эштәре тергеҙелде.

# ҺӨЖҮМ ИТЕП ТОРАЛАР

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Түбәнге Новгородта Рәсәйҙең Именлек советы секретары Сергей Шойгу етәкселегендә яғыулыҡ-энергетика комплексы һәм оборона-сәнәғәт объекттарының хәүефһеҙлеге мәсьәләләре буйынса кәңәшмә эшендә ҡатнашты.**

Осрашыуҙа Волга буйы федераль округы субъекттары етәкселәре, министрлыҡтар һәм ведомстволар вәкилдәре йыйылды. "Беҙҙең төп бурыс - күрелгән сараларҙың һөҙөмтәлелеген тикшереү", - тип мөрәжәғәт итте Сергей Шойгу кәңәшмәлә ҡатнашыусыларға.

"Оборона-сәнәғәт, яғыулыҡ-энергетика комплексы предприятиеларын БПЛА-ның террористик һөжүменән һаҡлауҙы тикшерҙек. Сергей Кужугетовичҡа һәм Игорь Анатольевичҡа был эштең республикабыҙҙа нисек ойошторолоуы тураһында һөйләнек. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һөжүмдәр һаны арта. Уларға ҡаршы тороу өсөн беҙ тәрән оборона системаһын булдырҙыҡ, ул пассив һәм әүҙем һаҡлауҙы үҙ эсенә алған. Ошо йәһәттән илдең Оборона министрлығы менән әүҙем эшләйбеҙ. Кешеләрҙе яҡлау - төп бурысыбыҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

# МӘКТӘП ДИРЕКТОРҘАРЫНА...

**Башҡортостан Хөкүмәте ауыл ерендә эшләгән дөйөм белем биреү учреждениелары етәкселәренә гранттар түләү тәртибен раҫланы. Документҡа Премьер-министр Андрей Назаров ҡул ҡуйған.**

Яңы башланғыс ауыл мәктәптәре директорҙарын һөнәри уңышҡа дәртләндереүгә һәм республиканың алыҫ райондарында белем биреү учреждениеһы етәксеһе һөнәренең абруйын күтәреүгә йүнәлтелгән. Аҡса йыл һайын республика бюджетынан махсус ойошторолған конкурста еңеүсе тип танылған белем биреү ойошмаларының иң яҡшы етәкселәренә бүленә.

Республиканың Мәғариф министрлығы ауыл ерендә мәғарифты үҫтереүҙә юғары ҡаҙаныштарға өлгәшкән иң яҡшы идара итеү кадрҙарын конкурс буйынса һайлап алғандан һуң гранттар биреү тураһында ҡарар ҡабул итергә тейеш. Конкурста еңеүселәргә бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата ярҙам күрһәтелә.

Грант алыусылар бер нисә талапты үтәргә бурыслы, шул иҫәптән аҡса алғандан һуң мәктәптә кәмендә 10 йыл эшләргә кәрәк. Ошо шартты үтәмәгән осраҡта аҡсаны республика бюджетына кире ҡайтарыу талап ителә.

Гранттар түләү тәртибен үтәүҙе Башҡортостан Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев контролдә тота.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2025 йылдың 1 ғинуарынан Башҡортостанда йыл һайын ауыл ерендә эшләгән дөйөм белем биреү ойошмалары етәкселәре өсөн 50 грант булдырылды. Һәр гранттың суммаһы - 690 мең һум.

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.**

# ТҮЛӘҮЛЕ, ЛӘКИН УҢАЙЛЫ



**Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте белдереүенсә, баш ҡала үҙәгендә булдырылған түләүле муниципаль парковка өсөн хаҡты йыл аҙағына тиклем күтәреү ҡаралмай.**

Шулай ҙа айырым участкаларҙа киләсәктә уның үҙгәреүе ихтимал. Бер үк ваҡытта түләүле парковка урындары һанын арттырыу ҙа күҙаллана. Әле дүшәмбе - йома көндәрендә 7:00 сәғәттән 21:00 сәғәткә тиклем автомашинаны ҡуйыу 40 һум тора. Был хаҡ - Рәсәй буйынса иң түбәндәрҙең береһе. Ҡулланыусылар автомобилде 20 минутҡа тиклем бушлай ҡалдыра ала. Ә социаль, спорт, медицина һәм мәҙәни объекттарға яҡын урындарҙа был ваҡыт 60 минутҡа тиклем оҙайтылған. Ял көндәрендә түләү бөтөнләй алынмай.

Түләүле парковкалар баш ҡалала 2025 йылдың июнендә эшләй башланы. Бөгөнгө көндә урындарҙың дөйөм һаны - 1188. Үткәрелгән анализ күрһәтеүенсә, ҡала водителдәренең күпселеге был маҡсатҡа айына 150-350 һум тотона. Түләүле парковкалар системаһында 108 меңгә яҡын ҡулланыусы теркәлгән. Шул уҡ ваҡытта уларҙың 75 проценты (81 мең кеше) парковка менән бер тапҡыр файҙаланған. Ҡулланыусылар үҙ автомобилдәрен уртаса 1-2 сәғәткә ҡалдыра.

Башҡортостанда йәшәүсе 7,7 мендән ашыу кеше үҙ автомобилдәре тураһында мәғлүмәтте түләүле парковкалар менән бушлай файҙаланыу хоҡуғын күҙ уңында тотҡан төбәк электрон реестрына индергән (2 988 инвалид; 2 600 хәрби хәрәкәттәр ветераны; 1 932 күп балалы ғаилә ағзалары; 197 электр двигателе менән йыһазландырылған транспорт хужалары).

Проект үҫеш юлында. Мәҫәлән, бер ай элек "Горпарковка" ҡушымтаһы һәм проекттың parking02.ru веб-сайты аша түләү өсөн бушлай интернетҡа инеү нөктәһе эшләй башлаған. Был сара мобиль интернетты сикләгән ваҡытта парковка менән файҙаланыуҙы көйләүгә йүнәлтелгән.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Ресурстар менән тәьмин итеүсе ойошмалар йылылыҡ өсөн квитанциялар әҙерләгән. Электрон белдереүҙәр 1 ноябрҙә, ә ҡағыҙға баҫылғандары ай башында почта аша ебәрелә. Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, ағымдағы йылдың 1 июленән Башҡортостанда йылылыҡ энергияһына тариф индексацияланды. Ҡулланыу күләменә һәм хеҙмәт өсөн түләүгә йылытыу миҙгеленең иртәрәк башланыуы йоғонто яһаны. Быйыл Өфөлә 25 сентябрҙә (былтыр иһә 4 октябрҙә) йылы бирелде.

✓Өфөлә 12 ноябрҙән 14 ноябргә тиклем Рәсәй сәнәғәт форумы һәм "Машиналар эшләү", "Металл эшкәртеү", "Өфөнөң инновация ҡеүәте" махсуслашҡан күргәҙмәләре үткәрелә. Унда Рәсәйҙең 15 төбәгенән 100-гә яҡын компанияһының, шулай уҡ Беларусь, Ҡаҙағстан һәм Ҡырғыҙстандан вәкилдәренең ҡатнашыуы көтөлә. 30-ҙан ашыу сараның төп йүнәлештәре иретеп йәбештереү һәм контроль, адаптив технологиялар, хеҙмәтте һаҡлау һәм сәнәғәт хәүефһеҙлеге, роботлаштрыу мәсьәләләренә арнала.

✓Өфөлә вуз-ара кампус майҙансығында төбәктең әйҙәүсе юғары уҡыу йорттарын, фәнни үҙәктәрҙе, ижади коллективтарҙы берләштереүсе Фән айлығы башланды. Был турала республиканың Мәғариф һәм фән министрлығынан хәбәр иттеләр. Ай дауамында йәштәр фәнен үҫтереүгә, технологияларҙы популярлаштырыуға, креатив индустрияларҙы күрһәтеүгә йүнәлтелгән лекциялар, семинарҙар, оҫталыҡ дәрестәре, форумдар, кино күрһәтеү ойошторола.

✓Президент Владимир Путин шаршамбы көнө үткән Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса советта Бөтә Рәсәй казактар йәмғиәте атаманы Виталий Кузнецовтың башланғысын хупланы һәм киләһе 2026 йылды Рәсәй халыҡтары берҙәмлеге йылы тип иғлан итеү тураһында тәҡдимгә ыңғай яуап бирҙе. "Кисә илебеҙ Халыҡтар берҙәмлеге көнөн билдәләне - был һәр кемебеҙ өсөн бик мөһим байрам. Беҙҙең берҙәмлектән, халыҡтар араһындағы тыныслыҡ һәм татыулыҡтың мөһимлеген аңлауҙан Ватаныбыҙ киләсәге тора", - тип атамандың һүҙҙәрен килтерә ТАСС. Президент РФ Хөкүмәте вице-премьеры Татьяна Голиковаға тейешле ҡарарҙар проекттарын әҙерләргә ҡушты.

✓Республиканың тағы 11 бәләкәй ауылы юғары тиҙлекле интернет менән файҙалана башланы. Улар - Әбйәлил (Иҙәш-Ҡусҡар), Архангел (Айытмәмбәт), Благовещен (Иҫке Елек), Ҡыйғы (Сурбай), Кушнарен (Елек), Нуриман (Ишморат), Салауат (Әлкә), Хәйбулла (Әбделнасир, Бакаловка, Сәғит) райондары ауылдары. "Ауыл-ҡалаларҙа мобиль интернет бар икән, тимәк, халыҡ Дәүләт хеҙмәттәре менән ҡуллана, онлайн уҡыуҙар үтә ала, бизнес үҫешә", - ти республиканың дәүләт идаралығын һанлы үҫтереү министры Геннадий Разумикин.

КӨН ТЕМАҺЫ

# САЛАУАТ ЮЛАЕВ ҺӘЙКӘЛЕН...

## һүтеп бөтөп киләләр



**Өфөлә "Салауат Юлаев һәйкәле" федераль әһәмиәттәге мәҙәни мираҫ объектын һаҡлау (реставрациялау) мәсьәләһе буйынса Башҡортостан Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идаралығы ҡарамағындағы Күҙәтеү советының сираттағы ултырышы үтте. Совет ағзалары Рәсәйҙәге иң билдәле атлы статуяларҙың береһе менән эш процесының барышын күрҙе.**

Идаралыҡ етәксеһе Салауат Ҡолбахтин бөтә эштәрҙең план буйынса һәм алдан билдәләнгән график сиктәрендә барыуын билдәләне. Әлеге ваҡытта милли герой һыны урынынан төшөрөлгән һәм цехҡа алып кителгән. Аттың өҫкө өлөшө лә ҡутарылған. Постаментта аттың аҫҡы өлөшө генә ҡала, ул да алдағы көндәрҙә һүтеләсәк.

- Аттың өҫкө өлөшөндәге элементтар октябрь башында һүтелде. Һуңғы элемент - аттың аҫҡы өлөшө - ай аҙағына тиклем һүтелде. Һуңынан бөтә элементтарҙы ентекле эш башлар өсөн цехҡа күсерәләр, - тип һөйләне Салауат Ҡолбахтин. - Күҙәтеү советының төп бурысы һәм маҡсаты - барыһы ла асыҡ булһын, халыҡ һәм битараф булмаған кешеләр бөтәһен дә белә алһын өсөн процесты, эштәрҙең регламентҡа тап килеүен тикшереү.

Монументаль скульптураны реставрациялаусы Михаил Татарников аңлатыуынса, башта һәйкәлде реставрациялау ҙур ҡатмарлыҡ тыуҙырған. Шуға күрә белгестәр тәү сиратта постаменттың торошон, һәйкәл тирәһендәге тупраҡты, һәйкәлдең тотороҡлолоғон өйрәнгән. Һуңынан ғына реставраторҙар һүтеп алыу эшенә тотонған.

- Һүтеү өс этапта үтте һәм әлеге ваҡытта бара, - тип һөйләне реставратор. - Беренсе этап Салауаттың фигураһын һүтеү булды. Икенсе этапта аттың өҫкө өлөшө һүтелде. Өсөнсө этап - аттың аҫҡы өлөшөн плинт менән һүтеү. Аттың аҫҡы өлөшөн плинт менән һүтеү өсөн беҙ көс каркасын йыйыбыҙ, унын артында барыһы ла күтәрелеп, майҙанға ҡуйыла, һуңынан тралға ҡуйыла һәм реставрация цехына алып барыла. Ни өсөн был кәрәк? Артабан, ат фигураһы ҡыуыш декоратив тышлыҡ булып тора, унын эсендә коррозияға дусар булған һәм авария хәлендә булған каркас бар.

Реставратор әйтеүенсә, һәйкәлде этаплап һүтеү унын 17-19 тонна ауырлығы менән бәйле, шуға күрә 300 тонна йөк күтәреүсәнлектәге кран ҡулланыла.

Кран һәйкәлдең өлөшөн күтәрә алһын өсөн ҡурғандың бер өлөшөн ҡырҡырға, кран һәйкәлгә яҡыныраҡ килһен өсөн өҫтәмә терәк плитәләр һалырға тура килде. Бындай һәйкәлде тулыһынса күтәреү мөмкин түгел, тип билдәләне Михаил Татарников.

Цехта һәйкәлде реставрация эштәре көтә. Юғалған ат медальоны фотоларға ярашлы суйындан яңынан ҡойола.

Күҙәтеү советы ағзаһы, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Шамил Вәлиев реставрация эшендә ашыҡмаҫҡа кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Өфө ҡалаһы һәм бөтә башҡорт халҡы символы Әгиҙел йылғаһы битләүенә таныш ҡиәфәттә ҡайтырға һәм бында оҙаҡ йылдар торорға тейеш.

- Реставраторҙарҙың барыһын да сифатлы, хәүефһеҙ һәм килеһе 60 йылға түгел, ә кәмендә бер быуатҡа эшләү өсөн тыныс ваҡыты һәм мөмкинлектәре булырға тейеш, - тине Шамил Вәлиев.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ҠИММӘТЛӘНӘ...



**Башҡортостан статистиктары тауарҙарҙың ҡайһы бер төрҙәренә, шул иҫәптән аҙыҡ-түлеккә һәм бензинға уртаса хаҡтарҙың йөнә үҙгәреүе тураһында хәбәр итте.**

27 октябргә ҡарата мәғлүмәттәр буйынса, төбәктә тауыҡ ите, сөгөлдөр, ҡаймаҡ, шымартылған дөгө, һуған, балалар өсөн киптерелгән һөт ҡатышмалары, колбаса, балалар өсөн ит һәм емеш-еләк консервалары, макарон, тары ярмаһы, бойҙай икмәге, ҡара сәй, кишер, шәкәр, туңдырылған балыҡ, аҡ май һәм вермишель хаҡының аҙыраҡ төшөүе күҙәтелә. Бер аҙнала был аҙыҡ-түлектең хаҡы 0,01-1,35 процентҡа түбәнәйгән.

Ә яңы өҙөлгән ҡыяр һәм помидор, кәбеҫтә, алма, ҡарабойҙай ярмаһы, картуф, сыр, көнбағыш майы, банан, эремсек, маргарин, һөт, йомортҡа, суҫҡа ите, һарыҡ ите, һыйыр ите, балалар өсөн йәшелсә консервалары, он, сосиска, сарделька, тоҙ һәм печенье ҡиммәтләнгән. Бер аҙнала 0,02 - 5,9 процентҡа артҡан.

Ошо уҡ ваҡытта дизель яғыулығы, АИ-92, АИ-95, АИ-98 һәм башҡа маркалы бензин 0,55-0,82 процентҡа ҡыйбатланған.

*ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ*



# ЕГЕТТӘР ИЛДЕ ҺАҠЛАЙ

● **Билдәле булыуынса, 2025 йылдың 7 июленән Оборона министрлығы менән контракт төҙөгәндәр бер тапҡыр бирелә торған 1 миллион һум аҡсаға иҫәп тота ала.** Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров МХО биләмәһендә хеҙмәт итеү өсөн Оборона министрлығы менән контрактҡа ҡул ҡуйған яҡташтарыбыҙға бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәрҙең ғәмәлдә булыу ваҡытын 2025 йылдың 30 ноябренә тиклем оҙайтты. Республика етәксеһенең указына ярашлы, сара 2025 йылдың 7 июленән оборона ведомствоһы менән килешеү төҙөгәндәргә ҡағыла. Бынан алдараҡ Радий Хәбиров МХО биләмәһендә хеҙмәт итеү өсөн Оборона министрлығы менән контрактҡа ҡул ҡуйған республика халҡына бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәрҙең ғәмәлдә булыу ваҡытын 2025 йылдың 31 октябренә тиклем оҙайтҡайны.

● **Салауат ҡалаһынан МХО зонаһына гуманитар ярҙам оҙатылды. Колоннаны ҡала хакимиәте башлығы Марат Заһиҙуллин етәкләне.** Активистар хәрби хеҙмәткәрҙәргә өс автомобиль, ике квадроцикл, биш мотоцикл һәм күсмә мунса, шулай уҡ элемтә саралары, "Булат" дрон детекторҙары, Mavic 3 квадрокоптерҙары, генераторҙар, төҙөләш материалдары, автоинструменттар, маскировка селтәрҙәре, окоп шәмдәре, медикаменттар, оҙайлы һаҡланған продукттар һәм яугирҙарға шәхси посылкалар алып барҙы. "Беҙ ябай йөк кенә тейәп барманыҡ. Алғы һыҙыҡта бөгөн һәм хәҙер талап ителгән, яугирҙар үҙҙәре һорапан кәрәкле нәмәләр илттек. Беҙ ил һаҡсылары торған, һәр иртә уяулыкты талап иткән, ә һәр көн маҡсатҡа яҡынлаштырған урынға барып еттек", - ти Марат Заһиҙуллин. Гуманитар колоннаны ойоштороуҙа йәмәғәт ойошмалары һәм предприятиелар вәкилдәре, ирекмәндәр, депутаттар, эшҡыуарҙар ҡатнашҡан.

● **Башҡортостандан "Булат" МХО ветерандары командаһы следж-хоккей буйынса Рәсәй чемпионатында ҡатнаша.** Турнир Һамарҙа "Беҙҙең заман геройҙары" кубогы сиктәрендә үтә, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Адаптив спорт үҙәгенән. Илдең иң көслө 8 командаһы финалға юллама һәм төп трофей өсөн көрәшә. Аҙаҡтан иң шәп дүрт команда Рәсәй чемпиондары исеме һәм приз фонды өсөн көрәште дауам итәсәк. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, "Булат" командаһы "Кировец" хоккей клубы нигеҙендә төҙөлдө. Ул тулыһынса Махсус хәрби операция ветерандарынан тора.

● **Мәсетле районынан "Башҡорт" ҡушаматлы Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы муниципалитет хакимиәте башлығы Әнис Әсәҙуллиндан рәхмәт хаты алды.** Ҡыҫҡа ваҡытлы ялға ҡайтҡан яугирға шулай уҡ милли музыка ҡоралы ҡумыҙ һәм урындағы ирекмәндәр теккән йылы кофта бүләк иттеләр. Фронтта "Башҡорт" хәрби батырлығы өсөн миҙал менән бүләкләнгән, тип билдәләне Әнис Әсәҙуллин. "Геройыбыҙ менән ғорурланабыҙ һәм Ватанға тоғро хеҙмәте, ҡыйыулығы һәм ҡаһарманлығы өсөн ихлас рәхмәт белдерәбеҙ", - тине Мәсетле районы хакимиәте башлығы.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Медиалогия"ның III квартал өсөн мәғлүмәттәре буйынса, "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы Башҡортостандың киң мәғлүмәт саралары араһында өҙөмтә килтереү буйынса тәүге урынды биләй. Унын цитата индексы - 56,9. Икенсе урында Mkset.ru (45,46), ә өсөнсөлә - Ufa1.ru (44,01). "Башинформ" төркөмөнөң тағы ике баҫмаһы тәүге 20 иҫәбенә инде: Ufanovosti.ru (8,62) һәм I-gazeta.com (4,42). Шулай уҡ тәүге унау араһында РБК-Өфө, Ufatime, Gorobzor, "Башҡортостан" ДТРК-һы һәм "Коммерсант-Башҡортостан" бар.

✓Әбдрәшит ауылында реконструкциянан һуң Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында һәләк булған һалдаттар иҫтәлегенә арналған мемориаль комплекс асылды. Был хаҡта Әлшәй районы хакимиәте башлығы Наил Әбелғужин хәбәр итте. Бынан алдараҡ Ҡалтасы районының Сумара ауылында Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға арналған мемориал асылды. Шулай уҡ Стәрлебаш районының Тәтер-Арыҫлан һәм Айҙарәле ауылдарында фронтовиктарға һәйкәлдәр ҡуйылды.

✓Әбйәлил районында урынлашҡан "Яҡтыкүл" шифаханаһы "Хеҙмәт етештереүсәнлеге" федераль проекты сиктәрендә һаҡсыл технологиялар индерә башлаған. Был турала килешеүгә Башҡортостан Хөкүмәте ойошма етәкселеге менән ҡул ҡуйған. Ошо проектта ҡатнашҡан "Ҡарағай" шифаханаһы туҡланыуҙы ойоштороуҙы "Швед өҫтәле" файҙаһына тулыһынса яңыртҡан. "Был ҡунаҡтарҙы хеҙмәтләндереү тиҙлеген 40 процентҡа арттырырға һәм айына 1 миллион һум самаһы иҡтисади һөҙөмтә алырға мөмкинлек бирҙе", - тип белдерҙе иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов.

✓Ишембай психоневрология интернаты физиотерапия һәм дауалау физкультураһы кабинеттары өсөн 1,7 миллион һумлыҡ реабилитация тренажерҙары һәм дауалау аппаратураһы алды. Район башлығы Азат Ишемғолов хәбәр итеүенсә, был - "Быуындар хәтере" хәйриә фондының ярҙамы. "Яңы медицина ҡорамалдары тәрбиәләнеүселәребеҙҙең һаулығын тергеҙеү һәм йәшәү сифатын күтәреү буйынса эшебеҙҙә мөһим инструмент буласаҡ", - ти учреждение директоры Винер Сөләймәнов.

✓Башҡортостанда бөгөнгө көнгә ҡарата 141 мең бәләкәй һәм урта эшҡыуар теркәлгән. Бер йылда уларҙың һаны 4,6 процентҡа артҡан. Республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров билдәләүенсә, "Эшҡыуарлыҡ сәғәте"ндә алты йылда 1 триллион һумлыҡ инвестицияларҙы үҙ эсенә алған 27 меңдән ашыу проект ҡаралған, һөҙөмтәлә 29 мең эш урыны булдырылған.

ҠЫҪҠАСА

# ЕР УРЫНЫНА - АҠСА

**Башҡортостан Хөкүмәте 2026 йылда инвалид балаһы булған ғаиләләр өсөн бушлай ер участкаһы урынына аҡса түләү тәжрибәһен дауам итергә ниәтләй.** Башҡортостанда Хөкүмәт ҡарары проекты йәмәғәтселек фекер алышыуына сығарылды, ул 2026 йылда ғаиләләрҙең айырым категорияларына ер участкалары урынына аҡса алыу хоҡуғын оҙайта. Атап әйткәндә, ғәмәлдәге ҡарарҙы түбәндәге абзац менән тулыландырыу тәҡдим ителә: "2026 йылда 2025 йылдың 31 декабренә тиклем иҫәпкә торған граждандар бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата түләү алыу хоҡуғына эйә". Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, инвалид бала тәрбиәләгән һәм торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж ғаиләләр, шулай уҡ өс һәм унан күберәк балаһы булған ғаиләләр торлаҡ төҙөү өсөн ер участкаһы йәки 250 мең һум аҡса алырға мөмкин. Бушлай ер участкаһы алырға иҫәпкә тороу өсөн муниципалитет хакимиәтенә ғариза менән мөрәжәғәт итергә кәрәк.

✓ **Башҡортостанда йәшәүселәргә "Рәсәй МЧС-ы" мобиль ҡушымтаһы хаҡында һөйләнеләр.** Файҙалы ҡушымтаны телефонға күсереп алырға кәңәш ителә. Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының матбуғат хеҙмәтендә билдәләүҙәренсә, "һанлы ҡотҡарыусы" ғәҙәттән тыш хәл килеп тыуған осраҡта нимә эшләргә кәрәклеген әйтәсәк, "Макс" ярҙамсыһы аша һорауҙарға яуап бирәсәк һәм хәүефһеҙлек тураһында белемдә тикшерергә мөмкинлек бирәсәк. Ошонда уҡ БПЛА һөжүме янауы тураһында хәбәрҙәр алырға, шунда уҡ ярҙам саҡырырға мөмкин. Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов әйткәнсә, БПЛА һөжүме янаған осраҡта граждандарға смс-хәбәр һәм "112 - Экстрен ярҙам", "Рәсәй МЧС-ы" мобиль ҡушымталары аша push-белдереүҙәр ебәрелә.

✓ **Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының үҙәкләштерелгән клиника-диагностика лабораторияһында 2025 йылда заманса автомат трек системаһы индерелгән.** Был - Рәсәйҙә лаборатория процесының бөтә этаптарын берләштергән беренсе комплекслы линия. Медицина учреждениеһының баш табибы Морат Авзалов хәбәр итеүенсә, яңы комплекс тәүлегенә 10 меңгә тиклем анализ эшләй ала, тикшереү үткәреү ваҡытын 40 процентҡа ҡыҫҡарта. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров клиник дауаханала булды һәм лаборатория ҡоралдарының мөмкинлектәрен юғары баһаланы. "Был Рәсәйҙә анализдар буйынса иң яҡшы үҙәктәрҙең береһе. Республика клиник дауаханаһының диагностика үҙәге уға беркетелгән бер нисә медицина учреждениеһын хеҙмәтләндерә. Анализдарҙы асыҡлауҙа яһалма интеллект ярҙам итә, был - беҙҙең табиптарға яҡшы ярҙам", - тип билдәләне төбәк етәксеһе.

СӘЙӘСИ ЭССЕ

# ОНОТОЛҒАН БАЙРАМ




(Башы 1-се биттә).

Педучилищела, институтта уҡыған йылдарҙа Владимир Ильич Ульянов тураһында бик күп документаль һәм әҙәби әҫәрҙәр менән танышырға насип булды. Советтар дәүерендә Октябрь революцияһына, граждандар һуғышына арналған спектаклдәр ҡуйылды, кинофильмдар төшөрөлдө, бихисап йырҙар ижад ителде. Мәктәптә уҡыған саҡта Михаил Исаковскийҙың "Хушлашыу" тигән йыры йәш күңелдәребеҙгә айырыуса хуш килде, уны русса ла, башҡортса ла бик дәртләнеп йырланыҡ:

*"Бар приказ: уға - көнсығышҡа,*
*Ҡыҙға - көн байышына ...*
*Китте шулай комсомолдар*
*Граждандар һуғышына..."*

1974 йылдың 27 апреле. Мәскәүҙә ВЛКСМ-дың XVII съезы тантаналы концерт менән тамамланды. Беҙ, В.И. Ленин исемендәге педагогия институты студенттары, дөйөм ятаҡтың телевизор ҡуйылған ял итеү бүлмәһенә ошо концертты ҡарарға йыйылғанбыҙ. Бына бер саҡ Кремлдең съездар һарайы сәхнәһенә ул саҡта уҡ киң танылыу тапҡан совет йырсыһы Иосиф Кобзон сыҡты. Концертты алып барыусы талантлы артистың Николай Добронравов менән Александра Пахмутова съезд өсөн махсус рәүештә ижад иткән "И вновь продолжается бой" тигән йырын башҡарасағы хаҡында иғлан итте. Кобзондың былай ҙа көслө һәм күркәм тауышы, микрофон аша тағы ла нығыраҡ көсәйтелеп, мөһабәт залға ғына түгел, бар илгә яңғыраны:

*"И вновь продолжается бой,*
*И сердцу тревожно в груди,*
*И Ленин такой молодой,*
*И юный Октябрь впереди!"*

Александра Пахмутова хәтерләүенсә, был йыр съезд башланыр алдынан ашығыс рәүештә яҙыла, концертҡа бер-ике көн ҡалғас, Иосиф Кобзон "Песняры" вокал-инструменталь төркөмө менән төн буйына репетиция яһай. Тик шуныһы: СССР мәҙәниәт министрлығы цензорҙарына ошо йырҙың һүҙҙәре лә, көйө лә һис оҡшамай, улар, халыҡсан итеп әйткәндә, бүрәнә аша бүре күрә. Ике ҙур талант эйәһенә ошо сәнғәт әҫәре үҙгәртергә бойорола, әммә улар тупаҫ чиновниктар ҡушҡанды үтәүҙән баш тарта. Һөҙөмтәлә ошо революцион рухлы йырҙы концерттарҙа ла, радио һәм телевидениела ла башҡарыу тыйыла. Әммә 1975 йылда Үҙәк телевидениеның "Йыл йыры" тапшырыуында Лев Лещенко уны ҡабатлап башҡара, һәм был әҫәргә "йәшел ут" асыла.

Әүәл Октябрь революцияһы көнөн йыл һайын 7 ноябрҙә бөтә ҙур ил шаулап-гөрләп байрам итеүен дауам итте. Ошо көндә, һауа шарттары ниндәй генә булмаһын, баш ҡалабыҙ урамдарын тултырып, Ҡыҙыл майҙанға табан байрамса биҙәлгән хеҙмәтсәндәр колонналары ағылды. Ҡыҙыл байраҡтар тулҡыны, яһалма сәскәләр, транспаранттар, завод-фабрика эшселәренең тынлы оркестрҙары башҡарған революцион көйҙәр байрам демонстрацияһына үҙенсәлекле йәм һәм ғәм бирепторҙо.

Совет власы йылдарында В.И. Ленинды бөйөк шәхес тип баһаланылар. СССР-ҙың иң юғары наградаһы - Ленин ордены менән батыр яугирҙар, тыныс хеҙмәт геройҙары бүләкләнде. Ә иң мөһиме - Ульянов-Ленин Рәсәй империяһында социалистик революция ойошторған коммунистар партияһының идеологы һәм ғәмәли етәксеһе, философ һәм сәйәсмән булып танылды. Карл Маркс, Фридрих Энгельстан ҡала ул XX быуат башында социалистик ҡоролош төҙөү буйынса фәлсәфәүи һәм ижтимағи-сәйәси әҫәрҙәр авторы булараҡ та ул саҡтағы прогрессив интеллигенция тарафынан юғары баһаланды.

В.И. Ленин Советтар Союзы тип аталған бөйөк державаға нигеҙ һалыусы юлбашсы сифатында данлана, әммә йылдар үтә килә совет идеологтары уның шәхесен һәм эшмәкәрлеген коммунистик культҡа әүерелдерә. Социализм һәм коммунизм идеологияһында ҡапма-ҡаршылыҡтар арткандан-арта бара, законлылыҡ һәм демократия хөкөм һөргән дәүләт урынына партия диктатураһы һис бер алышынмаҫ власть системаһын төҙөй һәм бер үҙе хакимлыҡ итә. Әммә XX быуаттың аҙағында коммунистар партияһы етәкләгән власть системаһы үҙен үҙе бөтөрөү юлына сыға, һөҙөмтәлә СССР державаһы тарҡала. Рәсәйҙә үҙҙәрен либерал-демократтар тип атаған бер төркөм сәйәсмәндәр власҡа килә. Ете тиҫтә йылдан ашыу хакимлыҡ иткән советтар власы обструкцияға дусар ителә, уның ҡаҙаныштары иҫәпкә алынмай, социализм идеяһы буш хыялға, хатта ки кешелектең яман бер феноменына тиңләнә. Яңы осор политологтары тик бер факты белмәмешкә һалыша: 1999 йыл һуңында Бөйөк Британияның "Би-Би-Си" радио тапшырыуҙары корпорацияһы "Икенсе мең йыллыҡ кешеһе"н билдәләү маҡсатында төрлө аҡыл эйәләренең рейтингын асыҡлай: капитализмдың иҡтисади асылын асыусы һәм коммунизм тәғлимәтен нигеҙләүсе Карл Маркс - беренсе, Альберт Эйнштейн - икенсе, Исаак Ньютон - өсөнсө урынға сыға.

Әбит социализм идеяһының асылында ябай халыҡты капиталистик эксплуатациянан ҡотҡарыу, тиң хоҡуҡлы, ирекле граждандарҙың гуманлы һәм ғәҙел дәүләтен төҙөү маҡсаты ята. Рәсәй хеҙмәтсәндәре социаль революцияла үҙҙәре теләп, үҙ ихтыяры менән ҡатнаша, сөнки һәр бер ижтимағи түңкәрелештең билдәле бер сәбәптәре була. XX быуат башында Рәсәйҙең монархия режимы йәмғиәт һәм дәүләт үҫешен тотҡарлап, үтеп сығып булмаҫтай сәйәси һәм иҡтисади ҡапма-ҡаршылыҡтар тыуҙыра. Ябай халыҡ массалары ярлыланғандан-ярлылана барып, хәйерселеккә төшә, шул уҡ ваҡытта дворяндар, помещиктар, заводсик-фабриканттар хеҙмәтсәндәр етештергән барса әйбер һәм килемде үҙләштереп, ил байлығына хужа булып йөшәй. Батша власы, миллионлаған Рәсәй граждандарын империалистик һуғыштарға ебәрә, "Дин, батша һәм ватан өсөн" лозунгы аҫтында улар аслыҡтан, һыуыҡтан, яман сирҙәрҙән ҡырыла, диңгеҙ төптәрәнә китә, окоптарҙа серей, пушка итенә әйләнә... 1905 йылдағы Рус-япон һуғышында хурлыҡлы еңелеү тәүге рус революци-

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда йәшәүсе 18 йәше тулған РФ граждандары, шулай уҡ йәмәғәт ойошмалары, республика биләмәһендә теркәлгән коммерцияға ҡарамаған ойошмалар һәм урындағы үҙидара органдары 2026 йылға республика бюджеты проекты тураһында фекер алышыуҙа ҡатнаша ала. Улар һорауҙарын, тәҡдимдәрен, иҫкәрмәләрен һәм башҡа фекерҙәрен 11 ноябргә тиклем Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға ебәрергә мөмкин. Киләһе йылда республика бюджетының килеме - 314,1 миллиард һум, сығымдарҙың дөйөм күләме 336,6 миллиард һум күләмендә күҙаллана.

✓"Иң яҡшы мәктәп ашханаһы - 2025" Бөтә Рәсәй конкурсы йомғаҡтары буйынса, ҡала мәғариф учреждениелары араһында Стәрлетамаҡтың 29-сы мәктәбе ашханаһы беренсе урын алды. Илдең 70 төбәгенән 110 дәғүәсе араһынан беҙҙекеләр еңеп сыҡты. Яңылыҡты Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте һәм ашнаҡсылар коллективын ҡотланы. Шулай уҡ Өфөнөң 115-се гимназияһы иң яҡшы егерме иҫәбенә инде.

✓Ноябрҙә йылға-күлдәрҙе боҙ ҡаплай башлай. Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының төбәк буйынса баш идаралығы тәүге боҙҙоң ышанысһыҙ булыуы тураһында иҫкәртә. Ҡотҡарыусылар билдәләүенсә, боҙға сығырға ярамай, айырыуса ноябрь башында. "Боҙҙоң ҡалынлығы бер кешене тотоу өсөн 10 сантиметрҙан кәм булмаҫҡа тейеш", - тип аңлатма бирәләр Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығында. Башҡортостанда 30 ноябргә тиклем "Йоҡа боҙ" иҫкәртеү акцияһы үткәрелә.

✓Һыу инеү миҙгеле йомғаҡтары буйынса, кешеләрҙең һыуҙа һәләк булыуы 3,5 процентҡа кәмегән. Йыл башынан алып республика йылға-күлдәрендә 311 кеше ҡотҡарылған, шуларҙың 52-һе - балалар, 43 кеше батып үлгән. Был хаҡта Ғәҙәттән тыш хәлдәрҙе иҫкәртеү һәм бөтөрөү һәм янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса комиссия ултырышы һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты хәбәр итә.

✓Рәсәй Эске эштәр министрлығының "Халыҡ участковыйы" Бөтә Рәсәй конкурсының финал этабы дауам итә. "Халыҡ участковыйы-2025" Бөтә Рәсәй конкурсында Башҡортостан исеменән төбәк этабы еңеүсеһе, Рәсәй Эске эштәр министрлығының Нефтекама буйынса бүлегенең участка вәкиле Айрат Ямалов сығыш яһай. Тауыш биреү 2025 йылдың 10 ноябренә тиклем бара. 20 ноябрҙә Рәсәйҙең Эске эштәр министрлығында төп приз - Ульяновск автомобиль заводының "Патриот" автомобиле менән бүләкләү тантанаһы уҙа.

✓Иҫке Балтас ауылының мемориаль комплексында техник һәйкәл ҡуйылды. Совет фронт истребителе МИГ-21 постаментта үҙ урынын алды. Билдәле булыуынса, быға тиклем СССР хәрби-һауа көстәренең легендар самолеты урындағы колледж биләмәһен биҙәгән. Реставрациянан һуң уны ауылдың үҙәгендә ҡуйырға хәл иткәндәр.

яһының этәргес көсөнә әйләнһә, 1914 йылда башланған Беренсе бөтә донъя һуғышында ҡатнашыу ахыр сиктә 1917 йылдағы февраль буржуаз-демократик революцияһына алып килә.

Шәхси тормошта ғына түгел, йәмғиәттә һәм дәүләттә лә хәл-ваҡиғалар бер кирегә китһә, тиҙ генә туҡтамаясаҡ. Был - аксиома. Урынлы һорау килеп тыуа: ни сәбәпле февраль революцияһынан һуң төҙөлгән Ваҡытлы хөкүмәт революцион рух ҡайнаған дәүләт менән йүнләп идара итә алмай? Сәбәбе бер генә: ул - Рәсәй буржуазияһы һәм шул уҡ дворян-помещиктар мәнфәғәттәрен генә яҡлап сыға, ябай хеҙмәтсәндәрҙең талап-ихтыяждарын бар тип тә белмәй. Империалистик һуғыш дауам итә, эсерҙар партияһы ағзаһы булған А.Ф. Керенскийҙың, хөкүмәт етәксеһе булараҡ, тотороҡло сәйәси позицияһы булмай. Ул ғына ла түгел, халыҡ урамдарға сыға башлағас, репрессиямаларҙан да баш тармай. Һул һәм уң сәйәси партиялар араһында көсөргәнешлек арта, Рәсәйҙә яңынан революцион ситуация барлыҡҡа килә. Петербург гарнизоны һалдаттары ла большевиктарҙың "Бөтә власть - Советтарға!" тигән лозунгыһын хуплай, Ваҡытлы хөкүмәт приказдарын үтәүҙән баш тарта.

Әйткәндәй, Америка яҙыусыһы, коммунист Джон Рид Октябрь революцияһы алдынан булған сәйәси ваҡиғаларҙы һәм большевиктарҙың Смольныйҙағы эшмәкәрлеге, 1917 йылдың 25 октябрендә Ҡышҡы һарайҙы алыуы һәм нисек итеп Ваҡытлы хөкүмәтте ҡолатыуы хаҡында бөтә донъяға билдәле булған, 1919 йылда Нью-Йоркта инглиз телендә нәшер ителгән "Донъяны тетрәткән 10 көн" исемле китабында бәйән итә: "Банктарҙы миллиләштереү хаҡында декрет, Халыҡ хужалығының Юғары советын булдырыу, ер тураһындағы декретты ғәмәлгә ашырыу, армияны демократик нигеҙҙә үҙгәртеп ҡороу, дәүләт менән идара итеүҙең һәм тормоштоң барса өлкәләренә тиҙ арала үҙгәрештәр индереү - былар барыһы ла, эшсе, һалдат һәм крәҫтиән массаларының ихтыяры менән бойомға ашырылып, яйлап, күп хаталар һәм тотҡарлыҡтар менән пролетар Рәсәйҙе хасил итә башланы.

Большевиктар, хакимлыҡ ҡылыусы кластар йә иһә башҡа сәйәси лидерҙар менән компромисҡа инмәйенсә, иҫке хөкүмәт аппараты менән килешеүгә бармайынса, власҡа килде. Әммә улар быны бер бәләкәй генә клика тарафынан ойошторолған көс ҡулланыу юлы менән дә эшләмәне. Әгәр ҙә ки Рәсәй халыҡтарының киң массалары инҡилапҡа әҙер булмаһа, был уңышһыҙ тамамланыр ине. Большевиктарҙың ҙурҙарҙан-ҙур уңышының берҙән-бер сәбәбе - иҫкелекте емереү һәм тамыранан йолҡоп ташлау эшенә йәлеп итеп, халыҡтың киңдәрҙән-киң ҡатламдарының тәрән һәм ябай ниәттәрен ғәмәлгә ашыра башлау, һуңынан улар менән бергәләп емертелгән харабалар туҙанында яңы донъяның нигеҙен ҡороу..."

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ҠЫТАЙҘАН - АҒАС, БЕҘҘӘН - СИФАТЛЫ РИЗЫҠ

**Туған тупраҡтың тартыу ҡеүәте ҡайһы саҡ һуғыш ғәрәсәте, дошман баҫҡынсылығы һәм хатта үлемдең үҙенән дә көслөрәк була икән.**

Әле Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында уҡ күпте күргән, яндырылған һәм емертелгән Курск ере 82 йылдан һуң тағы ла нацистар баҫҡынсылығына дусар ителер тип кем уйлаған? 1943 йылдың 5 июленән 23 августына тиклем барған Курск дуғаһы алышы Бөйөк Ватан һуғышының төп һәм еңеүле этаптарының береһе була. Ҡыҙыл Армия һөжүме менән вермахт контрһөжүме барышында Көнсығыш Украина яғынан совет-герман фронты үҙәгендә 150 км эскәрәк инеп торған һәм 200 км киңлектәге сығынты биләмә (выступ) хасил була. Тап бына ошо территорияны Курск дуғаһы тип атайҙар ҙа инде. Фашист ғәскәрҙәре ошо Курск дуғаһында үҙенең 30 дивизияһын, 500 меңдән ашыу һалдат һәм офицерын, 1,5 танкын, 3,7 меңдән ашыу самолетын юғалта. СССР Ҡоралды Көстәре юғалтыуҙары 860 мең кеше тәшкил итеп, шуларҙың 255 меңе һәләк була һәм хәбәрһеҙ юғала. Курск дуғаһы бәрелешендә күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн 231 кешегә Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Курск һуғышында еңеү Ҡыҙыл Армия ғәскәрҙәренә артабан совет еренән фашистарҙы ҡыуыуҙа стратегик инициативаны үҙ ҡулына алырға һәм һуғыш барышында ҡырҡа һынылыш яһауға булышлыҡ итә.

Бөгөн Курск тағы ут эсендә. Былтыр 6 августа таңғы 05.30 минутта Украина Ҡоралды көстәре Курскиға баҫып ингәндән һуң, уның 59 тораҡ пункты менән Суджа ҡалаһы 8 ай ҙа 20 көн буйы нацист оккупанттары контролендә була. Шул ваҡыт эсендә Суджа ҡалаһының 300-ҙән ашыу тыныс граждандары дошман ҡулынан һәләк була. Был территорияла барған оҙайлы һәм ауыр бәрелештәрҙән һуң, ниһайәт, быйыл 26 апрелдә Генштаб башлығы РФ Президенты Владимир Путинға Курскиҙы тулыһынса азат итеү хаҡында рапорт бирҙе. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Курскиға һаман тынғылыҡ юҡ. Дошман был территорияны ғына түгел, уның ут күршеләре Брянск, Воронеж, Ростов, Смоленск һәм башҡа өлкәләрҙе лә даими утҡа тота, туҡтауһыҙ шартлатҡыс дрондар яуҙыра, бындағы подстанцияларға, Курск АЭС-ына һөжүм итә. Ләкин Курск халҡы тыныслыҡҡа һыуһаған: күнегелгән тормошона ҡайтып, ауыл һәм ҡалаларҙы аяҡҡа баҫтырыу маҡсаты менән йәшәй, хәрби госпиталь, спорт комплексы, балалар өсөн парк төҙөү менән мәшғүл. Халыҡ тыныс тормош менән үҙ ерендә хужалыҡ итергә, сәсергә, яңынан гөрләтеп баҡса үҫтерергә теләй. Шунын өсөн дә емереклек баҫҡан Суджа ҡаласығын ташлап китмәйенсә, хәүефһеҙ районға күсеүҙән баш тартып, 70-тән ашыу кеше тыуып үҫкән ерендә ҡалып йәшәүҙе өҫтөн күрә, тип яҙа был хаҡта URA.RU мәғлүмәт агентлығы.

Әбыл көндәрҙә Рәсәй ғәскәрҙәре фронттың бер нисә йүнәлешендә дошманды ҡыҫырыҡлай. 4 ноябргә ҡарата кис Рәсәй Ҡоралды Көстәре подразделениелары Красноармейск (Покровск) йүнәлешендәге Мирноградта дошман төркөмдәрен ҡамауға алды. Ҡаланың 85 проценты азат ителде. Ҡамауҙа ҡалған дошман тәьминәттән өҙөлдө, яңы көстәр ҙә килеп етә алмай. Бындай хәлдә украин боевиктарына позицияны һаҡлап ҡалыу һис мөмкин түгел, әммә Зеленский бер нәмәгә ҡарамайынса ғәскәрҙең ҡаланы тотоп тороуын талап итә, сөнки, АиФ баҫмаһына хәрби эксперт, подполковник Олег Иванников хәбәр итеүенсә, Красноармейск менән Мирноградта украин командованиеһы алып сығырға өлгөрмәгән көнбайыш ҡорал запасы тороп ҡалған. Уның һүҙҙәренсә, Донецктың был ҡалаларындағы НАТО техникаһы һаҡланған беренсе категориялы склад милке яҡынса 500 млн доллар самаһына баһалана. Ә Владимир Зеленский, украиндарҙың һөйләшеп килешеүҙәр аша тыныслыҡ урынлаштырыу талабына ҡарамаҫтан, көнбайыштан ярҙам теләнселәүен дауам итә. Украина йәмғиәтендә ризаһыҙлыҡ көсәйә. Һалдаттар частарын ташлап ҡаса, илдә асыҡтан-асыҡ көс ҡулланыу юлы менән мәжбүри мобилизация бара. Германияның Handelsblatt гәзите яҙыуынса, ГФР властары Киевҡа Taurus ракетаһы ебәреүҙән баш тартһа ла, илдәге бюджет көрсөгөнә ҡарамаҫтан, киләһе йыл финанс ярҙамы күрһәтергә иҫәп тота. АҠШ-тың НАТО-лағы вәкиле Мэттью Уитакер Зеленский менән осрашыуында Украина конфликтын тамамлау буйынса һүҙ ҡуҙғатыуы хаҡында үҙенең социаль селтәрендә яҙып сыҡты, тип хәбәр итә Новости Рәсәй мәғлүмәт агентлығы.

Еврокомиссия иһә Украина, Албания, Черногория һәм Молдавияны 2030 йылға Евросоюз берләшмәһенә алыу хаҡында йыл аҙағына тиклем һөйләшеүҙәр башланасағы хаҡында белдерә, ә бына Грузияны демократик принциптарҙан тайпылыуы сәбәпле, берләшмәгә алыу буйынса һөйләшеүҙәр барышы тулыһынса туҡтатылды, тип әйтелә Еврокомиссия сайтында.

Шул уҡ ваҡытта Евросоюз Ҡытайҙан һирәк ҡаҙылдыҡтар алыуҙы сикләүҙең күпмелек зыянға төшөүен иҫәпләгән һәм был йәһәттән бизнестың миллиондарса доллар юғалтыуын асыҡлаған. Мәғлүм булыуынса, һирәк металдар ядро технологияларында, энергетика һәм микроэлектроникала, ҡорал етештереүҙә файҙаланыла. Ә Ҡытай бындай ҡаҙылмаларҙы дөйөм донъя күләменән 90 процентҡа күберәк етештерә.

Әйткәндәй, үткән аҙнала Рәсәй Премьер-министры Михаил Мишустин эш сәфәре менән Ҡытайға барҙы һәм КХР дәүләт советы премьеры Ли Цян менән осрашты. Делегация составында вице-премьерҙар, министрҙар, шулай уҡ "Роскосмос" менән "Росатом" дәүләт корпорациялары башлыҡтары ла ҡатнашты. 2023 йылда уҡ әле ике ил араһында сауҙа кимәлен 2030 йылға 300 млрд долларға еткереү буйынса маҡсат ҡуйылғайны. Ләкин осрашыуҙа был күрһәткескә тиклем әле алыҫ булыуы билдәләнде. Быйыл 8 ай эсендә, мәҫәлән, ике-ара сауҙа кимәле 143,76 млрд тәшкил итеп, бынын былтырғы ошо осорҙан 9,4 процентҡа кәм булыуы асыҡланды. Осрашыуҙа ике яҡ та тәү маҡсат күрһәткесенә өлгәшеүҙең мөмкин булыуы һәм уның юлдары хаҡында фекер алышты. "Углеводородтарҙан тыш, беҙ Ҡытайҙа яҡшы билдәле булған үҙебеҙҙең экологик таҙа аҙыҡ-түлек сәнәғәте продукцияһы һатыуҙы йәнләндерә алабыҙ. Ә Ҡытайҙан эшкәртелгән продукция, мәҫәлән, ағастан һәм ауыл хужалығы сеймалы өлөшөн арттырырға мөмкин," - тип һөйләне был турала "Известия" гәзите хәбәрсеһенә эксперт Виктор Пироженко.

Шул да мәғлүм булһын: Ҡушма Штаттарҙың хәрби белгестәре Рәсәй менән Ҡытайҙың разведкалаусы спутниктарын ваҡытлыса томалап тороу маҡсатында тәғәйенләнгән ҡоралланыуҙың ике яңы төр системаһын эшләп бөтөрөүҙе тамамлау өҫтөндә, тип хәбәр итә Bloomberg агентлығы Америка космос көстәре мәғлүмәтенә һылтанып.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓"Өфө" аэропорты 1 ноябрҙән Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренә осоштар программаһын киңәйтә. Utair авиакомпанияһы Дубайға яңы даими рейс аса. Осоштар шәмбе көндәрендә Boeing 737-800 лайнерҙарында башҡарыла. Баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, ҡалабыҙҙан - иртәнге 10 тула 10 минутта, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренән көндөҙгө 3 тула 10 минутта осорға мөмкин. Юлға 5 сәғәт ваҡыт китә.

✓Өфөлә Өлфәт Мостафиндың иҫтәлеге мәңгеләштерелә. Баш ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев оператив кәңәшмә барышында Өлфәт Мостафиндың ҡала өсөн күп эштәр башҡарғаны һәм уның исеме мәңге онотолмаясағы тураһында һөйләне. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Өфөнөң элекке мэры 2020 йылдың 29 октябрендә пневмония һәм COVID-19 сәбәпсе булған ауыр сирҙән донъя ҡуйҙы.

✓Өфөлә йәнә "Сәнғәт төнө" акцияһы ойошторолдо. Саралар Халыҡтар берҙәмлеге көнөнә арналды, "Халыҡ көсө - мәҙәниәттәр берҙәмлегендә" темаһы төп урынды биләне. Музейҙар һәм театрҙар, күргәҙмә һәм концерт залдары, китапханалар һәм мәҙәни клубтар офлайн һәм онлайн ҡатнашыу форматтарын тәҡдим итте.

✓Башҡортостандың Спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Европа чемпионы, каратэ буйынса 4 тапҡыр ил чемпионы Эрнест Шәрәфетдинов "Moscow karate Universe" халыҡ-ара турнирында ҡатнаша. Эрнест Шәрәфетдинов Өфөнөң 12-се олимпия резервындағы спорт мәктәбендә Николай Балабанов етәкселегендә шөғөлләнә. Яҡташыбыҙ быға тиклем каратэ буйынса донъя чемпионатында бронза миҙал яулағайны.

✓Өфөнән Новосибирскиға самолеттар йышыраҡ оса башлай, рейстар көнөнә икегә тиклем артты. S7 Airlines авиакомпанияһының көҙгө-ҡышҡы миҙгел теҙмәһендәге үҙгәрештәр тураһында баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Рейстар Embraer ERJ-170 һауа судноларында Өфөнән урындағы ваҡыт буйынса көндөҙгө сәғәт 2-лә һәм киске 9 тула 20 минутта башҡарыла. Осоу ваҡыты - 2 сәғәт 40 минут.

✓Ноябрҙә Өфө - Сәмәрҡәнд рейстары арттырыла. Бынан тыш, самолеттар Өфөнән Ташкентҡа һәм Наманганға оса. "Азимут" авиакомпанияһы Сәмәрҡәнд - Өфө - Сәмәрҡәнд маршруты буйынса рейстар һанын аҙнаһына өс тапҡыр - дүшәмбе, шаршамбы һәм йома көндәрендә арттыра. Өфөнән осоу ваҡыты иртәнге 10-сы 25 минутта, юлға 2 сәғәт 50 минут ваҡыт китә. Самолет тибы Сухой Суперджет 100. Был хаҡта "Өфө" аэропортының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Беҙ берәҙәк эттәрҙе тотолғандан һуң урамға кире сығарыуҙы тыйырға теләйбеҙ. Шулай уҡ иҫерек кешеләргә һәм 16 йәшкә тиклемге балаларға ҙур көүҙәле, хәүефле тоҡомло эттәрҙе урамда үҙаллы йөрөтөргә ярамаясаҡ.*



ТУРИСТ ҺУҠМАҒЫ



# ЗӘҢГӘР ҠАЯ

**Ҡолсоғаҙыташ ҡаяһы Абҙаҡ ауылы менән Белорет ҡалаһы араһында Стәрлетамаҡ - Белорет - Магнитогорск төбәк-ара автомобиль трассаһынан (Р-316) ап-асыҡ күренеп ята. Уны туристар Зәңгәр ҡая (Синие скалы) тип тә йөрөтә, сөнки таң нурҙарында ул күкшел төҫкә инә. Ә башҡа ваҡытта ҡәҙимге таштан айырылмай. Башҡортса атаманың руссалап әйтелеше ауыр булғанға шулай ябайлаштырыуҙары ла ихтимал.**

Ҡаялы һырт 500 метрға һуҙыла, уның иң бейек урыны диңгеҙ кимәленән 948 метрға ҡуҡҡа олғашҡан. Исеме эргәһендә ағып ятҡан йылғанан алынған, тиҙәр. Легендаларҙа бәйән ителеүенсә, ҡасандыр, бик борондо заманда, тотҡондан ҡасҡан ҡол Урал тауҙары тарафтарына килеп сыға. Ныҡ сарсап, ул таштар араһынан һыу эҙләй. Ниһайәт, бәләкәй генә шишмә урынын таба. Уны тәрәнәйтеп соҡой һәм йылғаға юл аса. Тәүҙә көмөштәй таҙа һыулы йылғаны Ҡолсығарҙы тип йөрөтәләр, ә аҙаҡтан ул Ҡолсоғаҙы булып китә.

Ҡолсоғаҙыташ ҡаяһынан тирә-яҡты күҙ үткерлегең еткән тиклем күреп була. Көньяҡта Әрүәк-Рәз тауының ҡаялары ослайып торһа, көнбайышта - Еләкташ тауы (әйткәндәй, уның итәгендә "Мәңгелек ауаз" ("Вечный зов") фильмының бер серияһы төшөрөлгән), ә инде арыраҡ Көньяҡ Уралдың иң бейек түбәһе һаналған Ямантау (1640 метр) күренә.

Ҡолсоғаҙыташҡа менеү артыҡ көс талап итмәй. Тапалған юлдар, һуҡмаҡтар бихисап. Машина туҡтаған урындан ни бары бер саҡрым ғына атларға кәрәк. Хәтта балалар өсөн дә ул араны үтеү ауырлыҡ тыуҙырмай.

# ӨС ЮЛБАШСЫ ҠАЯҺЫ

**Ағиҙел йылғаһының үрендә, Шүлгән-Таш мәмерйәһенән түбәнерәк, Көньяҡ Урал милли паркы биләһендә Өс юлбашсы тип аталған киң билдәле ҡая бар.**

Уның үҙенсәлеге шунда: бейек ҡаяға өс юлбашсы - Ленин, Маркс һәм Энгельс портреттары төшөрөлгән. Сама менән 50-гә 70 метр ҙурлығындағы һүрәтте (17 ҡатлы йортҡа тин) 1979-1980 йылдарҙа ирле-ҡатынлы Татьяна менән Булат Рәхимовтар эшләгән. Рәссамдарҙың улы Радиктың "Барып етеп булмаҫ Рәсәй" телепрограммаһында һөйләүенә ҡарағанда, атаһы менән әсәһе, ике йыл буйы апрелдән ноябргә тиклем палаткала йәшәп, ҡаяға һүрәт төшөргән. Охра буяуын алыр өсөн күрше-тирәләге колхоздарҙан аҡса йыйғандар. Аҫылмалы махсус ҡулайламала тороп эшләгәндәр. Ғәжәп, энтузиаст-рәссамдарҙы нимә рухландырған ундай ҙур эшкә? Коммунистик идеалдарға, бәхетле киләсәккә мөкиббән ышаныуымы, әллә башҡа сәбәптәрме? Нисек кенә булмаһын, изге тойғолар уларға көс һәм илһам биргән, тиергә ҡала.

Ҡаяны йылға буйлап барып күреү - иң отошлоһо. Машина менән Бикбулат ауылы аша ла барырға мөмкин. Тик урман юлы бик насар, өҫтәүенә, биш саҡрымдай араны йәйәү үтергә кәрәк. Ул тирәлә айыу-мажарҙың осрап ҡуйыуын да иҫәпкә алғанда, сәйәхәттең хәүефле лә булыуы ла ихтимал.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН әҙерләне.**

ҺОРАУ-ЯУАП

# БЕРӘҘӘК ХАЙУАНДАР ҺӨЖҮМЕ



***"Белеүемсә, былтыр Рәсәйҙә 27 кеше эттәр арҡаһында һәләк булған, меңәрләгән кеше яраланған, психик йәрәхәттәр алған. Бигерәк тә балалар өсөн бик ҡурҡыныс хәл тыуа. Ошо проблеманы юҡҡа сығарыу әмәле юҡмы ни?***

***Сәлимә И. Көйөргәҙе районы".***

- 2023-2024 йылдарҙа эттәрҙе аҫрау һәм уларҙың хужаларына яуаплылыҡты арттырыу тураһында закондар ҡабул ителде. Шулай уҡ Рәсәй Федерацияһының субъекттарына был өлкәлә киң вәкәләттәр тапшырылды. Былтыр февралдә Дәүләт Думаһында ошо өлкәлә тәртип урынлаштырыу маҡсатында эшсе төркөм ойошторолдо. Аҙнаның һәр дүшәмбеһе йыйылып, проблемаларҙы тикшерәбеҙ, закон проекттары әҙерләйбеҙ. Федераль ведомстволар, Рәсәй субъекттары вәкилдәре, йәмәғәт ойошмаларын да был эшкә йәлеп итәбеҙ.

Бөгөнгә 22 закон проекты өҫтөндә эшләйбеҙ, бер нисәүһе Дәүләт Думаһына тәүге уҡыуға индерелде лә инде. Беҙ берәҙәк эттәрҙе тотолғандан һуң урамға кире сығарыуҙы тыйырға теләйбеҙ. Шулай уҡ иҫерек кешеләргә һәм 16 йәшкә тиклемге балаларға ҙур көүҙәле, хәүефле тоҡомло эттәрҙе урамда үҙаллы йөрөтөргә ярамаясаҡ. Тағы ла йорт хайуаны юғалһа, хужаһы өс көн эсендә хәбәр итергә бурыслы буласаҡ. Шуны ла күҙ уныңда тоторға кәрәк, "112" берҙәм номеры аша ҡараусыҙ ҡалған хайуандар тураһында хәбәр итеү мөмкинлеге барлыҡҡа киләсәк. Ә бына йорт хайуандарын аҫрау ҡағиҙәләрен боҙған өсөн язалар ҡатыраҡ буласаҡ. Тағы ла бер яңылыҡ - берәҙәк хайуандарҙы ашатыу ҡәтғи тыйыласаҡ. Эттәрҙе маркировкалау (чиплау) юлы менән мотлаҡ иҫәпкә алыу ойоштороласаҡ. Фатирҙа йәки шәхси йортта аҫрауға рөхсәт ителгән эттәр һаны сикләнәсәк.

Рәсәй Енәйәт кодексының 109, 118, 245-се статьяларына үҙгәрештәр индереп, граждандарға тән йәрәхәттәре килтергән осраҡта эттәрҙең хужаларына енәйәт яуаплылығы көсәйтеләсәк.

Беҙҙең бурыс - йорт хайуандары менән эш итеү өлкәһендә лә тәртип урынлаштырыу. Кеше йәшәгән һәр ерҙә, ауылда булһынмы, ҡаламы, берәҙәк хайуандар йөрөргә тейеш түгел.

# ВИДЕОКАМЕРА ҠУЙЫУ ЗАКОНЛЫМЫ?



***"Күп ҡатлы йортта йәшәйем. Күрше беҙҙең ҡатҡа камера ҡуйҙы. Фатирымдың ишеге лә унда эләгә. Кем килгәне, ишек төбөндә нимә тураһында һөйләшкәнбеҙ - барыһы ла уға мәғлүм. Был миңә оҡшамай. Нимә эшләргә?***

***Айгөл С. Сибай ҡалаһы".***

- Яуап рәүешендә миҫалға суд ҡарарын килтерәм. Был мәғлүмәт барыһы өсөн дә фәһемле булыр.

Волгоград ҡалаһында күп фатирлы йортта йәшәүсе Сергей 2024 йылдың декабрендә ишеге өҫтөндә таууш яҙҙырған видеокамера ҡуя. Был күршеһе Артурға оҡшамай һәм ул судҡа мөрәжәғәт итә. "Сергей подъездағы видеокамераһын алып ташлаһын. Ҡайһы ваҡытта өйҙә кеше булмауын, кем килгәнен, нимә тураһында һөйләшкәнемде күҙәтә ала, тимәк, тормошома ҡыҫыла", - тип дәғүә белдерә.

Суд, эште тикшергәндән һуң, Сергей урынлаштырған видеокамера, ысынлап та, Артурҙың шәхси тормошон күҙәтеүен, уның фатирына кемдәр килгәненсыҡҡанын, тауыштарҙы теркәп барыуын асыҡлай. Закон буйынса, күп фатирлы йорттоң дөйөм ҡулланыуҙа булған майҙанына шәхси видеоаппаратура ҡуйыу тыйылмаған, әммә был бөтә торлаҡ хужаларының ризалығы менән генә эшләнергә тейеш. Сергейҙең күршеләре видеокамера ҡуйыуға ризалыҡ бирмәгән.

Район суды Сергейға видеокамераны һүтергә ҡуша. Ул суд менән килешмәй һәм апелляция бирә. Әммә Волгоград өлкә суды был ҡарарҙы законлы һүм нигеҙле тип таный. Сергей камераны алып ташларға мәжбүр була.

**Зариф БАЙҒУСҠАРОВ, Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты, Башҡортостандың атҡаҙанған юрисы.**

АҢЛАТАБЫҘ!

# ЙЫЛЫ ӨСӨН ТҮЛӘҮ...

**Күрһәтмәләр тапшырыу һәр айҙың 25-се көнөнән дә һуңға ҡалмайынса башҡарыла. Ә торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү ваҡыты - киләһе айҙың 10-на тиклем.**

Ни өсөн ошо ваҡыттарҙы үтәү мөһим? Аңлатманы "Башҡортостан Республикаһының Берҙәм мәғлүмәт - иҫәп үҙәге"нең йәмәғәтселек менән элемтә буйынса йүнәлеш етәксеһе Даян Теүәлбаев бирә: "Күрһәтмәләрҙе ваҡытында тапшырыу түләүҙәрҙе ғәмәлдә тотонолған коммуналь хеҙмәттәр өсөн иҫәпләргә һәм артыҡ түләүҙәрҙе булдырмаҫҡа мөмкинлек бирә, тимәк, был отошло. Тоҡҡарлауҙарҙың тәүге 3 айында иҫәпләү уртаса айлыҡ күләмгә ярашлы, ә 4-се айҙан норматив буйынса башҡарыла".

Мөһим иҫкәртеүҙәр: счетчиктарҙың тәҙәклөгән контролдә тотоғоҙ; ҡулланыу ваҡыты тамамланғас, приборҙы алмаштырығыҙ, тикшереү-ара ваҡыт тамамланыу менән тәҙәклөгән ҡаратығыҙ; һеҙҙең яуаплылыҡ ҡала һәм ауылдарҙы тәҙәкләндереүҙе, шулай уҡ инженер селтәрҙәрен ремонтлауҙы ваҡытында финансларға ярҙам итә.

Түләүҙәрҙе билдәләнгән ваҡытта үтәп, артыҡ сығымдарҙан азат булыу ғына түгел, коммуналь системаларҙың ышаныслы эшләүенә лә өлөш индерәһегеҙ.

# ИҒТИБАРЛЫ БУЛҺАҢ...

**Башҡортостанда шикле эштәр һәм диверсиялар тураһында хәбәр ҡабул итеүсе телеграм-бот барлыҡҡа килде.**

Бот Федераль именлек хеҙмәтенә ут төртөү хәүефен (реле шкафтарын, автомобилдәрҙе, элемтә вышкаларын, хәрби комиссариаттарҙы, предприятие һәм инфраструктура объекттарын яндырыу ихтималлыһын) күҙәтергә ярҙам итә.

Белдереүҙе нисек ебәрергә:
- ботты ***vk.cc/cQzvtn*** һылтанма буйынса табығыҙ;
- телефон һандарығыҙҙы күрһәтегеҙ;
- хәлде тасуирлап фото/видео (булһа) беркетегеҙ.

Был мөһим: енәйәтте булдырмауға булышлыҡ иткән осраҡта ҡулланыусы яуаплылыҡтан бушатыла.

# ЭКСПЕРТИЗА ҮТКӘНМЕ?

**Иттәге тамға - ветеринар-санитар экспертиза (ВСЭ) үтеүен раҫлаусы рәсми хәүефһеҙлек билдәһе.**

Ошо эште башҡарыу барышында ветеринарҙар:
- малдың түшкәһен, ярымфабрикаттарҙы һәм эске ағзаларын тикшерә;
- ауырыуҙарҙы, паразитар инфекцияларҙы һәм дефекттарҙы асыҡлай;
- нормаларға тап килгән осраҡта тамға ҡуя йәки, ит талаптарға яуап бирмәһә, эшкәртеүгә/юҡ итеүгә ебәрә.

Башҡортостан Республикаһының Ветеринария буйынса дәүләт комитеты белгестәре тамғаның барлығын тикшерергә тәҡдим итә - был ризыҡтың хәүефһеҙлеген раҫлай. Махсус маркировкалы ит һайлағыҙ - һаулығығыҙҙы һаҡлағыҙ!

# ХӘҮЕФҺЕҘ ТОТОН!

**Башҡортостан Республикаһының Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты иҫкәртә:**

- ҡабыҙылған приборҙы ҡараусыҙ ҡалдырмағыҙ;
- яныусан материалдарҙан 0,5 м араусығында тотоғоҙ;
- приборҙы өҫтөнән япмағыҙ һәм дымдан һаҡлағыҙ;
- йылытҡыс өҫтөндә әйбер киптермәгеҙ.

**Шулай уҡ техник хеҙмәтләндереү ҙә мөһим:**
- прибор һәм уның сымдарының тәҙәклөгән тикшереп тороғоҙ;
- туҙанын һыуынғас һөртөгөҙ;
- электр селтәрендәге көсәргәнеш менән электр сымдары торошона иғтибарлы булығыҙ.

**Тыйыла:**
- прибор янына балаларҙың яҡын барыуы;
- ҡулдан яһалған йәки тәҙәк булмаған йылытҡыстарҙы файҙаланыу;
- электр бауын келәмдәр аҫтынан йәки ишек уйымдары аша һалыу.

**Һаҡ булығыҙ, етештереүсе күрһәтмәләрен һәм ошо ябай ҡағиҙәләрҙе үтәгеҙ!**

✓ *Башҡорт тоҡомло аттар Урал алды рус аттарынан һәм ҡаҙаҡ тоҡомонан айырылып торған. Улар тәпәш буйлы, ҙур башлы һәм йомроланған моронло; йөндәре ҡалын, тупаҫ, ҡышын оҙон булған.*



ТАРИХИ ЙЫЛЪЯҘМА

# ӨС ЙЫЛҒА САТЫНДАҒЫ ҠАЛА,

## йәки Нисә йәш һиңә, Өфө?

**(Салауат Хәмиҙуллиндың видеофильмы буйынса)**



***Салауат Хәмиҙуллин:*** Ҡәләнең тәүге кешеләре Сутолока йылғасығы һыуын эскән һәм хужалыҡ маҡсаттарында файҙаланған, уның менән бәйле төрлө хәтирәләр бар. Ул хәҙерге ваҡытта бетон коллектор буйлап ҡына аға, хәҙерге Сочинская (элекке Усольская) урамы аҫтынан һалынған торбанан ағып сыға һәм Ағиҙел йылғаһына ҡоя, ә ул саҡта рустар Ағиҙелде Белая Воложка тип йөрөткән. 1586 йылдың йәйендә тап уның тамағында баструк (острог - фортификация ҡоролмаһы) һалына башлай, һәм уның йылғасыҡ исеме менән Сутолока тип аталыуы ла мөмкин булған. Ярай әле ул Өфө тип аталған, Өфө йылғаһының тамағына тиклем бынан көнсығыштараҡ бер нисә саҡрым ерҙә булһа ла. Был факты Өфө тарихының тағы ла бер серле йомағы тип әйтергә була.

***Булат Аҙнабаев***: Мәскәү һалған яһаҡты Ҡаҙанға алып барып тҮләү башҡорттар өсөн ауыр һәм мәшәҡәтле эш, ул күп көс талап иткән операцияға тиң. Шуға күрә улар Мәскәүҙән үҙҙәренең территорияһында, традиция буйынса элекке Нуғай наместничествоһы урынлашҡан тарихи ерҙә яһаҡ йыйыу үҙәген төҙөтөүҙе тәҡдим итә. Фискаль-хоҡуҡи (суд эштәре) мәсьәләләрҙе хәл итеү яңы ҡаланың төп функцияһы була. Ҡәлғә бер нисек тә хәрби үҙәк була алмай, сөнки тәүге йылдарҙа хәрби гарнизондағы кеше иҫәбе 150 генә була. Ул башҡорттарға нииндәй ҙә булһа етди хәрби ярҙам күрһәтә алмаҫ ине, сөнки яҡынтирәләге ҡапма-ҡаршы тороусы көстәрҙәге яугирҙар һаны унар меңләп һанала.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Төньяҡ Евразияның ҡала төҙөү традицияһына ярашлы, ҡәлғә имән ағасынан төҙөлә, шуға күрә тәүге осорҙа башҡорттар уны "Имән ҡала", тип атай. Әммә бында ағастың нисек итеп талап ителгән кимәлдә килтерелеүе менән ҡыҙыҡһынған кешеләр күп түгел. Әгәр ағасты ҡоро юлдан ташыһалар, ошондай грандиоз эште башҡарыусыларҙы кем шул тиклем ат-арба менән тәьмин иткән? Ағасты һыу юлы буйлап та килтереп булған - ул саҡта кемдәр ағас киҫкән һәм һал ағыҙған? Кемдәр үҙҙәренең аҫаба ерҙәре һәм урмандары менән бүлешкән, Башҡортостанда ул замандарҙа (шулай уҡ хәҙерге ваҡытта ла) хужаһыҙ ерҙәр һәм урмандар булмай? Ниһайәт, тәүге мәлдәрҙә ҡәлғә гарнизонын аҙыҡ-түлек менән тәьмин иткән? Был һорауҙарға яуап үҙенәнүҙе беленеп тора: урындағы башҡорттар.

***Булат Азнабаев:*** Өфө ҡәлғәһе XVI-XVII быуаттарҙа Рәсәйҙә ҡабул ителгән ҡала төҙөү ҡағиҙәләрен билдәле кимәлдә боҙоп төҙөтөлә. Өфөгә иң яҡын ҡәлғә - Ҡаҙан ҡалаһы, ә уға тиклем 600 саҡрым ара ята. Кәрәк булғанда Өфөгә хәрби ярҙамды тиҙ арала бойомға ашырыу мөмкин түгел. Бына Себерҙә ҡәлғәләр һалына башлағас, улар араһындағы алыҫлыҡ 50-70 саҡрымдан йырағыраҡ булмауы талап ителә, сөнки шул саҡта ғына бер ҡәлғәнән икенсеһенә бер тәүлек эсендә ярҙамға килеп өлгөрөп була. Шундай алыҫ һәм хәүефле төбәктә, дошман күмәк көс менән һөжүм иткән саҡта бер ниндәй ҙә ярҙам күрһәтеү мөмкин булмаған бер хәлдә, 150 генә кешенән торған гарнизонлы ҡәлғә төҙөтөүен рус властарының урындағы башҡорттарҙың гарнизонға ярҙам итә аласағына ныҡлы ышанғанына нигеҙле бер дәлил итеп ҡарау фарыз.

Шул уҡ йылдарҙа Мәскәү тағы ла бер нисә ҡәлғә төҙөтә, ошо хаҡта Пекарский ентекле мәғлүмәттәр килтерә. Мәҫәлән, Һамар ҡәлғәһе күләме һәм гарнизоны яғынан Өфө ҡәлғәһенән 4 тапҡырға ҙурыраҡ итеп һалынһа, Өфө иң бәләкәй ҡәлғә булып ҡала. Русь властарына етди ҡаршылыҡ күрһәткән төбәктә ошондай бәләкәй, ҡеүәтһеҙ хәрби форпост төҙөтөүҙе рациональ гәмәл тип ҡабул итеп булмай. Тимәк, бында иң тәүҙә башҡорт мәнфәғәттәре күҙ уңында тотолған: башҡорттар үҙҙәре йәшәгән территорияла ҡәлғә төҙөтөү мәсьәләһендә үҙ ихтыярына таянып эш иткән. Тәүҙә рус хөкүмәте буласаҡ ҡәлғәнең урынын билдәләү маҡсатында башҡорттар менән һөйләшеүҙәр алып бара. Ошо маҡсатта рус хөкүмәте башҡорттарға үҙ вәкилен - дьяк Артемьевты ебәрә. Буласаҡ ҡәлғә урынын башҡорттар үҙҙәре күрһәтә. Әгәр ҙә шундай һөйләшеү-килешеү булмаһа, бында Өфө ҡәлғәһе төҙөлмәҫ тә ине.

**(Дауамы. Башы 37-43-сө һандарҙа).**

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*

# БАШҠОРТ АБЫЗДАРЫ ҺӘМ БАТЫРҘАРЫ

VI-XI быуаттарҙағы төрки тел, ташъяҙма, ҡулъяҙма төрки тел һүҙҙәрендә абыз һүҙе осрамай. Тимәк, ул заманда телдә һәм яҙмала ул һүҙ ҡулланылышта булмаған. "Хафиз" һүҙе лә боронғо төркиҙәрҙә юҡ. Күрәһең, боронғо төркиҙәргә "Ҡөрьән хафиз", "хафиз", аҙаҡ "абыз" атамалары Ислам дине ныҡлап ингәндән һуң, XIII-XIV быуаттарҙа ғына тамыр йәйеп, телдә баҙыҡланып киткән. Борон ҡамдар, ҡанбабалар, бейҙәр йәмғиәт тормошонда мөһим урын тотһа, һуңыраҡ әле атаған быуаттарҙа башҡорт йәмғиәтендә, дини, рухани донъяла, ырыу-ил эштәрендә аҡһаҡаллыҡ йәмәғәт институты, улар араһынан абызсылыҡ эшмәкәрлеге алға сыҡҡан булһа кәрәк. Абыздар административ даирәләрҙә, халыҡтың яҙма культураһы, ижтимағи фекер үҫеше тарихында ҙур роль үтәй башлаған.

XVII-XVIII быуаттарҙа, башҡорттар араһында социаль, милли азатлыҡ өсөн көрәш үтә киҫкенләшеп киткән осорҙарҙа, абыздар батшалыҡҡа ҡаршы баш күтәргән халыҡтың идеологтары, күп кенә ихтилалдарҙың етәкселәре булып китә. Мәҫәлән, 1735-1736 йылдарҙағы күтәрелештең башлығы һәм батыры булып Килмәк абыз, 1737 йылғы яуҙың етәксеһе һәм идеологы булып Бәпәнәй абыз тора. 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында мәшһүр Кинйә абыз Арыҫланов башҡорт халҡының ғына түгел, татар, сыуаш, мари халыҡтарының яҡын идеологы, Пугачев хәрби коллегияһының төп агзаһы, баш атаманы булып таныла. Батыршаның да 1755 йылғы башҡорт восстаниеһын ойоштороуҙағы роле ана шул абызсылыҡ эшмәкәрлеге менән тығыҙ бәйле. Халыҡ үҙенең Салауат Юлаев, Баҙарғол Юнаев кеүек ғәййәр улдарына ил батыры тип дәрәжәле исемдәр ҡушһа, Ҡобағош, Ҡарас, Килдеш, Байыҡтарҙы яуға, дауға өндәр сәсәндәре тип атаһа, юғарыла исемләнгән тарихи шәхестәренә, уҡымышлы, абруйлы аҫыл заттарына, восстание етәкселәренә абыз исемен, оло дәрәжәһен шулай уҡ үҙе биргән.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**
**(Дауамы. Башы 42-43-сө һандарҙа).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

XVII быуат уртаһынан башлап һәр ихтилал һайын башҡорттар меңдәрсә баш малтыуарынан яҙыуына ҡарамаҫтан, XVIII быуат аҙағына, И. Г. Георги һүҙҙәренсә, "һирәк булһа ла ябай кешелә лә 30 һәм 50-нән кәмерәк ат була; күптәрҙә йылҡы малы 500 баш иҫәпләнә, байҙарҙа иһә 1000, ҡайһы берҙәрендә 2000 һәм унан да күберәк ат була. Һарыҡтар һаны байҙарҙа аттар һанына тап килгән һәм унан да күберәк булған. Эре мал һаны байҙарҙа аттарҙың яртыһы иҫәбен тәшкил иткән. Барыһында ла тиерлек ҙур булмаған кәзә көтөүҙәре булған".

Шуға күрә П. И. Рычков үҙенең XVIII быуатҡа ҡараған "Башҡорт хәле тураһында фекерҙәр"ендә: "Башҡорттар үҙҙәре өсөн ер эшкәртеүҙә ихтыяж күрмәйҙәр. Сөнки бик күпләп мал тоталар, гәҙәттә, ит, һөт һәм ҡорот менән туҡланалар", - тип яҙған. Хатта бер ни тиклем һуңыраҡ та, XIX быуат урталарында, башҡорттарҙа ер эшкәртеү үҫешә башлағас, кантон идаралығы ваҡытында яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса башҡорттарҙа ярты миллион ат, шунса уҡ һарыҡ, 300 мең баш самаһы эре мал һаналған. XIX быуат һуңында ла Урал арьяғы башҡорттарының күптәре көтөүҙәрен һәм табундарын йөҙәр баш менән иҫәпләгән.

Йорт хайуандарының барлыҡҡа килеүе һәм башҡорттарҙың боронғо малсылыҡ хужалығы тураһында беҙ бик аҙ беләбеҙ. Беҙгә боронғо (беҙҙең эраға тиклем икенсе мең йыллыҡтың аҙағы) йорт аттары бәләкәй буйлы булыуы билдәле. Ялан башҡорттарының ҡырағай аттарға һунар итеп, уларҙы ҡулға эйәләштереүе лә шик тыуҙырмай. 1738 йылда обер-егермейстер Волынский, императрица Анна Иоанновнаға ҡырағай аттар - тарпандар йөрөгән ерҙәр тураһында мәғлүмәт биреп, Башҡортостан, Уралдың арьяғы тураһында ла иҫкә ала. XVIII быуат һуңында Урал арьяғында ҡырағай аттарҙың йәшәүен күрһәтеүсе мәғлүмәттәр ҙә бар.



Әгәр Урал арьяғының ҡырағай аттары хәҙерге башҡорт аттарының туранан-тура тоҡом башы булмаһа ла, улар Башҡортостанда боронған билдәле йорт аттары менән ҡушылыуы ла мөмкин. Башҡорт аттары араһында бер-береһенән бер ни тиклем айырылып торған өс төрҙә билдәләргә мөмкин: таулы райондарҙа менгә аттары; көньяҡ райондарҙа - ялан менгә аттары; көнбайыш райондарҙа - эре, екке аттары.

Башҡорт тоҡомло аттар Урал алды рус аттарынан һәм ҡаҙаҡ тоҡомонан айырылып торған. Улар тәпәш буйлы, ҙур башлы һәм йомроланған моронло; йөндәре ҡалын, тупаҫ, ҡышын оҙон булған. Башҡорт аттарының кәүҙәһе уртаса оҙонлоҡта, хатта ҡыҫҡа булған; тән мускулдары, аяҡтарыныҡы кеүек үк, ныҡ үҫешкән. Уртаса оҙонлоҡтағы арҡаһы тура йәки саҡ ҡына ауышып һигеҙгүҙгә барып тоташҡан. Ғөмүмән, башҡорт тоҡомло аттар үҙенең сыҙамлығы һәм шәп сабыуы менән айырылып торған. Башҡорт аттары араһында бик йыш ныҡ ҡиммәт баһаланған юрғалар осраған.

**(Дауамы бар).**

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

**Яҙ етеп, ҡояш ҡыҙҙыра башлау менән тау баштарында, ҡалҡыулыҡтарҙа ер ҡарҙан әрселеп, кибә башлағас, эргә-тирәләге ауыл йәштәре шул ҡалҡыулыҡтарға, тау баштарына күтәрелеп, йырлап-бейеп, таңға тиклем дәртләнешеп күңел асырҙар ине элегерәк. Шул яҙғы бейеүҙәрҙе Баймаҡ яҡтарында "ритайым" тиһәләр, Бөрйән районында "ахрита" тип атайҙар.**

# "РИТАЙЫМ", "АХРИТА" БЕЙЕҮҘӘРЕН...

## ҡасандан алып бейейҙәр?



Нимәне аңлата һуң был атамалар? Үҙем Баймаҡтан булғас, мине "ритайым" атамаһы, нисектер, бала саҡтан ҡыҙыҡһындыра ине. Мәғәнәһен аңлағы килеп, ҡулға килеп эләккән төрлө һүҙлектәрҙе аҡтарғылап, яуап таба алманым. Әммә был ҡыҙыҡһыныуымды һүрелдермәне. Берәйһенән "ритайым" тигәнде ишетеү менән "Нимә була ул?" тип ҡыҙыҡһынып һораша торғайным. Бөтәһенең яуаптарын дөйөмләштереп әйткәндә, "Бейеү була" тигәндән ары китеп булманы.

Әммә, ҡыҙыҡһынып эҙләнә торғас, йәштәрҙең шул уҡ яҙғы бейеүҙәренең Бөрйән районында "ахрита" тип аталыуы һәм "ритайым" менән бер үк ваҡытта үткәрелеүе асыҡланды. Сағыштырып тикшереү ике төрлө аталһа ла, был яҙғы бейеүҙәрҙең бер үк мәғәнәле ритуал бейеү икәне аңлашылды. Тик нимәне аңлата ул был ике һүҙҙәге "рита" тамыры. "Эҙләнгән - моразына еткән", тиҙәр бит халыҡта. Йәйләп ҡына мин дә башҡорттоң баяғы ритуал бейеүҙәренең мәғәнәһен әҙ-мәҙ булһа ла асыҡлай алдым, тиергә була.

Бейеү халыҡтың үҙенең тарихында булып үткән төрлө ваҡиғаларҙы сағылдыра. "Бейеү ул - халыҡтың күңел көҙгөһө", тип тә әйтергә булалыр, минеңсә. Унда халыҡтың бик борондан килгән донъяуи, дини, мифологик ҡараштарын да күрәсәкбеҙ, әгәр иғтибарлап тикшерә башлаһаҡ.

Төрки телле халыҡтар араһында башҡорттарға иң үҙенсәлекле, бөтәһенән дә иғтибарын йәлеп иткән бейеүҙәр хас. Ун туғыҙынсы быуатта бер урыҫ ғалимы: "Ҡаҙаҡтар башҡорттарҙың бейеүҙәренә ҡарата "бигерәк килештерел ҡыланалар, кешеләргә улай ҡыланырға ярамай", тигән ҡарашта торалар", - тип яҙған. Башҡорттарҙың ут күршеләре булған ҡаҙаҡтарҙың башҡорт бейеүҙәренә ҡараштары айҡанлы үҙемдең тормошомдан бер ҡыҙыҡ хәтирә һаҡлана. Ҡаҙаҡ милләтле (хәҙер күптән мәрхүм) бер танышым булды. Икәүләп осрашып, әҙ-мәҙ мәй ҙә ҡабул итеп алһаҡ, ул башҡорт бейеү көйҙәрен ҡуя торғайны һәм "Эйй. Яратам мин башҡорт бейеүҙәрен, уларҙа шундай дәрт бит. Әйҙә, бейе әле", - тип үтенә торғайны. Үҙе көйҙә мөкиббән китеп, башын ҡырын һалып тыңлай һәм ваҡыт-ваҡыт "Ихх, ихх...", тип көрһенеп, тубыҡтарына һуғып ҡуйыр ине. Мин көлөп "ихылдап ултырғансы бейе лә ҡуй", тийем тегенә. Ул "Һуң мин бит ҡаҙаҡ, беҙҙең халыҡ бейемәй ҙә инде", тип уфтана ине. Мин шунда ғына ҡаҙаҡ халҡында бейеүҙәрҙең бигүк таралмауын белдем. Аҙаҡ, этнограф булараҡ ҡыҙыҡһынып тикшеренгәс, күп кенә төрки телле халыҡтарҙа беҙҙәге кеүек дәртле (ер-емертеп, тиергә була) шашып китеп бейеүҙәрҙең булмауын белдем. Һәр халыҡ тарихи үткән юлында үҙенә кәрәк, тәғәйен мәҙәниәтен булдыра, шул иҫәптән бейеүҙәрҙе лә. Башҡорт бейеүҙәрен (бер нисә хеҙмәтте атамағанда) фәнни нигеҙләп, әле ныҡлап өйрәнгән кеше юҡ. Башҡорт бейеүҙәрен һуңғы йылдарҙа Рита Өмөтбаева ныҡлап пропагандалай. Рәхмәт уға.

Яҙаһы һүҙҙәрем Баймаҡ, Бөрйән һәм уларға күрше райондарҙа әле булһа башҡарылған "Ритайым", "Ахрита", тип аталған яҙғы бейеүҙәр тураһында ине. ***Был ике атамаларҙың барлыҡҡа килеүе бик боронға, быуаттар төпкөлдәренә төшеп китә һәм башҡорттоң ата-бабаларының береһе булған беҙҙең дәүерҙәргә тиклем Урал һәм уның тирә-яғында көн иткән һинд-иран телле халыҡтар (арийҙар) дәүере менән бәйле. Тарих фәнендә, Уралға төрки телле ҡәбиләләр килә башлағанға тиклем был ерҙәрҙә улар, йәғни һинд-иранлылар (арийҙар) йәшәгән, тигән ҡараш йәшәй.*** Ошо халыҡтарҙың телендә яҙғыһын ҡар иреп, тәбиғәт уяна башлағанды хуплап, "янынан ҡуҡ үләнгә баҫабыҙ, Хоҙайға рәхмәтле булайыҡ", тип башҡарылған ритуал бейеүҙәр хас та беҙ башҡорттоң телендәге кеүек үк "Ритайым", "Ахо рита" тип аталған һәм башҡарылған ваҡыты ла башҡорттар бейегән яҙғы ваҡытҡа тап килә.

Ә был "Ритайым", "Ахо рита", һүҙҙәренең мәғәнәһе нимәне аңлата?

Бейеү - сәнғәттең иң боронғо төрҙәренең береһе һәм кешеләрҙең рухи тормошонда, мәҙәниәтендә борондан уҡ ҙур урын тотҡан. Сәнғәт төрө булараҡ, бейеүҙәрҙә халыҡтың үткәне, борондан килгән донъяуи ҡараштары, мифологияһы үҙенең сағылышын таба. "Ахрита", йәки "Ритайым" тип аталған ритуал бейеүҙәрҙә лә шул боронғолоҡто күрергә була һәм был ритуал яҙғы бейеүҙәр - башҡортто формалаштырыуҙа ҡатнашҡан арийҙар дәүеренең бер сағылышы булараҡ һаҡланып, беҙҙең көндәргә килеп етә алған тарихи ҡомартҡылар.

Был ритуал бейеүҙәрҙең төндә башҡарылыуының үҙ мәғәнәһе бар. Яҙға ҡарай ҡояш нурҙары нығыраҡ ҡыҙҙыра башлай. Боронғо кешеләр быны ҡыштың (ауыр ваҡыттың) үтеп китеп, тәбиғәттең уяныуы, тип аңлағандар. Ҡыш ваҡытында ҡояш теге донъя яғында булып, яҙға был, яҡты донъяға килеп сыға. Боронғо кешеләр төнгө ваҡытты ла теге донъя менән бәйле, тип һанаған. Шуға күрә яҙ көнө ҡыш үтеп, көндәр йылынып, ҡояштың ерҙе ҡыҙҙыра башлауын кешеләр көтөп алған. Уның килеүен көтөп, уға арнап, төнө буйына баяғы ритуал бейеүҙәрен башҡарып, ҡояшты дәртләндереп, уны саҡырғандар, яҡты донъяға ҡалҡып сығыуын түҙемһеҙлек менән көткәндәр. Йәғни кешеләр таңға тиклем түңәрәкләп бейеп, ҡояштың күктәге хәрәкәтен ҡабатлап, ҡояшты үҙҙәре менән тиҙләтеп ҡалҡытырға тырышҡандар. Шунын өсөн дә был (ахрита, ритайым) ритуал бейеүҙәре төндә үткәрелгән.

Ахрита, ритайым тигән һүҙҙәрҙең тамырында һинд-ирандыларҙың (арийҙарҙың) "рта", "рита" һүҙе ята. Ошо уҡ тамырға башҡорттоң "рәт" һүҙен дә бәйләргә була. Беҙҙең ҡайһы бер телсе ғалимдарыбыҙ "рәт" һүҙен урыҫ теленән ингән, тип аңлатырға ынтыла. Әммә был төптө яңылыш ҡараш. Башҡорт телендәге "рәт" һүҙе беҙҙең үҙебеҙҙән борондан килгән һүҙебеҙ һәм "тәртип яһау", тигәнде аңлата. Беҙ әле лә "донъяны рәтләйбеҙ", "ул донъяһын рәтләне", йәки "нәмәләрендә матурлап, рәтләп һал", тип әйтәбеҙ. Һәм баяғы "ахрита", "ритайым" тигән һүҙҙәрҙә шул уҡ "рәтләү", "тәртипкә килтереү" тигән мәғәнәлә. Йәғни, төнө буйына Хоҙайҙы маҡтап йырлап, таҡмаҡтар әйтешеп, таңға тиклем бейешеп, башҡорт йәштәре башҡорт донъяһының рәтләнеүен теләгән һәм шуға өмөтләнгән.

Кемдәр улар арийҙар? Тарихсы ғалимдар уларҙың тәү ватанының ҡайһы тирәләрәк булғанын һаман аныҡ ҡына әйтә алмайҙар. Ҡайһы берәүҙәр хәҙерге Төркиә һәм уға яҡын ерҙәрҙә булған, тигән ҡараштә торалар. Икенселәре Ҡара диңгеҙ буйҙарында формалашҡан, тиҙәр. Шул уҡ ваҡытта арийҙарҙың Һиндостан субконтинентына ҡарай юлға сығыуҙарынан алда Көньяҡ Урал һәм уның тирә-яғындағы урманлы-далалы ерҙәрҙә малсылыҡ менән көн күргәндәр, тигән ҡараш та йәшәй тарих фәнендә. Мәсәлән, бөтә донъяға билдәле инглиз ғалимы Гордон Чайлд арийҙар Урал яҡтарында йәшәгән, тип яҙып сыҡҡайны. Йәғни Чайлд Гордондың фекеренә таянып, арийҙар тәүҙә Уралда, башҡорт ерҙәрендә йәшәгән, тип әйтә алабыҙ. Ниндәйҙер, әлегәсә фәнгә билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында, улар Урал яҡтарын ташлап, Урта Азия, Афғанстан аша Һиндостанға барып сығып, шунда төпләнәләр.

"Ахрита" һүҙе "Ахо рита" формаһында боронғо иранлыларҙың Авестаһында ла теркәлгән. Авеста иһә, күпселек ғалимдарҙың фекеренә ҡарағанда, беҙҙең эраға тиклем яҡынса VIII-VII быуаттарҙа формалашҡан булырға тейеш. Әммә Авестаның формалашыу ваҡытын ғалимдар әле булһа аныҡ ҡына әйтә алмайҙар. Шулай ҙа иранлыларҙың дини ҡараштарын сағылдырған был ғилем беҙҙең эраға тиклем беренсе мең йыллыҡтың беренсе яртыһында теркәлгән булырға тейеш, тигән ҡараш нығынған фәндә, һәм, уларҙың әйтеүенсә, теле теркәлгән дәүерҙән күпкә алдараҡ уҡ ҡулланылыуҙан төшөп ҡалған, йәғни, күптән юҡҡа сығып, "үле тел" һаналып, тик руханиҙар ғына ҡулланған тел булған, тиҙәр. Ҡағыҙға теркәүгә иң тәүҙә руханиҙар үҙҙәре ҡаршы була. Сөнки, уларҙың ҡараштарынса, китапҡа яҙылғанды уҡып һөйләү Хоҙайҙы һанға һуҡмау, уны ихтирам итмәү, тип һаналған, тик телдән һөйләү генә тере һүҙ һаналған. Шуға күрә лә руханиҙар Авестаны ҡағыҙға теркәүгә бик оҙаҡ ҡаршы булалар.

Әгәр ғалимдар Авестаның формалашыу ваҡытын дөрөҫ билдәләһәләр, ә әлегәсә уларҙың фекерен берәүҙең дә инҡар иткәне юҡ, тимәк, беҙҙең "ахрита", "ритайым" тигән ритуал бейеүҙәргә лә яҡынса шул уҡ йәште бирергә була, тип уйлайым. Йәғни, был бейеүҙәрҙең йәше яҡынса иң кәмендә өс мең йылдан да кәм түгел, тиергә мөмкин.

Боронғо кешеләр яҙғыһын ҡояштың яңы көс менән ҡыҙҙыра башлауын ҡараңғылыҡ батшаһын, ҡара көстәрҙе еңеүе, тип аңлағандар һәм шул еңеүҙе хуплап, дәртләнешеп бейегәндәр, йырлағандар, таҡмаҡ әйтешкәндәр.

Шулай итеп, беҙҙең йәштәребеҙҙең ритайым үткәреүҙәренең бик боронғо тамыры барлығын шикләнмәйенсә әйтә алабыҙ. Әлбиттә, хәҙерге быуын кешеләре "ритайым", "ахрита" һүҙҙәренең, бейеүенең мәғәнәһен дә, килеп сығыу тарихын да күптән инде онотҡандар. Хатта был турала уйланмайҙар ҙа. Әммә халыҡтың хәтере бик ныҡ. Бынан әллә нисә мең йыл элек үтәлгән яҙғы ритуал бейеүҙәрен быуаттар буйына башҡарып, йәшәтеп, тере килеш беҙҙең көндәргә тиклем һаҡлай алғандар. Тағы ҡайһы халыҡта бындай боронғолоҡ һаҡланған икән? Мин быны әйтә алмайым, белмәйем.

Ҡыҙыҡһынып уйланһаң, тикшеренә башлаһаң, халҡыбыҙҙың телендә, йолаларында бик боронғо дәүерҙәр сағылышын күрергә булыр.

Замандаштарыма - үҙебеҙҙең халыҡтың тарихын онотмайыҡ, уға ихтирамлы булайыҡ, уны төплө өйрәнәйек, тикшерәйек, киләсәк быуынға боҙмай, теүәл тапшырырға тырышайыҡ, тигән теләгемде еткергем килә.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**

✔ ***Беҙҙең заман кешеһенә күңел тарҡаулығы, урынлы-урынһыҙ шөбһәләнеү хас. Күптәр бизнесты төрлө йүнәлештә алып бара. Был тарафта уңмаһам, икенсе тармаҡтан ҡайырып төшөм алырмын, тип уйлайҙар.***



ЭШҠЫУАРЛЫҠ МӘКТӘБЕ

# БАЙЛЫҠ ХАҠЫНА...

## асылыбыҙҙы юғалтмайыҡ!



**Был юлдарҙың авторы Айбулат УРАҘБАХТИН үткән һандарҙың берећендә (25-се һан) йәшәйеш нигеҙҙәре, тормоштоң кире ҡаҡҡыһыҙ ҡанундары тураһында тәрән фәлсәфәһе менән уртаҡлашҡайны. Бай тәжрибә туплаған эшҡыуар булараҡ, сираттағы мәҡәләлә ул һүҙҙе йүнселлек, эшҡыуарлыҡ серҙәре хаҡында алып бара.**

- Совет власы осоронда шәхси йүнселлек юҡҡа сыҡты, сөнки ул закон менән тыйылғайны. Баҙарҙарҙа алыпһатарлыҡ менән кәсеп иткән кешеләргә "спекулянт" тигән яман мөһөр һуғылды. Шуға ла эшҡыуарлыҡ Рәсәй халҡы өсөн сағыштырмаса яңы төшөнсә.

"Спекулянт"тар өсөн хөрриәтлек заманы үткән быуаттың 80-се йылдары аҙағында, 90-сы йылдары башында килде. Ҙур-ҙур сумкалар, төйөнсөктәр менән улар Мәскәүҙән, хатта Төркиә кеүек сит илдәрҙән әйбер ташыны, кейемгә, ябай ғына көнкүреш әйберҙәренә мохтаж халыҡтың ихтыяжын ҡәнәғәтләндерҙе, үҙҙәре өсөн аҡса һуҡты. Ул замандағы магазиндарҙың буш кәштәләре урта йәштән олораҡтарҙың, ҡуркыныс төш кеүек, әле лә хәтерендә.

Башлап юл ярыусыларға еңел тура килмәне. Хәүефле һаналды был шөғөл. Таланып, аҡсаһыҙ ҡалғандар, башын һалғандар ҙа булманы түгел. Бөтә ауырлыҡтарҙы йырып сыҡҡандар бөгөнгө бәҫле бизнесмендарҙың төп өлөшөн тәшкил итә. *Ошонан сығып, ҡыйыулыҡ - эшҡыуарға хас иң мөһим сифат, тип әйтә алабыҙ.*

*Уларҙа шулай уҡ яуаплылыҡ тойғоһо бик көслө.* Үҙ эшен асырға йөрьәт иткән кеше үҙе, ғаиләһе, ҡул аҫтындағы эшселәре, эш һөҙөмтәләре өсөн, дәүләт (һалым һәм башҡа түләүҙәр мәсьәләһенә ҡағылышлы), йәмғиәт (әйтәйек, экология ҡанундарын боҙмау йәһәтенән) алдында яуаплы. Уның эшен һүлпән алып барырға, бөлөргә хаҡы юҡ. Әгәр ваҡытында хеҙмәт хаҡы түләмәй, ҡаҙнаға һалым индермәй икән, тимәк, кеше үҙ урынында түгел, көсө етмәҫ йөк алған иңенә, асылына тап килмәгән шөғөлгә тотонған.

*Ниндәй генә шарттарҙа ла эшҡыуар күңел тыныслығын юғалтырға, төшөнкөлеккә бирелергә тейеш түгел.* Уны көн оҙононда көсөргәнешкә дусар иткән эреле-ваҡлы ваҡиғалар һағалап тора. Шулар йоғонтоһона бирелә икән, ауырлыҡтарҙан арына алмаясаҡ. Бер мәл, тамам хәлһеҙләнеп, һаулығын юғалтып, эшен ябырға мәжбүр булыуы ихтимал.

Ниндәйҙер тауар етештереү, һатыу ойоштороу өсөн илһам, дәрт (энтузиазм) талап ителә. Күңел биреп, ихласлап эшләгәндә генә уңышҡа өмөт итергә мөмкин. *Тимәк, йүнселдең илһамлы кеше булыуы мотлаҡ.*

*Эшҡыуарлыҡ менән уңышлы шөғөлләнер өсөн маҡсат ҡуйырға һәм унан тайпылмай, бер йүнәлеште генә торорға кәрәк.* Йыйнаҡ, һәр йәһәттән теүәл булыу еңел бирелмәй, тип баҫым яһап әйтер инем. Сөнки беҙҙең заман кешеһенә күңел тарҡаулығы, урынлы-урынһыҙ шөбһәләнеү хас. Күптәр бизнесты төрлө йүнәлештә алып бара. Был тарафта унмаһам, икенсе тармаҡтан ҡайырып төшөм алырмын, тип уйлайҙар. Әлбиттә, ул Юлий Цезарь сифаттарына эйә икән, тик хупларға ғына ҡала. Үкенескә ҡаршы, ундай булдыҡлы кешеләр арабыҙҙа бик һирәк. Бер юлы төрлө тармаҡта эшләгән таныш эшҡыуарҙар араһында уңышҡа өлгәшкәндәр юҡ иҫәбендә. Көстө, энергияны бүлгеләү һөҙөмтә бирмәй шулай.

*Эшҡыуарҙың төп һыҙаттары - сумартлыҡ һәм шул уҡ ваҡытта байлыҡҡа ынтылыу ҙа.* Унда булдыҡлылыҡ, эшһөйәрлек сифаттары ярылып ята. Сумартлыҡ тураһында айырым туҡталып китеү лазым. Сөнки ул - эшҡыуарҙың ҡөҙрәтле һәм үтә мөһим сифаты. Иң төп сифаттарының береһе, тип тә әҫтәргә мөмкиндер.

Белеүебеҙсә, рухлы кеше матди донъяға, әйберҙәргә бәйле түгел. Ул был донъяның фанилығын, йән, рух өсөн материяның тәрбиәүи һәм үсеш роленән башҡа бер ниндәй ҙә әһәмиәте юҡ икәнен аңлай. Материяға йәбешеп ятыу йәнебеҙҙе әйберҙәргә бәйләү теләгенә тиң. Беҙ теге донъяға үҙебеҙ менән бер нәмә лә алып китмәйбеҙ, барыһы ла ошонда, ерҙә, ҡала. *Эшҡыуарлыҡ тураһында һүҙ алып барғанда ла, әҙәми зат, ниндәй ҡатламға инеүенә ҡарамай, рухлы һәм камил шәхес булырға тейеш, тигән фекерҙе алға һөрәбеҙ.* Әгәр эшҡыуар, тик үҙ кеҫәмә эшләйем, тип уйлай, һалым түләмәй, хәйер-саҙаҡа бирмәй, мохтаждарға ярҙам итмәй икән, уның кәсебе йылдам алға китеүенә шик тыуа. Алам тиһәң, иң элек бирергә кәрәк! Донъялыҡта кеше бер нәмәгә лә хужа түгел. Ул ерҙәге матди байлыҡ менән ваҡытлыса файҙалана ғына. Шуға ла йәне-тәне менән эшҡыуарлыҡҡа бирелгән кеше - Хоҙай Тәғәлә "тамғалаған" йүнсел - хәйриәлек менән даими шөғөлләнә, уны төп бурыстарының береһе тип ҡабул итә. Изге эштәре тураһында ул һөрәнләп йөрөмәй. Халыҡ юҡҡа әйтмәгән бит, изгелек ҡыл да һыуға һал, кеше белмәһә, Халиҡ белер, тип.

Һанап үтелгән сифаттарға бөтә кеше лә эйә түгел, әлбиттә. Шуға ла эшҡыуарлыҡ һәр кемдең ҡулынан килмәй. Дөйөм халыҡтың тик 6 проценты ғына был өлкәлә эшләй, уңыштарға өлгәшә ала. Мәҫәлән, 600 кеше йәшәгән уртаса ауылды алһаҡ, унда 36 эшҡыуар булыуы ихтимал. Уйлап ҡараһаң, был аҙ ҙа түгел, әлбиттә.

Бөгөнгө көндә эшҡыуарлыҡ шөғөлөнә ҡатын-ҡыҙҙар ҙа тартыла. Араларында уны уңышлы алып барғандар ҙа юҡ түгел. Тик Рәсәй ысынбарлығында урын алған, киң мәғлүмәт саралары аша беҙ танып белгән эшҡыуарлыҡҡа гүзәл заттың яҡын тороуына мин ҡаршымын. Беренсенән, баҙар иҡтисадына яңы аяҡ баҫҡан беҙҙең илдә бизнес алып барыуы үтә лә ауыр. ***Икенсенән, тәбиғәте менән һунарсы һәм малтабар ир-егетҡә генә (тышҡа йүнәлтелгән энергия) тәҫ ул йүнселлек. Ә ғаилә усағын яғыусы, бала бағыусы, ҡаҙан аҫыусы эске энергия эйәһе - ҡатын-ҡыҙ - баҫа икән был юлға, ҡағиҙә булараҡ, ғаиләлә ҡытыршылыҡтар килеп тыуа. Сөнки был осраҡта гүзәл зат ир-егеттәр фиғелен үҙләштерергә, эргәһендәге көслө заттарҙың ир булмышын баҫырға мәжбүр. Көслө ҡатын янында ир үҙенең асылын юғалта.***

Хәҙер рухи һәм матди энергиялар балансы юғалған заман. Нәфсе тыуҙырған матди энергия өҫкә ҡалҡа. Булмағанды булдырырға тырышабыҙ, яҡшынан яҡшыға ынтылабыҙ, аҙҙы күбәйтер өсөн аҡтыҡ көсөбөҙҙө һалабыҙ. Шул уҡ ваҡытта китап уҡымайбыҙ, ғибәҙәт ҡылмайбыҙ, ата-бабалар васыятын һанға һуҡмайбыҙ. Кешенең үҙ көнитмешен яҡшыртырға йүнәлтелгән тынғыһыҙ эшмәкәрлеге фәнни-техник прогресты алға этәрә. Ә прогресс үҙ сиратында йәмғиәттә яңы үсеш баҫҡысына күтәрә, йәшәү өсөн яңынан-яңы уңайлы шарттар тыуҙыра.

Эшҡыуарлыҡ миҫалында беҙ тағы ла гендер (социаль ролдәре нигеҙендә ир-аттар һәм ҡатын-ҡыҙҙар билдәләмәһен аңлатҡан термин) проблемаһына ҡайттыҡ. Башҡаса булыуы мөмкин дә түгел, сөнки ***бөгөн, ҡайҙа ҡараһаҡ та, тәбиғәт, Аллаһ Тәғәлә тарафынан билдәләнгән сиктәр емерелә, төшенсәләр бутала, кешелек йәмғиәтенең нигеҙ ташы бушай. Аңһыҙ рәүештә беҙ үҙебеҙ уны ҡаҡшатабыҙ, йәлап емерәбеҙ.***

Әлбиттә, эшҡыуарлыҡ өлкәһендә ҡатын-ҡыҙҙар фиғеленә тап килгән йүнәлештәр ҙә байтаҡ. Мәҫәлән, косметология йәки башҡа ҡатын-ҡыҙҙар әйберҙәренең селтәр (сетевой) бизнесы. Эшҡыуарлыҡтың был төрө гүзәл заттар асылына, эске энергияһына тулыһынса тап килә. Сөнки ул аралашыуға, серләшеүгә, күргәҙмәләр, мастер-класстар үткәреүгә ҡайтып ҡала. Тик ҡатын-ҡыҙҙың был шөғөлө ғаилә мәнфәғәтенә зыян килтерергә тейеш түгел. Тәүлек әйләнәһенә ул интернетта ултырһа, социаль селтәрҙәрҙән айырыла алмаһа, ҡулынан гаджеттарын төшөрмәһә - эш харап. Был балалар - әсәһен, ир ҡатынын юғалтты тигән һүҙ. Минең хәләл ефетем күп йылдар эшҡыуарлыҡтың ошо йүнәлешендә уңышлы эшләй. Аңлашып, бик татыу көн итәбеҙ.

Тағы ла бер бик мөһим нәмәне онотмаҫҡа кәрәк: ошо рәүешле эшләп алған аҡсаһын ҡатын-ҡыҙ фәҡәт үҙе өсөн генә тотонорға тейеш. Килемде ғаиләне аҫрау (шампунь, теш пастаһы кеүек ваҡ әйберҙәр иҫәпкә инмәй) өсөн сарыфлау тормош иптәшен шаштырыуы, хатта никахтарын емереүе ихтимал.

Әлбиттә, тормошта һәр кем юлды үҙе һайлай. Тик бер ҡасан да, бер ниндәй шарттарҙа ла, ҙур байлыҡ хаҡына ла үҙ асылыбыҙҙы юғалтмаҫҡа тырышайыҡ.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН**
**әҙерләне.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ЯРЛЫ КЕШЕЛӘР...

## байлыҡты бәхеткә һынай

**Ниндәй ғәҙәттәребеҙ беҙҙе ярлы булыуға программалай? Ғалимдар асыҡлауынса, ысынлап та, ҡайһы бер ғәҙәттәребеҙ баш мейеһенең физик торошона тәьсир итеп, "ярлы йәшәргә бойора ала" икән. Шуға күрә, етеш йәшәргә теләүселәргә ғалимдар түбәндә килтерелгән ғәҙәттәрҙән арынырға тәҡдим итә.**

- *Үҙеңде йәлләү ғәҙәте.* Ярлы йәшәргә күнегеү үҙеңде үҙең йәлләп, тормошоңа зарланып илауҙан башлана. Кеше бихисап төрлө сәбәптәргә һылтанып, үҙен йәлләп иларға, уңышһыҙлығына хәсрәтләнергә мөмкин. Йә уға Хоҙай Тәғәлә матур тышҡы ҡиәфәт бирмәгән, йә аҡсалы эш юҡ, йә ул теләгән фатир эләкмәгән, йә һауа торошо оҡшамай, йә кибеттә һатыусы уҫал күренә. Үҙен үҙе йәлләп, гел генә илап йөрөгән кешенең ҡайғыһын уртаҡлашыуҙан да бүтәндәр тиҙ арала баш тарта. Ундай баһырҡайға, әлбиттә, бергә ҡайғырып, шәфҡәт күрһәтергә була, ләкин ул үҙе лә нимәләр эшләргә тейеш бит. Үҙ-үҙеңде йәлләү - эш хаҡы аҙ түләнгән эштә тороп ҡалыу, ҡыҙыҡһыҙ йәшәйештең иң төп сәбәбе.
- *һәр нәмәне экономиялау, һыҡмырланыу, аҡсаңды хатта үҙеңдән дә йәлләү ҙә ярлылыҡҡа илтеүсе сәбәп икән.* Әгәр ҙә һеҙ магазинға барып инеү менән арзан хаҡҡа һатылған тауарҙар бүлеген эҙләһәгеҙ, йә коллегаларығыҙ һеҙгә ҡарағанда аҙ эшләһә лә күберәк эш хаҡы ала, тип һанаһағыҙ, береһенә лә үтескә аҡса биреп тормаһағыҙ, официанттарға сәйлек бирмәһәгеҙ - ярлы йәшәү рәүешенә хас ғәҙәттәр һеҙҙә күптән бар. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, артыҡ экономиялау ул һаҡсыл булыуҙы аңлатмай, был кешенең килеме һәм сығымдары араһында баланс булмауына ишара яһай.
- *Бөтә нәмәне аҡса менән үлсәп ҡарарға ғәҙәтләнгән кешеләр ҙә байып китә алмай.* Социологтар иҫбатлауынса, "Бәхет өсөн һеҙгә нимә кәрәк?" тигән һорауға яуап биргәндә тик ярлы кешеләр генә матди байлыҡтарҙы теҙеп һанап әйтә башлай. Юғары килем алған кешеләр тәү сиратта тоғро мөхәббәт һәм дуҫлыҡ кәрәк булыуы тураһында һөйләй. Байҙар - аҡса эшләй белгән, юҡ ҡына урында яңы бизнес асып эшләгән кешеләр, тигән фекерҙә улар.
- *Аҡса бөтә башлаһа, паникаға бирелеү.* Байҙар аҡсаға бөгөн бар, иртәгә юҡ, тигән ҡараштa була.
- *Эшләгән аҡсағыҙҙың күбеһен түҙҙырыу холҡо ла ярлы йәшәргә этәргән алама ғәҙәттәрҙең береһе.* Ике эштә эшләп тә аҡса еткерә алмаһағыҙ, ниммәнелер үҙгәртергә кәрәк!
- *Үҙенә оҡшамаған эш менән шөғөлләнгән кеше лә байып китә алмай.* Психологтар әйтеүенсә, күңеленә ятмаған эштә эшләүселәр уңышһыҙлыҡ кисерергә һәм ярлы тормошта йәшәргә күнеккән.
- *Туғандарҙан алыҫлашыу, ситләшеү ҙә кешегә файҙа килтермәй.* Ғәҙәттә, үҙ ғаиләһенән ситләшеүселәрҙән даланһыҙ кешеләр үҫеп етә. "Нишләп мин ҡәйнәмә шылтыратырға тейеш? Уға кәрәк булғас, үҙе шылтыратһын", "Мөнир менән Мәстүрә - колхозсы бит, уларҙы саҡырмайыҡ, кеше нимә уйлар?", "Атай, иҫләйһеңме, һин мине урамда бөтәһе алдында ърләгәйнең? Эйе, миңә дүрт кенә йәш булһа ла, онотмағанмын..." тигәнгә оҡшаш һүҙҙәрҙе яҡындарығыҙ һеҙҙән йыш ишетһә, тимәк, һеҙ ярлы.

**✓ Уға ярҙам булыр тип, икенсе көн килеүенә яңы мейес стенаһына бер нисә кирбес кенә өҫтәп һалғайным. "Белгәсең - үҙең һал мейесеңде", тип ташлап сыҡты ла китте. Ике аҙна буйына инәлеп йөрөнөм артынан.**




Бихисап баҡса эштәре, малға бесән, йорт-ҡураны ҡышҡылыҡҡа әҙерләү мәшәҡәттәре менән йәмле йәй көндәре күҙ асып йомғансы үтеп тә китте. Тиҫтерҙәре менән уйнап, йылға-күлдәрҙә ҡолас ташлап йөҙгән, аҙаҡ тыныс ҡына ял итеү өсөн яр буйында балыҡ ҡармаҡлаған балалар, өләсәйҙәре һәм олатайҙары янына ҡайтҡан ейәнейәнсәрҙәр үҙҙәре йәшәгән ҡала-ауылдарына ҡайтып китте. Быҫҡаҡ ямғырҙары, ыжғыр елдәре менән көҙ ауыл йорттарының тәҙрәләрен шаҡыны.

Тәбиғәттәге үҙгәреш тә ҡышҡылыҡҡа әҙерләнеү кәрәклеге тураһында һәр кемдең иҫенә төшөрҙө. Өҫтәүенә, Алмалы ауылына ла газ килеп етә, имеш, тигән хәбәр күҙ асып йомғансы һәр йортҡа инеп сыҡты. Бынан 10-15 йыл элек тә шундай уҡ хәбәрҙе ишетеп, ауыл халҡы шатланғайны. Тик уларға барыбер ашығыс рәүештә иҫкергән мейестәрен яңыртыуҙы хәстәрләргә тура килде.

Тирә-яҡҡа "мейессе Мотаһар" тигән даны таралған ағайыбыҙ, бына бер нисә көн инде балтаһы һыуға төшкән кешеләй, ауыр уйҙарға бирелеп йөрөй. Ғүмер буйы тип әйтерлек мейес сығарған Мотаһар ағай газ тураһындағы хәбәрҙе бик ауыр көрһөнөп ҡабул итте. Ә бына ауылдағылар берсә шатланды, берсә хафаланды.

- Газ мейесе өй йылытыу өсөн генә ярай, барыбер аласыҡҡа булһа ла Мотаһар ағайҙан мейес сығартырға тура килер, мағайын. Беҙ ни, өй мейесендә бешкән икмәктә ашап өйрәнгәнбеҙ ҙә инде, - тип икеләнде улар.

- Ҡыш елдәре тәҙрә шаҡығанда газ үткәргәндәрен көтөп ултырып булмаҫ. Тағы бер ҡышты элеккесә мейесебеҙ йылыһына ҡыуанып үткәрәйек, - тип тынысланды икенселәре.

"Мейессе Мотаһар" тигән даны үҙҙәренең ауылында ғына түгел, хатта яҡын-тирә районҙарҙа ла танылһа ла, ағайыбыҙҙың ҡулынан килмәгән эше юҡ. Ул эшләгән бураны, сәмәрле биҙәкле тәҙрә ҡапҡастарын, һуңғы йылдарҙа киң һорау менән файҙаланылған "килен" һандыҡтарын һәм башҡа ағастан эшләнгән бихисап әйберҙәрҙе бөгөн уҡ Бөтә Рәсәй күргәҙмәһенә ҡуйырға була. Ул ғына ла түгел, Мотаһар ағай баҫҡан йомшаҡ быйма ҡышҡы һыуыҡтарҙа һәр бер ауылдашының аяғында була. Әммә бар талантлы кешеләргә хас булғанса, Мотаһар ағайҙың да холҡо, халыҡ әйтмешләй, үҙе янында йөрөй.

Шулай ҙа ауыл кешеләре, нисек кенә булмаһын, мейесте унан сығартыуҙы, ул баҫҡан быйманы кейеүҙе өҫтөн күрә. Бер аҙна элек үрге ос Сәйетғәле лә мейессе Мотаһарҙы өйөнә мейес сығарырға саҡырҙы.

* * *

Иртә менән мал-тыуары янындағы эшен тамамлағандан һуң Мотаһар ағай соланындағы кәштәнән инде күпте күргән, ҡайышланып бөткән, ике кирбес оҙонлоғондағы шыйыҡ сыбығын, тоҡҡа тултырылған эш ҡоралдарын алды ла Сәйетғәлеләргә йүнәлде. Төнөн быҫҡаҡлап яуған көҙгө ямғырҙан күтергә әйләнгән урамдың кәртә ситтәренән генә барып, мейес сығарыласаҡ йорт ихатаһының ҡапҡаһын асты. Ыҡсым ғына итеп йыйыштарылған ихатала көрәгенә таянып торған хужа, мейессе менән ихлаҫлап күрешеп, йортона саҡырҙы.

- Әйҙүк, Мотаһар ағай, түрҙән үт, маҡтап ҡына йөрөйһөң, беҙ бына сәй эсергә йыйынғанбыҙ, - тип хужабикә лә мейессене яҡты йөҙө менән ҡаршы алды.

- Сәйләп ултырырға ваҡыт тар, - тип ҡырт киҫте оҫта.

Стена буйында ултырған ялғаштағы балсыҡты, усында әүмәләп, тәкәрәгә менән иҙеп ҡараны. Бар ҡиәфәте, килешкилбәте уның оҫта булыуын такрарлай ине.

- Балсыҡты шул Сапый тауынан соҡоп килтерҙем, - тине хужа, оҫтаның бер алдына, бер артына сығып, ярарға тырышып, - Мотаһар ағай, бөтәһе лә әҙер, эште бөгөн башлаһаҡ та була...

- Ашыҡҡан ашҡа бешкән, тигән мәҡәлде лә онотмайыҡ, Сәйетғәле ҡустым, һәр эштең үҙ мәле, үҙ тәртибе була. Әле ҡоштар ҙа йылы яҡҡа осоп китмәгән. Унан һуң ашығырға мин дә бәйге аты түгел бит, - мейессе өйгә ингәне бирле беренсе тапҡыр ҡаты ғына итеп, күҙҙәрен тултырып, Сәйетғәлегә ҡараны. Уҡтай тура ҡараштан Сәйетғәле хатта бер аҙ албырғап ҡалды.

- Ней, бәйге, тип ней, мейес бик ныҡ иҫкерҙе шул, өй ҡапыл ныҡлап һыуына ла ҡуя, бала-саға өшөй, сирләп китмәһендәр тип ҡурҡам...

- Ана шул-шул, балалар өсөн генә тимәгәндә... - тине оҫта йомшағыраҡ тауыш менән. Һүтелгән мейес кирбесе өйөмөн, алтын әҙләгәндәй, ҡулындағы шыйыҡ сыбығы менән һуҡкылап сыҡҡас. - Өҫтәп кирбес алдыңмы? - тип тағы һораулы ҡарашын хужаға төбәне.

- Был да етер ул, Мотаһар ағай...

- Ә-ә-ә, - мейессе, әкрен генә мығырҙап, ишеккә табан йүнәлде.

Мотаһар ағайҙың күңеленә ятмаған һүҙ әйтеүен аңлап, Сәйетғәле ашыға-ашыға:

- Ней, Мотаһар ағай, 100 яңы кирбес аласыҡта ята. Мейесте өр-яңы кирбестән сығарһаң да ризамын, - тине лә мейессенең алдына сығып уҡ баҫты. - Әйҙәгеҙ, тәмләп кенә сәй эсеп алайыҡ, шунан һеҙҙең ирекктә инде, Мотаһар ағай, бөгөн, тиһәгеҙ - бөгөн, иртәгә, йә иртәнән һуңға, тиһәгеҙ - иртәнән һуңға тотонорбоҙ эшкә.

Мейессе ҡулындағы сыбығы менән кәпәсен күтәреп систе лә самауыр янына барып ултырҙы. Ул көндө Мотаһар ағай менән Сәйетғәле икәүләп мейестең нигеҙен һалып уҡ ҡуйҙылар.

* * *

Оҫтаның холҡон бер аҙ аңлай башлаған хужалар икенсе көндө бер аҙ тулҡынланып көттө. Таң һарыһынан тупһала туҡылдаған аяҡ тауышы ишетелеү менән Сәйетғәле ишек төбөндә ине инде.

- Өйҙәләрме? - тип ишекте шар асып килеп инде Мотаһар ағай.

Ул килеп инеү менән ҙур өй эсе тотошлайы менән тулғандай булды. Сәйетғәлегә хатта бөтә һәмә хәрәкәткә килгән кеүек тойолдо. Ялғаштар янына ҡуйылған ике күнәккә ҡарап, ахырыһы, һыуҙың ҡайҙан килтерелеүен асыҡларға булды мейессе.

- Тимерләнәнме?

- Эйе-эйе. Мал-тыуар йылғаға төшкәнсе уҡ алып ҡуйҙыҡ, - тине Сәйетғәле аҡланырға тырышҡандай.

- Ҡояш нурҙарына ҡойонған һыу иҙмәгә ҡулай була ул, - мейессе, еңдәрен һыҙғанып, күнәктәге һыуҙы, ниндәйҙер уға ғына хас булған ләззәтле ҡараш менән сүмесләп буш торған ялғашҡа ҡойҙо. Шунан инде бәләкәй генә көрәге менән, иплап кенә балсыҡ алып, уны һыуҙа бутай башланы.

Сәйетғәле эстән генә: "Аллаға шөкөр, башланыҡ шикелле", - тип уйлап та өлгөрмәне, оҫтаның: "Яңы кирбестәреңде килтер әле!" - тигән бойороғо яңғыраны.

Эш башланғас, Мотаһар ағайҙың ҡырыҫ, күмһеү йөҙө яҡтырып, хатта балҡып китте. Һәр кирбесте, сабый балалай күреп, иплап кенә, хатта ниндәйҙер үҙенә генә хас булған наҙ менән ала ла, әйләндергеләп ҡарағандан һуң, иҙмәне кирбестең бер яғына йәбештерә һәм тейешле урынына ҡуя. Шунан инде, ауырттырып ҡуйыуҙан ҡурҡҡандай, мастерогының һабы менән һаҡ ҡына һуҡкыслап, тейешле урынына ултырта, артыҡ иҙмәне мастерогы менән иплап кенә һыпырып ала. Барлыҡҡа килгән тигеҙ кирбес стенаға бер аҙ һоҡланып ҡарап тора. Ә ҡайһы берҙә ҡуйылған кирбесте һурып алып, әйләндерге-ләп ҡарай ҙа икенсе яғы менән элекке урынына ҡуя. Оҫта бик әкрен ҡыбырҙаған кеүек тойолһа ла көн аҙағына тиклем мейес стенаһы яртылаш күтәрелде.

- Ярар, ҡустым, бөгөнгә ошо ерҙә туҡтап торайыҡ.

- Мотаһар ағай, иртәгә лә эште дауам итербеҙ инде, көндәр һыуыныуға бара бит...

- Ҡоштарҙың тупланып осоуына ҡарағанда көндәр әллә ни һыуынмаҫ әле. Ашығып, абыным ҡуймайыҡ. Унан һуң, кисә управ иген келәте ҡыйығының бер осон шифер менән көпләп ҡуйырға ҡушты, тишелгән ерҙәре бар икән. Унда ҡаранғы төшкәнсе эшләргә тура килер, мағайын. Шуға иртәгә килә алмаҫмын. Бына ялғашта иҙелгән балсыҡ өҫтөнә бер аҙ һыу ҡой, кибеп, ҡатып ҡуймаһын. Иртәнән һуңға килгәс, үҙем яраҡлаштырып, балсыҡ өҫтәп бутармын, - һүҙен тамамлағас, хәбәрҙән һөйләй-һөйләй эш ҡоралдарын таҙартып, йыйыштырып ҡуйҙы ла ҡайтырға йыйынды.

- Мотаһар ағай, киленең сәй табынын әҙерлап ҡуйған, әйҙә, сәй эсеп ҡайт, - тине Сәйетғәле.

- Рәхмәт киленгә. Йәшерәк булғанда мин дә һинең кеүегерәк ашыға торғайным. Ә хәҙер бына эшкә түгел, ә киске намаҙға һунлап ҡуймайым, тип ашығам. Унан һуң, бөгөн бер аҙ арыттырҙы ла. Рауза еңгәң дә, сәйен ҡайнатып, мин ҡайтҡанды көтә лә ултыра торған. Киске сәйҙе урындыҡта иркенләп, йәйрәп ултырып, йайлап эсергә яратабыҙ...

Кискә табан Сәйетғәлеләргә, хәл белергә, тип, күршеһе Мөнир килеп инде.

- Былай булғас, иртәнән һуңға мейесте ослап та ҡуйырбыҙ, мағайын, - тип Сәйетғәле үҙенең шатлығы менән уртаҡлашырға ашыҡты.

- Мейессе Мотаһар алдында әйтеп ҡуйма был һүҙеңде, - тип иҫкәртте күршеһе, - элекке йыл мине нисек иҙалатҡанын беләһең бит. Уға ярҙам булыр тип, икенсе көн килеүенә яңы мейес стенаһына бер нисә кирбес кенә өҫтәп һалғайным. "Белгәсең - үҙең һал мейесеңде", тип ташлап сыҡты ла китте. Ике аҙна буйына инәлеп йөрөнөм артынан. Миңъямал апай, кеше балаларын ауыртаһың бит, тип әрләгәс кенә, ипкә килеп, эшен тамамланы.

- Инде былай ҙа ни алып, ни бирергә белмәй торабыҙ, - тип уның һүҙен йөпләне Сәйетғәле. - Беләһең бит инде: кинйә малай ни бары биш айлыҡ ҡына әле. Шуға, биш бала менән тығынырак булһа ла, ғаилә менән аласыҡтабыҙ. Уның ҡарауы, йылы, балалар өшөмәй...

* * *

2-3 көндә булмаһа ла аҙна тигәндә Мотаһар оҫта Сәйетғәле мейесенең ҡыйыҡҡа еткән өлөшөн йомғаҡланы. Ҡыйыҡ башына менеп, мөрйә ултыртылыу менән мейеск ут яғырға ла була.

- Мөрйәне ашыҡ-бошоҡ ҡуйырға ярамай, иртәнге ҡояш нурҙары аҫтында иплап кенә ҡуйырбыҙ, - тигән ҡарарын сығарҙы оҫта.

- Ысынлап та, шулай булһын, - тине Сәйетғәле, оҫтаның ҡарарын бик хафаланып ҡабул итһә лә. - Мейес стеналарын шымартыуҙы ла бер ыңғайҙан миңә өйрәтерһең, Мотаһар ағай.

- Әл-лә-ә мейессе һөнәрен үҙләштерергә ниәтләйһеңме? - тип Мотаһар мейессе Сәйетғәлегә көләмһерәп, шул уҡ ваҡытта туп-тура итеп ҡараны. - Ә ниңә өйрәтмәҫкә һиңә! Өйрәтермен, әлбиттә.

Оҫтаның был һүҙҙәре генә түгел, ә уның йылы ҡарашы ла Сәйетғәлене шаҡ ҡатырҙы. Шулай итеп, осҡо Сәйетғәле өйөндәгеләр шатланып та, бер аҙ борсолоп та яңы көн тыуғанын көтөп алды.

Иртәнсәк ҡояш ҡалҡыу менән Мотаһар ағай, гәҙәттәгесә, өй ишеген шарҙай асып, һаулыҡ һорашып килеп инде. Бөгөн ул ҡултығы аҫтына сәскәле тауарға төрөлгән төйөнсәк тә ҡыҫтырып алғайны.

- Әле иҫәнмеһегеҙ, - тип йылмайып иҫәнләште лә, бер аҙ алғараҡ үтеп, оҫта, тик уға ғына хас булғанса, иплап кенә килтергән төйөнсөгөн аса башланы. Бер минут үттеме-юҡмы, уның ҡулында бәләкәй генә, ап-аҡ йөндән баҫылған быйма хасил булды.

- Йә, Хоҙай, ниндәй мату-ур, - ошоға тиклем тауыш-тын сығармай ғына, бар эшен дә еренә еткереп эшләп йөрөгән киленкәйҙең тауышы ине был.

***✓ Иғтибарлыраҡ ҡарағыҙ, кинйә ҡустығыҙ Хоҙай тарафынан яратылғанды хәстәрләй, илаһи көс ҡөҙрәте менән барлыҡҡа килгән үләндәргә, емеш-еләккә, ағастарға йән өрә. Аллаһ Тәғәләнең матдиләшкән уй-хыялын һаҡлай.***

- Был минең иң яҡын дуҫым булған Әбүталип ҡорҙаштың әле аласыҡта сәңгелдәктә ятҡан ейәненә бүләк, - тип ҡулындағы быйманы киленкәйҙең ҡулына тотторҙо ла, яҡында ғына торған ултырғысҡа ултырғас, һүҙен дауам итте. - Әрме хеҙмәтенә беҙ Әбүталип менән бергә киттек, артабан да беҙҙе айырманылар. Шуға тиклем район үҙәгенән ары китмәгән ауыл малайҙарына Сахалинда хеҙмәт итергә тура килде. Ҡырҡ мир балаһы араһында беребеҙгә-беребеҙ терәк, таяныс булдыҡ. Хәрби хеҙмәттә бер кемдән дә ҡалышманыҡ, гелән маҡталып торҙоҡ. Атайҙарға ла беҙҙең турала Маҡтау хаттары яуып торҙо. Ҡышын беҙҙе урманға ағас ҡырҡырға ебәрҙеләр, унда ла үҙебеҙҙе, урманлы ерҙә йәшәп, бысҡы, балта тотоп эшләп өйрәнгән егеттәр булараҡ командирҙар алдында күрһәтә алдыҡ. Бер көндө урмандағы эш барышын тикшерергә батальон командиры ла килгәйне, - тип һүҙен дауам итте оҫта. - Ул, эш ҡоралдарын уңай ҡулланып, йәһәт эшләгәнебеҙҙе күреп: "Молодцы, сынки, из каких краев будете, орлы?" - тигән һорауына бер тауыштан: "Беҙ - Башҡортостандан", - тип яуапланыҡ. "Знаю башкир, в свое время вместе воевали на фронтах. Знатные были парни!" - тине ул. Командировка ваҡыты бөтөп, частҡа ҡайтҡас, иртәгеһенә бөтә батальон алдында икебеҙгә лә Маҡтау грамоталарын тапшырҙы.

- Шулай-шулай, Мотаһар ағай, атайҙың хәрби частан бирелгән грамоталарын һәр ваҡыт балаларыма күрһәтеп алам.

- Дөрөҫ эшләйһең, ҡустым. Балалар олаталарының кем булыуын белеп, уларға тиңләшеп үҫһендәр!

- Сәйетғәле ҡустым, - тип һүҙен дауам итте Мотаһар ағай. - Иң ҡыҙығы: икебеҙ ҙә бер көндә "дембель" ҡағыҙын алдыҡ. Тик бына Әбүталип ҡорҙаш иртә китте арабыҙҙан. Йәне йәннәттә булһын уның, - тип Мотаһар ағай, күҙҙәрен һөртөп, сылт-сылт йомғолап алғас, - әйҙә, Сәйетғәле ҡустым, эшебеҙҙе йомғаҡлап ҡуйайыҡ. Әгәр мейессе һөнәрен үҙләштерәм, тиһәң, минән һиңә фатиха. Ваҡытың булғанда минең менән мейес сығарырға йөрөп, һәр кирбесте үҙ ҡулдарың менән тотоп, ҡайһы урынға, нисек ҡуйырға өйрәнерһең.

Ысынлап та, һәр эштең үҙ нескәлектәре бар шул. Мотаһар ағайҙың ҡушыуы буйынса Сәйетғәле, өй ҡыйығына тиклем кирбестән һалынған мөрйәгә, ҡыйыҡҡа йәм биреп торғандай ялтыр тимер торбаны өҫтәү өсөн ҡыйыҡ башына мендереп, ҡыйыҡтағы торба ҡуйыла торған уйымға урынлаштырҙы. Мотаһар ағай әкрен генә, бик ҙур һаҡлыҡ менән тимер торбаны мөрйәгә ныҡлап тоташтырып ҡуйҙы.

- Бына, Сәйетғәле ҡустым, мейесең әҙер булды, әйҙә, ҡыйыҡ башынан төшөп, "бисмилла" итеп, ут тоҡандырайыҡ.

Эш тамамланды! Мотаһар оҫта менән Сәйетғәле, өй ҡыйығында яңы мейес мөрйәһенең маһайып ултырыуын күреп, ҡыуанды. Яңы мейескә утын яғыу мәле етте.

Ә оҫта күңеле менән бөтөнләй икенсе донъяла ине. Уның, сабыйҙарса йылмайып, мейесте бала иркәләгәндәй һыйпап йөрөүе үҙе бер мөжизә кеүек ҡабул ителде.

Мотаһар ағай Сәйетғәле көнәлгәре өйгә индереп ҡуйған бер ҡосаҡ утынды усаҡҡа берәмләп, һаҡ ҡына һалды ла, сүмесләп кенә ҡаҙанға таҙа һыуҙы яртылаш тултырғас, усаҡтағы утындар араһына сыра менән ҡайын туҙы һалып, ут тоҡандырҙы.

Аҙна буйы мейессе янында бесәй кеүек кенә баҫып йөрөгән бала-саға, мөрйәнән һүрән генә төтөн сығыуын күргәс тә, уны-быны ҡарамай, шаулашып, эркелеп өйгә инделәр ҙә, оҫтаның мейес стеналарын йылмайып, һыйпап йөрөүен күреп, шымып туҡтап ҡалдылар. Уның һәр хәрәкәтен һоҡланып күҙәтеп торған ғаилә ағзаларына, оҫта, ярышта еңгән батырҙай, йылмайып баҡты. Ысынлап та, ул бит тағы ла бер өйгә йылы бүләк итте.

Хужалар тиҙ арала өҫтәлгә табаҡ менән боҫо борҡорап торған ит, бәләкәйерәк ике табаҡта бишбармаҡ һәм ошо сара өсөн махсус әҙерләнгән буҙаны ҡуйҙы.

- Йә, хушығыҙ, өҫтәлдәге ризыҡтан ауыҙ итегеҙ, Мотаһар ағай, әсәй махсус ошо табын өсөн буҙа ла ҡойған. Әсәйҙең буҙаһы тәмле була ул - тип хужа ҡунаҡты ҡыҫтай башланы.

- Ай-һай, Мотаһар ағай, мейескә ут тоҡандырғас ней, өйгә йәм кереп, йылынып киткәндәй булды, - тип Сәйетғәле өҫтөндәге кәстүмен сисеп үк ҡуйҙы.

- Эйе, эйе, өй йылына, йылына, мейесте ысын оҫта сығарҙы бит. Рәхмәт, Мотаһар, - тип ҡыуанып Сәйетғәленең әсәһе лә улының һүҙҙәрен ҡеүәтләне .

- Минең һүҙҙе йыҡмай килгәнегеҙ өсөн рәхмәт инде, Мотаһар ағай, - тине ихласлап Сәйетғәле.

- Ярай, хужалар, мейесегеҙҙең мөнфәғәтен күрегеҙ, ул да үҙегеҙ кеүек ихлас йылмайып, өйөгөҙҙө йылытып торһон, - тип оҫта эш ҡоралдары һалынған тоғон, шыйыҡ сыбығын алды. - Әбүталип ҡорҙаштың рухын рәнйетмайенсә, матур йәшәйһең, Сәйетғәле ҡусты, артабан да шулай булып ҡал, - тип ишеккә табан йүнәлде.

Сәйетғәле ошо бер аҙна эсендә Мотаһар мейессенән бик күп фәһем алырлыҡ һүҙҙәр ишетеүен, ябай ғына ауыл кешеһенең күңелендә донъяға, кешеләргә ҡарата ғәжәп фәһемле сер ятыуын, ауылдаштарына ғына түгел, хатта әйләнә тирәһендәге мөхиткә, ябай көнкүреш әйберҙәренә лә ни тиклем иғтибарлы һәм ихтирамлы булыуын аңланы. Тап ошондай ябай ҙа, шул уҡ ваҡытта ҡатмарлы ла булған заттарының булыуы арҡаһында ауылдарыбыҙҙың ҡото, йәме һаҡлана икән, тигән уйынан, ниндәйҙер быға са тойолмаған рәхәтлек кисереп, йылмайып, яуҙа еңгән батырҙай тойҙо үҙен Сәйетғәле.

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП

# ОЖМАХ БАҠСАҺЫН ЕРҘӘ ҮҪТЕР!



Ағалы-ҡустылы дүрт туған аталарының ҡәберенә зыярат ҡылырға килгән. Уларҙы бер һорау борсоған: баҡыйлыҡҡа күскәс, ғәзиз кешеләренең рухы йәннәттәме, әллә тамуҡтамы.

Туғандарҙың теләге шул хәтлем көслө булғандыр, күрәһең, аталарының рухы, ни хикмәт менәндер, уларҙың алдына баҫҡан. Был мөғжизәгә иҫтәре киткән туғандар аптырау ҡатыш тәүге һорауын биргән: "Атай, йәнең йәннәттәме?"

- Эйе, уландарым, минең йәнем мөғжизәле ожмахта, - тип яуап биргән атай.

- Баҡыйлыҡҡа күскәс, беҙҙең йәндәребеҙ ҡайҙа эләгер икән - ожмахҡамы, әллә тамуҡҡамы? - тип һорарға ашыҡҡан улдары.

- Фани донъяла ни ғәмәлдәр ҡылдығыҙ? - тип, һорауға һорау менән яуап биргән рух.

Ир-азаматтар бер-бер артлы уның һорауына яуап биргән.

- Атай, мин ҙур ғәскәр башлығы дәрәжәһенә тиклем күтәрелдем, Тыуған илемде дошмандарҙан һаҡланым, - тип башлап киткән иң өлкән улы. - Ярлыларҙы һәм хәлһеҙҙәрҙе бер ваҡытта ла рәнйетмәнем, үҙ һуғышсыларымды ҡурсаларға тырыштым. Аллаһ Тәғәләнең барлығына инанып йәшәнем. Шуға күрә ожмахҡа эләгермен, тип уйлайым.

- Мин Аллаһ Тәғәләнең тәғлимәттәрен халыҡҡа тараттым, уларҙы изгелеккә өндәнем һәм ошо өлкәлә билдәле рухани булдым, шуға күрә, мин дә ожмахҡа эләгермен тип уйлайым, - тип яуап биргән икенсе улы.

Өсөнсө улы былай яуаплаған:

- Мин билдәле ғалиммын. Кешеләрҙең йәшәйешен еңеләйтеү өсөн бик күп асыштар яһаным. Ғилем өлкәһендәге һәр асышым өсөн Аллаһҡа рәхмәттәр уҡыйым. Шуға күрә мин дә һис шикһеҙ ожмахҡа эләгергә тейешмен.

- Ә мин, атай, баҡса үҫтерәм, мул уңыш алыр өсөн тир түгәм, - тип башлаған һүҙен кесе улы. - Хеҙмәтем емешенән ағайҙарыма ла өләшәм. Яман уйҙарҙан йыраҡ йөрөргә тырышам, изге ғәмәлдәрҙе ихлас үтәйем һәм шуға күрә ожмахҡа эләгермен тип өмөтләнәм.

- Былай булғас йәндәрегеҙ йәннәттә буласаҡ, - тигән дә аталарының рухы, юҡтан бар булғандай, барҙан юҡҡа сыҡҡан.

Йылдар үткән. Туғандар үҙ үлемдәре менән үлеп, баҡыйлыҡҡа күскән. Тик ни ғәләмәт: ожмах баҡсаһында иң кесе ҡустыларының рухы пәйҙә булмаған. Өс туған аталарына өндәшкән. "Атай, әйтсе беҙгә, кесе ҡустыбыҙҙың рухын ниңә ожмах баҡсаһында күрмәйбеҙ? - тигән улар. - Ер үлсәме менән иҫәпләгәндә беҙҙең баҡыйлыҡҡа күсеүебеҙгә йөҙ йылдан ашыу ваҡыт үтте бит". "Бушҡа борсолмағыҙ, ҡустығыҙ ҙа ожмах баҡсаһында көн итә. Әле һеҙҙең арағыҙҙа булмауының сәбәбе ябай ғына: ул һаман да Аллаһ Тәғәлә менән мөғәмәләһен туҡтатмаған".

Ерҙәге ваҡыт үлсәме менән тағы ла бер быуат ваҡыт арауығы үткән. Өс туған ожмах баҡсаһында яңынан осрашҡан, әммә кинйә ҡустыларының рухы һаман да күренмәгән. Аптырауға ҡалған ағай-эне йәнә аталарына мөрәжәғәт иткән.

- Йөҙ йыл ваҡыт үтте, ә кинйә ҡустыбыҙ һаман да ожмахҡа күсмәй, ҡайҙа ул? - тип төбәшкән улар.

- Ул һаман да Аллаһы Тәғәлә менән һөйләшеүенән туҡтамаған, шуға күрә арағыҙҙа юҡ, - тип яуап биргән атай кеше.

- Ә ниңә беҙ уны күрмәйбеҙ? Ул ҡайҙа, Хоҙай менән нисек аралаша? - тип һораған туғандар.

- Ергә ҡарағыҙ, - тип яуап биргән аталары.

Өс туған ожмахтан ергә баҡҡан. Гөл-сәскәләргә күмелгән гүзәл баҡса күргән улар. Бәләкәй ҡустылары элекке кеүек һаман да ер эшкәртеүен, баҡса үҫтереүен дауам итә икән дә! Кинйәкәүҙәренең йөҙөнән йәшлек сатҡыһы һис тә һүрелмәгән. Янындағы кес кенә балаға ул ниҙер аңлата, баҡса үҫтереү нескәлектәрен өйрәтә. Сибәр ҡатыны атай менән баланың мөнәсәбәтенә һоҡланып ҡарап тора.

- Ниңә ул беҙҙең кеүек ожмах баҡсаһында түгел, ә һаман да ерҙәге баҡсаһында соҡсона? Хаҡ Тәғәлә алдында уның ни гонаһы бар? Әллә Хоҙай Йыһандағы йәшәү тәртибен үҙгәрткәнме? - Өс туған бер-бер артлы һорау яуҙыра башлаған.

- Юҡ, илаһи тәртип үҙ камиллығында. Кинйә ҡустығыҙҙың тәне лә, ҡартайып, бер нисә тапҡыр юҡҡа сыҡты. Әммә һәр йәндең ожмахы күңелендә йөрөй. Күңелендәген ул үҙ ҡулдары менән тормошҡа ашыра - үҙ ожмахын үҙе яһай. Бер-береһен яратҡан атай менән әсәй ҙә үҙ балаһын шулай хасил итә. Ҡустығыҙҙың йәне лә илаһи тәртип буйынса күптән ожмах баҡсаһына күсергә тейеш ине, әммә күңелендәге ожмах баҡсаһы булған ергә ул яңынан әйләнеп ҡайта.

- Атай, һин беҙгә, кинйә ҡустығыҙ Алла менән һөйләшә тигәйнең, әммә беҙ ҡустыбыҙ эргәһендә Уны күрмәйбеҙ, - тип, ағалары һорау алыуҙы дауам иткән.

- Иғтибарлыраҡ ҡарағыҙ, кинйә ҡустығыҙ Хоҙай тарафынан яратылғанды хәстәрләй, илаһи көс ҡөҙрәте менән барлыҡҡа килгән үләндәргә, емеш-еләккә, ағастарға йән өрә. Аллаһ Тәғәләнең матдиләшкән уй-хыялын һаҡлай. Хозур тәбиғәт, күркәм баҡса теле аша ул Хоҙай менән мөғәмәләгә инә.

- Атай, ә беҙҙең йәндәребеҙ үҙ тәненә яңынан ҡайта аламы?- тип һорарға ашыҡҡан өлкән туғандар.

- Һеҙҙең йәндәрегеҙ әле ожмах баҡсаһында. Кинйә ҡустығыҙ кеүек, берәй әҙәм балаһы ерҙә ожмах баҡсаһына хас баҡсаны үҫтерһә генә һеҙҙең йәндәрегеҙ ҙә үҙ тәненә әйләнеп ҡайтасаҡ.

- Ерҙәге гүзәл баҡсалар башҡаларҙың йәне өсөн үҫтереләме ни? Беҙ үҙ тәнебеҙгә яңынан ҡайтып, баҡса үҫтерә алмайбыҙмы ни? - тип, күҙ йәштәре аша һораған өс туған.

- Бындай мөмкинлек һеҙгә бер тапҡыр бирелгәйне, әммә һеҙ уны файҙаланманығыҙ, баҡса үҫтермәнегеҙ, - тип яуап биргән атайҙары.

- Атай, ә һин үҙең ерҙәге ожмах баҡсаһына ҡайта алаһыңмы? - тип һуңғы һорау биргән өс туған.

- Ерҙәге анау шау сәскәгә күмелгән алмағас төбөндәге сәңгелдәкте күрәһегеҙме? Минең йәнем сәңгелдәктә ятҡан бала тәнендә, сөнки кинйә ҡустығыҙ үҫтергән гүзәл баҡсалағы һәммә ҡиммәтте мин башлап үҫтерә башлағайным...

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КӨЛӨҮ...

## ауыртыуҙы баҫа

■ Гениаль кешеләр һәр ваҡыт хис-тойғоларын күрһәтеп бара, тип иҫәпләй белгестәр. Шәхесте характерлаусы 5 сифат араһында хәҙер ошо төшөнсә лә бар. Ҡалған сифаттар - асыҡлыҡ, намыҫлылыҡ, экстраверсия, йәғни, кешенең тышҡы донъяға асыҡ булыуы, башҡаларға юл биреү һәләтенең гениаллеккә бер ниндәй ҡатнашлығы юҡ, ә хис-тойғолар ташып тороу менән гениаллек бер-береһе менән бәйле. Бындай кешеләрҙең тормошо еңелдән түгел, ти ғалимдар, улар көн һайын тотош хистәр ҡойоно: кәрәгенән артыҡ һөйөү, ҡурҡыу, өмөтһеҙлек, көнләшеү тойғолары кисерә. Уларҙың был ҡылығы кешенең бай хыялдары һәм баш мейеһен үҙенә буйһондора алмауы менән бәйле. Ғалимдар был "хәүефле кнопканы" тапҡан, ул ҡурҡыу һәм хәүеф реакцияларын ғына түгел, ә ижади дәрт өсөн дә яуап бирә.

■ Селфи - үҙ-үҙеңде фотоға төшөрөүгә мода бөтөн Ер шарын баҫып алды. Был феномен менән ғалимдар ҙа ҡыҙыҡһынған. Улар әйтеүенсә, фотоға ҡарап кешенең шәхесен асыҡларға була. Наньян технология университеты ғалимы Ҡытайҙың 120 кешеһенең фотоһын анализлаған. Уларҙың барыһы менән аралашыу мөмкинлеге лә булған. Фотоларҙы һәм һорауҙарға биргән яуаптарҙы сағыштырып, ул шундай һығымталар яһаған. Селфи эшләмәгән йәки үҙҙәре әлеге мәлдә ҡайҙа икәнлеген белдерергә тырышмаған кешеләр яуаплы була. Ыңғай характерлы кешеләр фотоға йылмайып төшә, улар һәр ваҡыт дуҫтары һәм хеҙмәттәштәре араһында. "Өйрәк иренле" фотолар кешелә психик тайпылыштар барлығы йәки уларҙың иң кәмендә тыумыштан ҡыҙыу, яндырай холоҡло булыуҙары тураһында белдерә, ти ғалим. Эксперттар был тикшереүҙәр һөҙөмтәһен ысынға алмаҫҡа саҡыра. Фото мотлаҡ психик тайпылыш тураһында һөйләй алмай. Әммә кешенең бер үк типтағы меңләгән фотоһы ғалимдарҙы шундай уйҙарға этәрә лә инде.

■ Көлөү - ғүмерҙе оҙайтып ҡына ҡалмай, ауыртыуҙы ла баҫа икән. Ғалимдар асыҡлауынса, кеше көлгәндә эндорфиндар - тәҙәләшә буйынса опиаттарға оҡшаған үҙенсәлекле химик берләшмәләр бүленеп сыға. Был матдәләрҙе икенсе төрлө "шатлыҡ гормоны" тип тә йөрөтәләр. Физик көнекмәләр мәлендә лә ошо уҡ яҡшы кәйеф гормондары бүленә.

■ Ауыртыу - организм өсөн ауыр көсөргәнеш, шуға ла көлөү ауыртыу синдромы мәлендә алыштырғыһыҙ ярҙамсы булып сыға. Оксфорд университеты ғалимдары билдәләүенсә, көлөү эндорфиндар бүленеп сығыуҙы әүҙемләштереп, ауыртыуҙы баҫа ала. Тик бының өсөн көлөү ихлас булырға тейеш. Тикшенеүселәрҙең бер төркөмөнә - комедиялар, икенсеһенә йәнлектәр, тәбиғәт, хаҡындағы фәнни фильмдар, гольф уйыны буйынса инструкциялар күрһәткәндәр. Кемдәр комедия ҡараған, улар ауыртыуҙы бөтөнләй тиерлек тоймаған. Шуға ла көлөү - ауыртыуҙы баҫа торған тәбиғи сара, ти ғалимдар.

■ Белгестәр иҫәпләп сығарыуынса, кеше үҙенең ғүмеренең дүрттән бер өлөшөн йоҡлап үткәрә. Эштә коллегалар менән аралашыу, шулай уҡ социаль селтәрҙәр яҡынса 9 йыл ғүмерҙе ала. 3 йыл - транспортта эшкә йөрөүгә сарыф ителә, магазиндар буйлап йөрөүгә шулай уҡ дөйөм 4 йыл тирәһе ваҡыт кәрәк. Шуға ла ғалимдар көн тәртибен ныҡлап уйлап, кәрәкмәгән күп нәмәләрҙән баш тартырға кәңәш итә.

ХӘТЕРКИТАП

# ИҪКЕ ТОРМОШ КҮҘ ҺӨРТӘ,

## йәки Совет заманын һағынаһығыҙмы?

**Йыл да 7 ноябрь яҡынлаша башлау менән, бер быуаттан элегерәк атҡарылған Бөйөк Октябрь Социалистик Революцияһы, уның нәтижәһендә яңыртып ҡоролған тормош хаҡында иҫләмәгән оло кеше юҡтыр. Ул көн иң ҙур байрам булып аңыбыҙға һеңеп ҡалған бит инде.**

**Ҡыҫып-һөйөп үпте лә, әсәйем бөгөн мине:**
**Тор, йыуын, тиҙерәк кейен, күҙ нурым, гөлөм тине.**
**Бөгөн Октябрь көнө, байрам көн бөгөн тине,**
**Ленин беҙгә был көндө ҙур бәхет бирҙе тине...**




Ошо шиғыр әле булһа ҡолағымда сыңлай. Беҙ - мәктәп уҡыусылары йыл да уҙғарылып торған байрам парадын ҡарауҙы әллә ни күреп, велосипед менән, хатта йәйәүләп тә, ауылыбыҙҙан ун саҡырым тирәһе ятҡан район үҙәгенә - Баймаҡҡа барырға ла йыбанмай торғайныҡ. Байрамса кейенгән барса ҡала халҡы - урамда! Патронташтарын яуырындары аша арҡыс-торҡос бәйләгән, штыклы мылтыҡ аҫҡан, бушлат кейгән эшсе, революцион матрос, һоро шинель һәм башына папаха кейгән, ярлы крәҫтиәнде һүрәтләгән һалдаттың ҙур колонна составында Ленин урамы буйлап килгәнен күреү беҙгә ғәйәт ҡыҙыҡ. Ә инде ҡылыс таҡҡан һыбайлы "настаяшный Чапай"ға ысын күнелдән шатланабыҙ. "Бобик" машинаһының тышын фанир менән көпләп яһалған "броневик", "максимка" пулеметы беркетелгән, пар ат егелгән "тачанка", шунда ултырып барған пулеметчица "Анка", атты ҡыуып барыусы "Петька" һәм башҡаларға ҡарап, ата-бабаларыбыҙ өсөн ғорурлыҡ тойғоһо кисереүе - их рәхәт, күңелле!.. Барыбыҙҙың да ҡартатайҙарыбыҙ ҡасандыр беҙгә "ирек яулаған" шундай батырҙыр булған бит... Ҡыҙыл флагтар тотҡан бер төркөм мәктәп балалары дәртле революцион йыр һуҙып ебәрә:

*Вышли мы все из народа,*
*Дети семьи трудовой.*
*"Братский союз и свобода!" -*
*Вот наш девиз боевой…*

Бала-сағым, үҫмер йылдарым бер-бер артлы күҙ алдымдан үтә. Үҙем Ирәндек буйында үҫкән булғанғалыр ҙа, мәктәптә өйрәнгән "Күк Ирәндек буйында" йырын айырыуса яратып йырлай торғайным. Оло быуын вәкилдәре уны яҡшы хәтерләйҙер, әлбиттә. Ауыр эштән һис ҡурҡмаған, алтын табыу шахталарында (беҙҙең ауылдан алыҫ булмаған Түбә рудниғында), алтын йыуыу заводында эшләүсе "һөйәлләнгән ҡуллы Урал улдары" менән "Урал ҡыҙҙары"на дан йырлаған был йырҙа ошондай куплет бар:

*Бегун йүгерә заводта*
*пар йырлаған тауышҡа*
*гөрләп-сайҡалып.*
*Иҫке тормош күҙ һөртә,*
*шыңшый-шыңшый йәш бөркә*
*ситкә тайпылып.*

Йырҙың ана шул урынына килеп еткәс, минең күҙҙәремә йәш килә. "Иҫке тормош"то ҡыйырһытылып, бер ситтә генә илап торған етем бала һымағыраҡ итеп күҙ алдына килтерәм дә, нишләптер, уны йәлләйем... Ә шулай ҙа, "батша төшмәгән булһа, ошо көнгә ҡәҙәре әлеге "иҫке тормошта" алама ыштан, сабата кейеп, мәктәптә лә уҡый алмай, тома наҙан булып йөрөр инек әле" тип, үҙемде йыуатып та ҡуям.

Беҙ үҫкәндә баҫыуҙарҙа яҙлы-көҙлө тракторҙар, комбайндар гөрләй ине инде. Мәктәптә шуларға ҡағылышлы шиғыр уҡыйбыҙ:

*Ана килә трактор,*
*Һуҡа бабай йыраҡ тор!*
*Һинән артыҡ эшләгәнде*
*Ситтән генә ҡарап тор!*

Шиғырҙы уҡыған саҡта, шундай алдынғы техника тик беҙҙең социалистик илебеҙҙә генә бар, ә башҡа капиталистик илдәрҙә һаман һуҡа менән ер һөрәләр, ураҡ менән иген уралар, моғайын, тигән ышаныстамын. Сөнки беҙҙәге һымаҡ революция уларҙа булмаған бит. Тик клубтарҙа "Һауынсылар бейеүен" бейегәндә: "Америка Штаттарын ҡыуып етербеҙ әле. Ҡыуып етеп, уҙып китеп, ҡыҙыҡ итербеҙ әле", тип йырлауҙары күңелгә ятып етмәй. Нисек инде, беҙ шул капиталистарҙан ҡалышабыҙмы икән?.. Ышанғы килмәй! Үҙебеҙҙең барыбыҙҙың да эшсе-крәҫтиән балалары булыуыбыҙға шатбыҙ. Һәр хәлдә, мин үҙем шундай инаныуҙа булдым. Аллаһҡа ышанып, намаҙ уҡып йөрөүсе бәғзе бер оло кешеләргә лә "иҫкелек ҡалдығы" тип ҡарай инек. Ул саҡ беҙҙә дингә бик кире ҡараш тәрбиәләнеләр шул... Атайым йәш сағында башҡа районран күсеп килгәнлектән, минең социаль сығышым хаҡында ауылыбыҙҙа берәү ҙә белмәне. Ҡайҙан ғына белһендәр инде, хатта мин үҙем дә был хаҡта бер аҙ һуңыраҡ, үҫеп еткәс кенә, хәбәрҙар булдым. Атайымдың атаһы - Шаһишәриф ҡартатайым Йылайыр районы Исҡужа ауылының иң һуңғы "указный" муллаһы, әсәйемдең атаһы ла хәлле крәҫтиән булыуы хаҡында ул саҡта беҙгә һөйләгеләре килмәгәндер... Ә бит, ысынлап та, барса тоҡомо боронган ошо ауылда йәшәп килгән бәғзеләр турында "насар" хәбәрҙәр йөрөмәне түгел. Бер эшсән генә ағай була торғайны. Уның тураһында кешеләрҙең ҡайсаҡ үҙ-ара "Рәхимйән - кулак балаһы бит ул" тип бышылдашҡаны ишетелгеләй ине. Шундай яҡшы кешенең атаһы ҡасандыр илдән һөрөлгән "кулак" булғанлығына ышанғы ла килмәй... Сөнки беҙ кулакты сатирик һүрәттәрҙә төшөрөлгән йыуан ҡорһаҡлы, һаран, ҡуйынында йәшереп "обрез" йөрөткән, тик яуызлыҡ ҡына ҡылырға уйлап йөрөгән Совет власының дошманы итеп күҙ алдына килтерҙек. Ғөмүмән, беҙ - пионерҙар, һуңғараҡ, комсомолецтар бына шундай инаныуҙа үҫтек.

Октябрь Революцияһынан һуң илебеҙҙә индустриализация курсына ярашлы әллә күпме гигант заводтар, электостанциялар төҙөүҙең, сиҙәм күтәреүҙең халҡыбыҙ өсөн бик кәрәкле булыуы һәр кемгә асыҡ. Мәктәптәрҙә, башҡа урта һәм юғары уҡыу йорттарында бушлай уҡытыу, медицина ярҙамы, властар тарафынан хатта ғаилә бөтөнлөгөнә лә нығ иғтибар итеү кеүек ыңғай яҡтар Совет иленә хас булғанлығын күрмәмешкә һалышыу ҙа ғәҙел булмаҫтыр. Ысынлап та, беҙ бит совет заманында түләүле уҡыу йәки дауаланыу тураһында хатта күҙ алдына ла килтерә алмай торғайныҡ. Сит илдәрҙә халыҡ көнкүрешендә шундай мөһим нәмәләр түләүле булыуы хаҡында ишетеп, ғәжәпләнә инек.

Бөйөк Коммунистар Партияһы етәкләгән ошо илебеҙҙе күҙ ҡараһындай күреп һаҡларға кәрәклеге лә барыбыҙҙың аңыбыҙға ныҡ ҡына һеңә килде. Яратҡан илебеҙ өсөн һәммәбеҙ утҡа-һыуға инергә әҙер. Немец фашистарын дөмөктөрөп, бөтә Европаны оло афәттән ҡотҡарыусы данлы Армиябыҙҙа хеҙмәт итергә һәр малай ашҡынды. Минең дә хәрби кеше булып китеүемә ана шул осор тәрбиәһе ныҡ йоғонто яһағанлығы - һис шикһеҙ. Халҡыбыҙ үҙен һаҡлаусыларын яратты, уны насарлау түгел, хатта ул хаҡта ҡырын һүҙ әйтергә лә бер кемдең дә теле әйләнмәне. Һалдатмы ул, офицермы, хәрби кешене бөтә халыҡ их-

✓ ***Мосолмандар шулай уҡ ил етәксеһе артынан намаҙ, хаж ҡылырға, уның менән бергә һуғыштарға йөрөргә тейеш. Хаким ябай халыҡҡа түгел, ябай халыҡ уға буйһонорға тейеш.***



тирам итте. Һәр хәлдә, беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙа шулай ине бит. Мин ялға һәр саҡ ялтлап торған хәрби кейемдә ҡайта инем. Яҡташтарыбыҙҙың йылы мөнәсәбәтен тойоу минең өсөн ҙур бәхет булды. СССР-ҙа бар халыҡтар бер ил эсендә дуҫ йәшәнек...

Әйнде Коммунистар Партияһының һуңғы генераль сәркәтибе Михаил Горбачев "үҙгәртеп ҡороу" эштәрен башлап ебәргәс, үҙебеҙ тыуып үҫкән социалистик ҡоролошҡа ҡарата ҡарашыбыҙ ҡырҡа, хатта бөтөнләйгә икенсе тарафҡа боролоуын, әлбиттә, бер кемебеҙ ҙә инҡар итә алмаҫбыҙ. Барыбыҙ ҙа шул уҡ кешеләр булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, илдә алып барылған сәйәсәткә тиҙ арала яраҡлаша барған киң мәғлүмәт саралары пропагандаһы эҙһеҙ үтмәне. Күптән түгел батшалыҡ заманын яманлаған һымаҡ, кисәге Совет осорон ныҡ ҡына тәнҡит утына тотоусылар ҙа табылды. Бөйөк Советтар Союзы ла тарҡалды, гөрләп торған колхоз-совхоздар ҙа бөтөрөлдө. Илебеҙ хатта капиталистик дәүләткә лә оҡшай бирә төштө. Ә халҡыбыҙ барыбер һәр саҡ матур йәшәргә ынтылды. Баштараҡ, Совет осоронда, бала саҡтан дингә кире ҡараш тойоп үҫтек тигән инем. Эйе, ундай осор булды, әммә, бәхеткә, социалистик илебеҙҙә лә иманына тоғро булған оло быуын кешеләре барыбер ҙә була килде. Исҡужа ауылында йәшәгән Фазылйән олатайым (атайымдың бер туған ағаһы), беҙҙең Мәмбәт ауылында Солтанхәмит олатай һымаҡ дин тотоусы, фарыҙ ғибәҙәттәрен ҡалдырмаған кешеләр һирәк кенә булһа ла, ауылдарҙа бар ине шул. Минең атайым менән әсәйем дә бала саҡтарында уҡ намаҙ уҡырға өйрәнгән булғандар икән. Күпмелер ваҡыт, башҡаларҙан (шул иҫәптән, беҙҙән - балаларынан дә) йәшерен генә намаҙ уҡып, ураҙа тотоп йөрөгәндәрҙе хаҡында улар олоғая башлағас ҡына белдек... Ә инде "үҙгәртеп ҡоролған" яңы хөкүмәт рөхсәт итеү менән, туҡһанынсы йылдары һәр ауылда тиерлек әүҙем рәүештә мәсеттәр төҙөү эштәре башланды, ҡалаларыбыҙҙа мәҙрәсәләр асылды. Халыҡ күпләп, иркенләп иманға килә башланы, әлхәмдүлилләһ.

Бөгөнгө көндә минең тыуып үҫкән Мәмбәт ауылында ла матур мәсет бар. Эшһөйәр ауылдаштарым хәйриә аҡсаһына төҙөп ултыртҡан уны. Балалыҡ дуҫым Ишмөхәммәт Хөснитдин улы Мөрсәлимов унда имам вазифаһын ихлас башҡара, йыйын-мәжлестәрҙә ауыл халҡын дингә саҡыра. Ауылдарыбыҙҙа "Айыҡ ауыл" тип аталған хәрәкәт киң ҡанат йәйгән. Был - үҙе бер ҙур ҡаҙаныш. Олпат йәштәрҙәге ағинәйҙәребеҙҙең ошо өлкәләге әүҙемлеге, йәштәребеҙҙең шуны хуплауы, ауыл хакимиәттәренең был эшкә ярҙам ҡулы һуҙыуы үҙе ни тора! Колхоз-совхоздарҙың бөтөрөлөүенә ҡарамаҫтан, ғәйәт эшлекле егеттәр һәм ҡыҙҙарыбыҙ ҙа табылды, фермер хужалыҡтары төҙөп алды күп кенә эшһөйәр йәштәребеҙ. Шәхси хужалығында күпләп эре, ваҡ мөгөҙлө малдар үрсеткән эшлекле ауылдаштарым да байтаҡ ҡына. Ҡырҙа йөрөгәнемдә, һәр ауыл тирәһендәге өйөр-өйөр йылҡы малы көтөүҙәрен күреп шатланып, милләттәштәрем өсөн һөйөнөп бөтә алмайым. Бынан тыш, имәк бешереү, мебель яһау, йорт төҙөү һымаҡ башҡа төр файҙалы кәсеп менән шөғөлләнгәндәр ҙә бар. Тыуған ауылында үҙ эшен асҡан синыфташ дуҫым Әсҡәт Әбделхай улы Ғөбәйҙуллинды миҫал итеп килтерә алам. Пилорама яһап, инде оҙаҡ йылдар ул яҡын-тирәләге ауыл халҡын хеҙмәтләндерә. Халыҡ өсөн Аллаһ йорто, башҡа файҙалы нәмәләр төҙөүгә матди яҡтан әүҙем ярҙам күрһәтә. Күптән түгел Аҡморон ауылында өр-яңы мәсет бинаһын күтәреп ҡуйҙылар. Киләсәктә бына шундай эшлыларыбыҙ үҙҙәренең шәхси предприятиеларын артабан да үҫтереп, малдарын ишәйтеп, бер килке ауылдаштарына эш урындары булдырыр, хатта күп кенә эшһөйәр йәштәр аҡса эшләр өсөн сит тарафтарҙан үҙ ауылдарына ла ҡайта башларҙар, тигән өмөт тә юҡ түгел.

Әлбиттә, Совет осоронда халыҡты диндән дүндереп, уҙған быуаттың утыҙынсы йылдары, бай булған өсөн генә властар тарафынан бихисап кешене һәләк итеүҙәрҙе бер нисек тә аҡлап булмай! Киреһенсә, киләсәккә быуындарға ғибрәт өсөн улар хаҡындағы тарихты "ташҡа яҙып" ҡуйыу кәрәк. Әммә, әллә ҡасан был донъянан киткән батшаларҙы, хөкүмәт әһелдәрен гел генә ғәйепләп, ауыҙ һыуыбыҙҙы коротмайыҡ әле, тимәксемен. Улар ҙа бит, ҡасандыр, халыҡҡа яҡшы булһын тип тырышҡан. Тик, кемдер әйтмешләй, "хотелось как лучше, получилось как всегда..." Хаталанмаған бер әҙәм балаһы ла юҡ был донъяла. Ҡасандыр "ҡыҙыл большевик" булып йөрөһөнмө, йә иһә, киреһенсә, уларға ҡаршы һуғышҡан "аҡтар" отрядында булһынмы, ата-бабаларыбыҙҙың береһен дә әрләгем килмәй. Өйөр-өйөр йылҡылары булған байҙар булһынмы, йә уларға көтөүсе булып эшләгән ярлы халыҡмы - барыһы ла минә яҡын...

Аллаһ Тәғәлә биргән бөгөнгө һәр көнөбөҙ өсөн шөкөр итеп, киләсәгебеҙ өсөн Уға доға ҡылып, бер ҡасан да төшөнкөлөккә бирелмәй йәшәйек әле дуҫтар! Үткән замандарҙың етешһеҙлектәрен күрһәтеп, тәнҡитләүселәр былай ҙа аҙым һайын. Интернеттар хәҙер шундай нәмә менән тулған. Шуға күрә мин һәр замандың, шул иҫәптән, СССР-ҙың тарҡатыусы әлеге "үҙгәртеп ҡороу" осоронон да, бөгөнгө көндөң дә ыңғай яҡтары булғанлығын күрә белеү кәрәк тип һанайым һәм ана шул нәмәләрҙе гәзит уҡыусыларының иҫенә төшөрөүҙе маҡсат итеп ҡуйҙым да инде. Бына шулай, ҡәҙерле милләттәштәрем, заманаларға зарланмай, бер-беребеҙҙе хөрмәт итеп, дуҫ йәшәһәк, балаларыбыҙҙы ла кешеләрҙе яратыу тойғоһонда тәрбиәләргә тырышһаҡ, милли ҡиммәттәребеҙҙе, динебеҙҙе оноттормауға барлыҡ көсөбеҙҙө йүнәлтһәк, киләсәк тормошобоҙ тағы ла матурыраҡ булыр, ин шәә Аллаһ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**хәрби хеҙмәт ветераны.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*



# ХАКИМДЫ ЛА...

## тәнҡитләп була

Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Дин - ул ихласлыҡ, дин - ул ихласлыҡ, дин - ул ихласлыҡ!". Кешеләр һорай ҡуйған: "Кем алдында, Бәйғәмбәребеҙ?" Ул бына нисек яуап биргән: "Аллаһ алдында, Уның Бәйғәмбәре алдында, мосолман хакимы алдында һәм ябай мосолмандар алдында".

Аллаһ алдындағы ихласлыҡ - тик Уға ғына табыныу, Уны ихтирам итеү, Унан ҡурҡыу, Уға өмөтләнеү һәм Уны яратыу, уның фармандарын үтәү һ.б.

Бәйғәмбәр алдындағы ихласлыҡ - Ул хәбәр иткәндәргә инаныу, Ул күрһәткән юлдан йөрөү, Уны яратыу, Аллаһҡа табыныу һ.б.

Мосолман хакимы алдындағы ихласлыҡ - улар өсөн доға ҡылыу, уларҙы яратыу һәм фармандарын үтәү.

Ябай мосолмандар алдындағы ихласлыҡ - уларға файҙа килтереү, ҡулдан килгәнсә ярҙам итеү, үҙеңә теләгән яҡшылыҡты уларға ла теләү.

Ҡөрьән, Сөннә буйынса, әгәр ҙә Аллаһ тыйған сиктәрҙән сыҡмаһа, хатта гәҙел булмаһа ла, хакимдарҙы тыңлау фарыҙ. Әгәр ҙә хаким Аллаһ тыйған юлдан китергә ҡуша икән, уның һүҙен тыңларға ярамай. Мосолмандар шулай уҡ ил етәксеһе артынан намаҙ, хаж ҡылырға, уның менән бергә һуғыштарға йөрөргә тейеш. Хаким ябай халыҡҡа түгел, ябай халыҡ уға буйһонорға тейеш: үгиһә, һәр төрлө фекер-ҡараштар илдең именлеген, азатлығын ҡаҡшатыуы бар. Бынан тыш, мосолмандар үҙ етәкселәренә кәңәштәрен дә бирә ала.

Имам әл-Тәхәүи әйткән: "Беҙ ил етәкселәренә ҡаршы сыҡмайбыҙ һәм, улар гәҙел булмаһа ла, әгәр ҙә Аллаһ тыймаған ғәмәлдәрҙе ҡылалар икән, уларҙы ҡәһәрләмәйбеҙ. Киреһенсә, беҙ улар өсөн доға ҡылабыҙ".

Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Кем минә буйһона, шул Аллаһҡа ла буйһона, ә кем минә ҡаршы килә, шул Аллаһҡа ла ҡаршы сыға. Кем хакимға буйһона, шул минә лә буйһона. Кем хакимға ҡаршы сыға, шул кеше, тимәк, минә буйһонорға теләмәй ".

Сөннәгә ярашлы, ябай мосолман хакимға кәңәш-төнәште күҙгә-күҙ осрашып һәм бола сығармайынса ғына бирергә тейеш. Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Кем дә кем хакимға кәңәш бирергә теләй, шул был эште асыҡтан-асыҡ эшләмәһен һәм хакимдың ҡулынан тотһон. Әгәр ҙә хаким уны тыңлай икән, бик яҡшы. Юҡ икән, кәңәш биреүсе үҙ бурысын үтәне, тигән һүҙ".

Бөтә әйтелгәндәрҙән сығып, шундай һығымтаға килергә мөмкин:

- Хакимдарға буйһоноу, әгәр ҙә улар гонаһлы эшкә этәрмәйҙәр икән, мотлаҡ.
- Әгәр ҙә кеше шәриғәт ҡанундары буйынса хакимға кәңәш бирә икән, ул уның яңылышлыҡтары өсөн яуап бирмәй.
- Бола күтәреү ҡырҡа тыйыла.
- Кәңәште тотмаған хакимға ҡаршы сығырға ярамай.
- Мосолман Ҡөрьән һәм Сөннә ҡушҡандың барыһын да эшләгән мосолмандар араһында булырға бурыслы. Ул диндәштәренең юлынан барырға һәм уларҙың да бер уйлы булыуына булышлыҡ итергә тейеш.

Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Бергә булығыҙ. Аллаһ бер уйлылар эргәһендә. Кем дә кем айырыла, шул Утҡа эләгер".

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ауыл ҡарлуғасы**

**(Деревенская ласточка, касатка)**



Өҫкө яғы тулыһынса ҡара, маңлайы һәм тамағы ҡыҙғылт-көрән, тамағында ҡара төҫтәге арҡыры һыҙығы бар. Аҫҡы яғы аҡ, алһыу-ерән төҫтә ялтырап тора. Көҙөн был айырыуса күҙгә башланып тора. Ҡанатындағы ситке ҡаурыйҙар оҙон һәм "толом"ланып тора, ошонон менән беҙҙең башҡа ҡарлуғастарҙан айырыла. Йәш ҡоштарҙың ҡойроғо ҡыҫҡараҡ, төҫө шулай уҡ, тик оло ҡоштар барыбер сағыуыраҡ. Йәйелгән килеш ҡанатының киңлеге 32-36 см.

"Тиль-вили-вили-трр" тигән йырын гел ишетергә була. Ата ҡош та, инә ҡош та һайрай. Икәүләп ҡушылып та йырлайҙар, тик инә ҡоштоң йыры ҡыҫҡараҡ. Саҡырыуы - сағыу "тви-вит", "чи-вит".

Евразия менән Төньяҡ Америкала таралған. Рәсәйҙең һәр ауылында бар.

Яҙ аҙағында төркөмләп тә, берәмләп тә осоп ҡайталар. Ағас йорттары, асыҡ яландары, малы булған ауылдарҙа ауыл ҡарлуғасы ла үҙ ҡош. Йорттарҙың ҡыйыға аҫтына, һарайҙарға оя ҡора. Ояны үлән, һалам ҡушып, батҡаҡтан ҡора. Был эште икәүләп башҡаралар. Иҫке ояларҙы ла үҙләштерә.

2-8, йышыраҡ 4-6 йомортҡа һала. Йомортҡа һала башлағас та, инә ҡош ояны ташлап китмәй, гел уны һаҡлай. Йомортҡаларҙы ла инә ҡош баҫа, ата ҡош ҡайһы берҙә генә уны алыштыра. Баҫыу осоро 11 көндән алып 20 көнгә тиклем һуҙыла, был һауа торошона бәйле. 19-21 көн буйына ата ҡош менән инә ҡош бәпкәләрҙе ашата.

Яландарҙа, йылға буйҙарында осоп барышлай һауала үҙенә ризыҡ аулай. Һыйыр көтөүенә эйәреп, һыйырҙарҙың аяҡ араһынан осоп йөрөй. Был уларға ризыҡ табыуҙы еңелләштерә. Көндәр һыуынһа, ояһында ултыра, күмәкләп йыйылышып та ултыралар, аслыҡтан ҡырылған осраҡтар ҙа була.

Йәй аҙағына төркөмдәргә туплана, урындан-урынға күсеп йөрөй башлайҙар, ауылдарҙа, сымдарҙа, һаҙлыҡтарҙа үҫкән ҡыу үләндәрҙә ултырып ял итәләр, ҡайһы берҙә ҡыйыҡтарға осоп тулалар. Август-сентябрҙә йылы яҡҡа осоп китә, Африкала, Азияның көньяғында ҡышлай. Ауыл ҡарлуғасы йәшәгән ерене ныҡ бәйле, йыл һайын унда әйләнеп ҡайтырға тырыша.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Йәмғиәтебеҙҙең битараф булмаған ағзалары, ирекмәндәре, ағинәйҙәр менән бергә мәҙәниәт усаҡтарында гуманитар ярҙам әҙерләй, төрлө саралар үткәрә, ҡайғы-шатлыҡ уртаҡлаша...*



АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# ӘСӘЛӘР КӨТӘЛӘР УЛДАРЫН...

**"Оло быуын кешеләренең теленән төшкәне булманы "Донъялар ғына тыныс булһын!" тигән һүҙҙәр. Донъяларҙа тыныслыҡ бөтөрөн, индәргә ошондай ҙа ауырлыҡтар ишерелерен һеҙ, оло быуын ҡатын-ҡыҙҙары, бынан 15 йыл элек үк һиҙгән булғанһығыҙҙыр ул: "Ағинәйҙәр ҡоро"на берләшеп, ауылдарыбыҙға ҡот ҡундырҙығыҙ, халҡыбыҙҙың иң матур йолаларын, кәсептәрен, милли кейемдәрен тергеҙеп, үҙ асылыбыҙға ҡайтыу кеүек изге башланғысҡа юл ярҙығыҙ. Һеҙһеҙ ҡалай ауыр булыр ине беҙгә..." - тип сығыш яһаны зыялы бер ир-егет оло йыйын ваҡытында.**

"Ағинәй" йәмғәт ойошмаһына берләшкән оло быуын ҡатын-ҡыҙҙарының эшмәкәрлегенә оло баһаһы өсөн рәхмәт был ир-егеткә. Эйе, һуҡыр булмағандар күрер, һаңғырау булмағандар ишетер, аңлылар күтәрмәләр ағинәйҙәрҙең тиҫтәнән артыҡ йылдар атҡарған изге эштәрен. Уларҙың бөгөн бар халыҡ ҡушылған "фронтҡа ярҙам" хәрәкәтен йылы ойоҡбаштар, бирсәткәләр бәйләүҙән башлауын, артабанғы кәсеп-ғәмәлдәре исемлеген һанап тормаҫҡа ла була, улар һәр кемдең күҙ алдында. Иң мөһиме, аралашыу, берләшеү кеүек иң ҡиммәтле йәшәйеш ҡағиҙәһе ныҡлап урын алды тормошобоҙҙа: йәмғиәтебеҙҙең битараф булмаған ағзалары, ирекмәндәре, ағинәйҙәр менән бергә мәҙәниәт усаҡтарында гуманитар ярҙам әҙерләй, төрлө саралар үткәрә, ҡайғы-шатлыҡ уртаҡлаша...

Ошо көндәрҙә Учалы районының Килмәк ауылы ағинәйҙәре "Ир егеттәр ил һағында" исемле сараға саҡырҙы Рафиҡ, Миндәк, Зәйнәкәй, Ҡобағош, Баттал, Ураҙ, Балбыҡ, Әүеш, Мансур, Рысай, Көсөк-Маяҡ ауылдары ағинәйҙәрен һәм ирекмәндәрҙе. Район "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы етәксеһе Мәрзиә Солтанбаева бындай сараларҙың темаһын һәм нисек әҙерләнергә икәнен, ғәҙәттә, алдан билдәләй. Был юлы ағинәйҙәр алдына үҙ ауылдарының МХО-ла ҡатнашҡан ир-егеттәре тураһында һөйләгән альбом төҙөргә, яу яланында ғүмерҙәре өҙөлгәндәр хаҡындағы хәтирәләре менән уртаҡлашырға тигән маҡсат ҡуйылған. Маҡсат еренә еткереп үтәлде. Сара иҫ киткес тәрән тәьҫораттар ҡалдырҙы. Һалдат әсәләренең, һалдат ҡатындарының һәр һүҙе йөрәккә уйылды. Әлбиттә, кемдең үҙ ғәзизен, үҙ балаларының атаһын утҡа тыҡҡыһы килһен, әммә әсәһенең дә, ҡатынының да ризаһыҙлыҡ, икеләнеү белдереүе ғаилә башлығын ҡарарынан туҡтата алмаған. "Был яуға мин бармаһам, кем бара?", "Махсус хәрби операция мәлендә һин ни эшләнең, атай?" тип һорар бит балаларым, мин ни тип яуап бирермен?", "Был мәхшәр ҙә тамамланыр, унда хеҙмәт иткән ауылдаш егеттәр әйләнеп ҡайтыр, улар менән нисек аралашырмын?" Яугир уландарҙың әсәләренә, ҡатындарына яуабы ошондай була. Эйе, башҡорт арыҫландары башҡаса булдыра алмай шул..

Һәр сығыш, бигерәк тә яуҙа йөрөгән егеттәрҙең әсәләре һөйләгәндәр тетрәндерҙе. 1 йыл да 3 ай ҙа 18 көн. Ураҙ ауылы мәҙәниәт йорто хеҙмәткәре Гөлнур Сабирова Торский ҡалҡыулығын алғанда хәбәрһеҙ юғалған улы Русланды бына шулай көндәрен һанай-һанай көтөүен бәйән итте. Һәм балаларын көткән әсәләрҙең кисерештәрен, күңел торошон сағылдырған ошо шиғырҙы һөйләп ишеттерергә лә үҙендә көс тапты:

*Ниндәй һүҙҙәр менән йыуатырға*
*Яуға киткән һалдат әсәһен?*
*Ҡулдан килһә, шатлыҡ төсөн сигеп,*
*Бәйләр инем йөрәк яраһын.*
*Тылсым ингән бармаҡ осом менән*
*Һаҡ ҡағылып маңлай һырына -*
*Көйләр инем ҡайғы баҫҡан көйҙө...*
*Юҡ икән шул ундай йыр ғына.*
*Таң атҡанда ысыҡ һыуын йыйып,*
*Йыуһам әгәр йәшле күҙҙәрен -*
*Уятырмы өмөт күңелендә*
*"Бар ҙа үтер..." тигән һүҙҙәрем?*
*Көс-ҡеүәтем булһын ине лә һуң,*
*Туҡтатырлыҡ ерҙә һуғышты-*
*Бар йыһанды урап сығыр инем,*
*Юллайым тип тыныс тормошто.*
*Нисек итеп йыуатырға икән*
*Ҡайғы баҫҡан һалдат әсәһен...*
*Булмаҫтыр ул!*
*Тынысланыр өсөн*
*Кәрәк уға ҡосоу балаһын!..*

...Ауылдаштарҙың, яҡташтарҙың йылы һүҙҙәр менән иҫкә алыуҙарына ил азатлығы өсөн ҡорбан булған яугирҙарҙың рухтары шатланғандыр, әсәләрҙең йөрәктән сыҡҡан иң изге теләктәрен Хоҙай Тәғәлә ҡабул иткәндер, тип ышанып, Килмәк ауылы ағинәйҙәренә рәхмәтле булып таралышты ҡунаҡтар.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**



ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!



## ЯНҒЫН

● Аҙаҡҡы ике йылда урман янғындарының майҙаны бер нисә тапҡырға әҙәйҙе. Был күрһәткескә ирешергә шул иҫәптән видеомониторинг системалары селтәрен киңәйтеү ҙә ярҙам итә. Башҡортостандың урман хужалығы министры Марат Шәрәфетдинов һүҙҙәренсә, 2026 йылда Башҡортостанда әле эшләп торғане "Урман һағы" видеомониторинг системаһының 22 камераһына федераль үҙәк ярҙамында тағы 35-40 берәмек өҫтәү планлаштырыла. Был сыҡҡан янғынды алдан күререгә, унын урман фонды ерҙәренә күсеүенә юл ҡуймаҫҡа һәм ҙур зыян килтереүҙе кисектерергә мөмкинлек бирә.

● Өфөләге Фронт бригадалары урамында автосервистың ике гараж боксы янып китә. БР буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 150 квадрат метр майҙанда янғын һүндерелгән. Ҡотҡарыусыларҙың оперативлығы арҡаһында утҡа таралып китергә юл ҡуйылмай. Һәләк булыусылар һәм зыян күреүселәр юҡ. Янғында ике автобус һәм бер еңел автомобиль зыян күрә. Утты һүндереүҙә 21 кеше һәм 7 берәмек техника ҡатнаша.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**7 ноябрь "Урал батыр"** (А.Борисов, Ф.Гарипов), башҡорт халыҡ эпосы буйынса. 12+

**8 ноябрь "Килен"** (З. Мусина, Ф. Ғарипов, инсц. З. Бураҡаева), драма. 16+

*Ғәлиәскәр Камал исемендәге татар дәүләт академия театры гастроле:*

**11 ноябрь "Башмағым"** (Т. Ғиззәт, Ф. Бикчәнтәев), музыкаль комедия. 16+

**12 һәм 13 ноябрь "Ҡаҙанға Туҡай ҡайтҡан"** (Р. Ғөбәева, А. Жаббаров). 12+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**7 һәм 8 ноябрь "Удивительное путешествие кролика Эдварда"** (К. ДиКамилло, А. Абушахманов), мөхәббәт тураһында әкиәт. 6+

**8 ноябрь "Я - кулак. Я А-Н-Н-А"** (М. Райцес, О. Мусина), социальная драма. 12+

**9 ноябрь "Ханума"** (А. Цагарели, Р. Хәкимов), музыкаль комедия. 12+

**11 ноябрь "Пеппи длинныйчулок"** (А. Линдгрен, О. Пронин). 11:00. 0+

**11 ноябрь "Поджигатель"** (Г. Горин, М. Күлбаев), трагикомедия. 16+

**12 ноябрь "У ковчега в восемь"** (У. Хуб, М. Күлбаев), ғаилә спектакле. 11:00. 6+

**12 ноябрь "Отец"** (М. Горький, Д. Хөснийәров), ғаилә драмаһы. 18:00. 12+

**13 ноябрь "Чиполлино"** (Д. Родари, Л. Искужина, Р. Хакимов), мажара. 11:00. 6+

**13 ноябрь "Киләә яуа, килә яуа"** (З. Хаким, Р. Хакимов), комедия. 17:00. 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**8 ноябрь "Басни. Перезагрузка**", яҙыусылар әҫәрҙәре буйынса. 16:00. 6+

**9 ноябрь "Красная шапочка"** (Д. Гараева).12:00. 0+

**10 ноябрь "Озеро заколдованного коня"** (Г. Шафиков). 17:00. 12+

**11 ноябрь "Етем төлкө"**, башҡорт халыҡ әкиәте. 14:00. 0+

**11 ноябрь "Буратино"** (А.Толстой). 12:00 һәм 15:00. 0+

**12 ноябрь "О чем поет осень?"** (В. Щербакова). 12:00 һәм 15:00. 0+

**12 ноябрь "Аленький цветочек"** (С.Аксаков). 12:00 һәм 15:00. 6+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**7 ноябрь "Вальсҡа саҡырыу"** Динә Хөсәйенованың соло концерты (бәләкәй зал). 12+

**7 ноябрь Сәидә Мөхәмәтйәнованың** ижад кисәһе (ҙур зал). 6+

**8 ноябрь "Үҙең бүләк"** композитор Роза Сәхәүетдинованың 70 йыллыҡ ижадына арналған юбилей кисәһе. 12+

**9 ноябрь Учалы филармонияһының** юбилей концерты. 12+

**12 ноябрь "Туктап ҡалды, атым сапманы..."** БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Хәлил Ишбирҙиндың ижад кисәһе. 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**8 ноябрь "Золушка"** (Ш.Перро), әкиәт. 0+

**11 ноябрь "Ҡыҙын алдым ҡосаҡҡа"** (А.Вампилов), трагикомедия. 12+

**12 ноябрь "Варшавская мелодия"** (Л. Зорин), драма. 12+

**13 ноябрь "Алға барам!"** Рәил Өмөтбаевтың концерты. 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**7 ноябрь "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 12+

**8 ноябрь "Ятҡа бирер йәрем юҡ!"** (В. Красногоров), комедия. 16+

**9 ноябрь "Приключения с огнем"** (Н. Шор), әкиәт. 0+

**13 ноябрь "Өлкән ул"** (А. Вампилов), притча. 12+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**13 ноябрь "Мөхәббәт элмәге"** (И. Зәйниев, А. Йыһаншин). Комедия. 16+

### БР Милли музейы

**13 ноябрь "Шәл бәйләнем" "Шәл көнө"** музей акцияһы. 12:00. 0+

**13 ноябрь "Йәш археолог курсы"** мәҙәни-ағартыу сараһы. 15:00. 6+

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# БАШҠОРТ БЕЙЕҮЕН ДАНЛАП...

**Өфөлә "Байыҡ" телевизион конкурсының гала-концерты булып үтте. "Башҡортостан" дәүләт концерт залы сәхнәһендә проекттың бөтә финалсылары, шулай уҡ билдәле бейеү коллективтары һәм республика эстрадаһы йондоҙҙары йыйылды.**



Гала-концертта гран-при яулаусылар, шулай уҡ йылдың иң яҡшы хореографы исеме иглан ителде. Финалда 500-ҙән ашыу бейеүсе сығыш яһаны. 2025 йылда телепроекттың һайлап алыу турында Башҡортостандан, Татарстандан, Мәскәүҙән, Сорғот, Силәбе һәм Ырымбур өлкәләренән меңдән ашыу бейеүсе ҡатнашҡан. Әбйәлил, Ҡырмыҫҡалы, Учалы, Бөрйән райондары бейеүселәре әүҙемлек күрһәткән.

"Байыҡ" республика телевизион башҡорт бейеү конкурсы 2008 йылдан башлап уҙғарыла. Конкурста йыл һайын тотош республиканан, шулай уҡ Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙән 500-ҙән ашыу бейеүсе ҡатнаша. Төрлө йылдарҙа Ирландия, Төркиә, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Украина, Чечня, Греция, Осетия, Ҡалмыҡстан, Татарстан, Бурәтстан, Хакасия коллективтары конкурс ҡунаҡтары булды. 2025 йылда конкурсҡа 18 йыл тула. Ошо осорҙа иҫәпһеҙ-һанһыҙ яңы бейеүҙәр ҡуйылды, республика ҡалаларында һәм ауылдарында йөҙләгән өлкәндәр һәм балалар хореография ансамблдәре, фольклор төркөмдәре ойошторолдо. "Байыҡ" конкурсы еңеүселәре һәм дипломанттары Башҡортостанда һәм унан ситтә уңышлы сығыш яһай, Рәсәй һәм халыҡ-ара кимәлдәге абруйлы конкурстарҙа яңы еңеүҙәр яулай. Уларҙың күбеһе һөнәри уҡыу йорттарында уҡый, республиканың танылған бейеү коллективтарында, мәҫәлән, Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамблендә, "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамблендә эшләй. 12+

# "ҺИНЕ КӨТӘЛӘР"

**Өфөнөң "Нур" татар театры Мөнир Ҡунафиндың пьесаһы буйынса "Һине көтәләр" спектакле әҙерләне. Премьера 6 ноябрҙә театрҙың бәләкәй залында булды.**

Пьеса реаль хикәйәләргә нигеҙләнгән, уның реаль герой-прототиптары бар. Спектакль Махсус хәрби операция темаһына - Ватанды һаҡлау кеүек ауыр, әммә изге эште үҙ өҫтөнә алған ябай егеттәргә бағышлана, тип хәбәр иттеләр "Башинформ"ға театрҙың матбуғат хеҙмәтенән. Яугирҙарҙың һөйләгәндәренән автор-журналист хәрби хәрәкәттәр биләмәһенә командировкаға барған ваҡытта яҙып алған. Спектаклдең персонаждары позывнойҙар менән билдәләнгән, барыһы ла - Башҡортостан егеттәре, улар бөгөн дә МХО-ла ҡатнаша.

- Спектакль вербатим жанрында буласаҡ, реаль монологтарҙан һәм диалогтарҙан тора. Был иһә документаль театр, нон-фикшен, - тине театрҙың әҙәби-драматургия бүлеге етәксеһе Гөлнур Усманова. - Спектаклдә яугир ирҙең һәм уның менән күрешеү өсөн фронт һыҙығына килгән ҡатынының реаль тарихы бәйән ителә. Араларындағы мендәрсә саҡрым уларҙы бер-береһенә тағы ла нығыраҡ яҡынайта.

Спектаклдең режиссеры - Азат Йыһаншин, рәссамы - Полина Емельянова. Төп ролдәрҙә - Айрат Фәтихов, Илгизә Муллабаева һәм Айҙар Хәснетдинов, Гөлназ Кашапова. Яугирҙарҙың һөйләгәндәрен Рушат Мөҙәрисов, Фәнил Ғәйзетдинов, Эльмир Хәйертдинов, Альберт Шәйхетдинов, Илшат Салаутов һәм Динар Тимершәйехов яңғырата. Әсә образын Резида Фәхруллина һәм Рәсимә Ғәйфуллина кәүҙәләндерә.

Премьера көнөндә фойела һәм залда махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы, хәрби рәссам Юрий Сивачевтың "Беҙҙең заман геройҙары" күргәҙмәһе ойошторолдо. Хәҙерге ваҡытта ул үҙе фронтта, ә уның эштәре Башҡортостандың Милли музейында, Рәсәй Сәнғәт академияһы коллекцияһында һәм илдең башҡа музейҙарында урын алған. 12+

# ӘЛФИӘ ҺӘМ ГӨЛФИӘ...

**Ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәр кейеме дизайнерҙары Әлфиә һәм Гөлфиә Хамматовалар "Адмиралтейская игла" XXXI халыҡ-ара мода, сәнғәт һәм дизайн фестивале лауреаттары булды.**



Фестиваль Санкт-Петербургта үтте. Быйыл бөтәһе 650-нән ашыу ҡатнашыусы булды, уларҙың 75-е финалға сыҡты. Гала-күргәҙмәлә һәр дизайнер үҙенең коллекцияһынан дүрт образды тәҡдим итте. "Яңы тәжрибә, яңы танышыуҙар, яңы офоҡтар! Был беҙҙең өсөн баһалап бөткөһөҙ тәжрибә булды, ижади юлыбыҙҙың артабанғы үҫешенә ҙур өлөш индерҙе", - тип билдәләне апалы-һеңлеле Хамматовалар.

Еңеүселәрҙе Тажикстанда мода аҙналығында ҡатнашыуға сертификат һәм беренсе махсуслаштырылған маркетплейста локаль брендтар урынлаштырыу мөмкинлеге менән бүләкләнеләр. Бынан алда "Башинформ" Башҡортостан дизайнерҙарының Ҡаҙан тамашаһында араһында уңыш яулауын хәбәр иткәйне. "Тамға-2025" башҡорт костюмы оҫталары конкурсында Хамматовалар "Заманса автор костюмы" номинацияһында еңеү яуланы.

АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

# ЭСКӘН ИР - ИЛ БЕТЕ

- Яман һүҙ - яман шеш, мәлендә һытырға кәрәк.
- Ауыл ауыҙы - ҙур иләк, һүҙенде һөйлә үлсәп.
- Аҡыллыла алтын һүҙ, ауыҙда утлы ҡүҙ.
- Кейем матурлығы йәнгә рәхәтлек бирмәй.
- Күпме һөйләһәң дә һандуғас булып булмай.
- Эскән ир ил бете, эскән ҡатын суска итә.
- Сәғәт һайын кейем алыштырыу - аҙғын ҡатын ғәҙәте; көнө-төнө йоҡола - ялҡау ирҙең ғәҙәте.
- Күк күкрәр - үлән үҫер, йылы һүҙҙән күңел үҫер.
- Яҡшы ат үҙ өйөрөн һәр ҡайҙан эҙләп таба, илен һөйгән ир үҙ төйәгенә үрмәләп тә ҡайта.
- Илатмағыҙ баланы: бала илаһа тау илай, тау илаһа ер һелкенә.
- Үҙ телен белмәгән, үҙенсә һөйләмәгән - үтмәҫ бысаҡ ул.
- Еҫкәнеү, темеҫкенеү, ҡыҫтырылыу, көсләшеп тағылыу - дан эҙләү ғәҙәте.
- Күп һөйләмә юҡ-барҙы, өнөң быуылыр.
- Алдаҡтан ялған, ялғандан ғәйбәт, ғәйбәттән талаш тыуа - һәр береһенән алыҫ бул.

**Мәрүә МОНАСИПОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙЫҒЫЛҺАҢ...

## бейек ағастан йығыл

Ярлы менән ҡоҙа булғансы, бай менән барымталы бул.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Аҡыл эйәһенә бер кеше мөрәжәғәт итә: "Һин һәр күренешкә аңлатма бирә алаһың, минең хәлемде лә төшөндөр әле, - ти ул һәм үҙе тураһында һөйләй башлай. - Мин элек бер нигә борсолмай, типтереп йәшәнем. Ләкин берҙән-бер көндө мин үҙемдең йөрәгемдең тибешен ишеттем. Тибешен генә түгел, йөрәгемдән ниҙер өҙөлөп төшөп тора кеүек тойолдо миңә. Ниндәйҙер алама һүҙ әйтһәм, насар ҡылыҡ ҡылһам, хатта насар уй ғына уйлаһам да йөрәгемдең бер ситенән ниҙер кителә лә, урынында яра ҡала кеүек. Был нимә - аңлатһаңсы..."**

**- Мин һиңә бер риүәйәт һөйләйем, тыңла, - тигән аҡһаҡал. - Кешене ялтҡас, Хоҙай уның тәнен дә, йөҙөн дә матур итеп эшләгән. Тик уның эске ағзаларын ғына хайуандарҙыҡы һымаҡ уҡ күрмәлекһеҙ итеп ҡалдырған. Ә шулай ҙа бер аҙҙан кешенең йөрәген матурыраҡ итеп эшләргә ҡарар ҡылған. "Кеше йөрәге хайуандарҙа булмаған тойғоларҙы үҙендә туплаясаҡ, - тип уйлаған Ул. -Аҡыл менән тулы йөрәк ҡан йөрөтөүсе тоҡ һымаҡ булырға тейеш түгел. Мин уны рауза сәскәһе кеүек итеп эшләйем һәм уның һәр тажына бер төрлө тойғо һалып, уны бер матур гөлләмәгә әйләндерәм. Күкрәгендә сәскә-йөрәк йөрөткән кеше хайуандарға ҡарағанда матурыраҡ та, аҡыллыраҡ та, бөйөгөрәк тә, камилыраҡ та буласаҡ".**

**Шулай итеп, Хоҙай кешенең күкрәгенә рауза сәскәһеләй йөрәк урынлаштырған. Ләкин кеше үҙенең был гүзәл ағзаһын Хоҙай ҡуҙаллағанса файҙаланмай. Насар ҡылыҡтар ҡылған һайын уның сәскә йөрәгендәге таждар һулып, өҙөлөп төшөп тора. Кешеләрҙең бик аҙҙары ғына ғүмере ахырына матур гөлләмәле сәскә-йөрәк менән барып етә. Ә күптәренең күкрәгендә сәскә урынына йолҡҡоланып, яланғасланып бөткән сәскә һабағылай йөрәк тороп ҡала һәм унда өҙөлмәй торған бер генә Йән тажы елберләй. Был Йән тажы бер ғүмерҙән икенсеһенә күсә, яңы тормош башлаған кешенең күкрәгендә яңы сәскә бөрөләндерә. Кешенең тыйыу әйләнеше сикһеҙ, камиллыҡҡа өлгәшкәнгәсә дауам итә. Үҙ күкрәгендә рухи тойғолар тулы сәскә-йөрәк йөрөтөүселәр Аллаға оҡшаш була һәм иң юғары баҫҡысҡа күтәрелә...**

**- Мин үҙемдең күпме таждар юғалтыуымды һәм уларҙы бер ваҡытта ла ҡайтарып булмай икәнде аңланым, шуның өсөн миңә бик ҡыйын, - тигән тәрән ҡайғыға батҡан кеше.**

**- Тормошоңдо яңынан башла, - тигән уға Аҡыл эйәһе. - Һәр изге эшең, матур һүҙең, матур уйҙарың яуап итеп сәскә-йөрәгеңдә яңы таждар бөрөләнер...**

**Шулай итеп, был кешегә бөйөк тәбиғәт сере асылған. Аҡыл эйәһенә рәхмәт әйтеп, күкрәгендә Алла сәскәһе үҫтереү тураһындағы оло хыял менән кеше ауыр һәм яуаплы юлдан ары киткән..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт: Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: 450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99
График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты - 06.11.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 06.11.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
Баҫылып сыҡты - 07.11.2025 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 2707
Заказ - 2069